РӘСӘЙ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ
ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ ФЕДЕРАЛЬ ХӨКҮМӘТЕ
БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
М.АҠМУЛЛА ис. БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ПЕДАГОГИЯ
УНИВЕРСИТЕТЫ
БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫ ҒИЛМИ-ТИКШЕРЕНЕҮ ҮҘӘГЕ

# Башҡортостандың башҡалаһы
# Өфө башҡорттары ауыҙ-тел ижады

**Өфө, 2024**

УДК 398 (=943.430)
ББК 82.3 (2 Рос=Баш)

*Баҫмаға М.Аҡмулла ис. Башҡорт дәүләт педагогия университеты редакторлыҡ-нәшриәт советы ҡарары буйынса тәҡдим ителде, Дәүләт заданиеһы буйынса баҫыла (рег.1023032800398-5-5.3.1).*

**Яуаплы мөхәррирҙәр:**
филология фәндәре докторы, М. Аҡмулла ис. БДПУ Башҡорт фольклоры ҒТҮ етәксеһе Р.Ә. Солтангәрәева,
филология фәндәре докторы, М. Аҡмулла ис. БДПУ Башҡорт фольклоры ҒТҮ баш ғилми хеҙмәткәре Н.Ә. Хөббитдинова

**Башҡортостан баш ҡалаһы** Өфө халык ижады: фольклор экспедицияһы материалдары һәм тикшеренеүҙәр / материалды йыйҙылар һәм тупланылар Р.Ә. Солтангәрәева, Н.Ә. Хөббитдинова, Л.И. Шарафитдинова. – Өфө: ИП Копыльцов П.И., 2024. – 192 с.
ISBN

Йыйынтыҡҡа Аҡмулла университеты Башҡорт фольклоры ғилми-тикшеренеү үҙәге ғалимдары тарафынан Башҡортостан Республикаһын башҡалаһы Өфө башҡорттарынан яҙып алынған фольклор, этнографик, тарихи материалдар тупланды. Китапҡа эпос, йыр, риүәйәт, йола, мәҡәлдәр һ.б. традицион жанрҙар менән бер рәттән халыҡ ижадының социаль факторына ҡағылған мәғлүмәттәр, йәғни фольклорҙың бөгөнгө заман кешеһенең рухи, көнкүрешендәге роле, урыны һәм ғәмәли ҡулланылышына бәйле материалдар индерелде. Бындай хеҙмәт милли гуманитар фәндә беренсе тапҡыр донъяға сыға, артабан республиканың башҡа ҡалаларының да халыҡ ижады системалы өйрәнелеп, тулыраҡ мәғлүмәттәр менән нәшер ителер. Өфө башҡорттарының ауыҙ-тел ижадын бер урынға йыйыу маҡсаты менән йыйынтыҡҡа төрлө йылдарҙа библиографик һирәк баҫмаға әйләнеп барған “Башҡорт халыҡ ижады” күп томлығына ингән фольклор материалдарының ҡайһы бер үрнәктәре лә индерелде.

Йыйынтыҡ ғалимдарға, киң ҡатлам уҡыусыларға, халыҡ ижады, милләттең рухи тормошо менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

**Рецензенттар.**
***Г.Р. Шағапова***, т. ф. к., М. Аҡмулла ис. БДПУ доценты (Өфө)
***З.И. Саляхова,*** филол. ф. д., ӨФҺТУ Стәрлетамаҡ фил.-ы проф. (Стәрлетамаҡ)

© М. Аҡмулла ис. БДПУ, 2024
©Авторҙар коллективы, 2024

МИНПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИИ
ФЕДЕРАЛЬНОЕ ГОСУДАРСТВЕННОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ
УЧРЕЖДЕНИЕ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ
УНИВЕРСИТЕТ ИМ. М. АКМУЛЛЫ
НАУЧНО-ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКИЙ ЦЕНТР БАШКИРСКОГО
ФОЛЬКЛОРА

# Фольклор башкир столицы Республики Башкортостан

**Уфа, 2024**

УДК 398 (=943.430)
ББК 82.3 (2 Рос=Баш)

*Рекомендовано к изданию*
*Редакционно-издательским советом БГПУ им. М. Акмуллы.*
*Печатается по плану Госзадания (рег.1023032800398-5-5.3.1).*

**Ответственные редакторы:**
*Р.А. Султангареева,*
*доктор филологических наук, руководитель НИЦ Башкирского фольклора БГПУ им. М. Акмуллы*
*Н.А. Хуббитдинова,*
*доктор филологических наук, главный научный сотрудник НИЦ Башкирского фольклора БГПУ им. М. Акмуллы*

**Фольклор башкир столицы** Республики Башкортостан: сборник фольклорных материалов и исследований / материалы собрали и систематизировали Р.А. Султангареева, Н.А. Хуббитдинова, Л.И. Шарафитдинова (г. Уфа). – Уфа: ИП Копыльцов П.И., 2024. – 192 с.

ISBN

Сборник составлен из материалов, записанных сотрудниками Научно-исследовательского центра Башкирского фольклора Акмуллинского университета во время фольклорной экспедиции в г. Уфе. В книге представлены фольклорные, этнографические, исторические материалы башкир столицы республики г. Уфы. Кроме традиционных жанров, как эпос, песня, предания, обряды, паремика и т.д. также включены информации, относящиеся к социальным факторам фольклора, т.е. материалы о месте и роли фольклора в жизни и общественной деятельности людей. Подобный труд в национальной гуманитарной науке издается впервые. Исследование фольклора башкир городов республики является актуальной проблемой и перспективным направлением. В целях концентрации фольклора жителей Уфы в сборник также включены некоторые образцы устного народного творчества, опубликованные в разные годы в многотомном своде «Башкирское народное творчество», являющемся сегодня библиографической редкостью.

Книга адресована широкому кругу читателей, интересующихся традиционной культурой городских башкир, духовным миром и мировоззрением.

**Рецензенты.**
***Г.Р. Шагапова,*** *к. и. наук, доц. БГПУ им. М. Акмуллы (Уфа)*
***З.И. Саляхова,*** *д.-р. филол. н., проф. СФ УУНиТ (Стерлитамак)*

© БГПУ им. М.Акмуллы, 2024
©Коллектив авторов, 2024

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Йөкмәткеһе**........................................................................ 5

**Төҙөүселәрҙән/От составителей** 6

Инеш һүҙ (Розалия Солтангәрәева)........................................ 8

**Боронғонан аманат.**

Баһауи "Буҙйегет" ҡиссаһы..................................................... 22

"Башҡорт халыҡ ижады"нан өлгөләр..................................... 94

**Хәҙерге заман ҡала башҡорттары фольклоры**.

Р.Ә. Солтангәрәева материалдары......................................... 100

Н.Ә. Хөббитдинова материалдары......................................... 140

Л.И. Шарафитдинова материалдары.................................... 150

**Ҡушымта.**

Тикшеренеүҙәр......................................................................... 155

Информанттар менән эшләр өсөн һорауҙар
*(Төҙөүсе Р.Ә.Солтангәрәева)*................................................... 183

Фотоһүрәттәр 190

## От составителей

В современный век глобализации, т.е. «исторического процесса трансформации мира в цельную систему, имеющую единые характеристики», острой становится проблема сохранения этнической идентичности каждого народа, комплексного изучения его истории, объективной картины о традиционной культуре, семейных ценностях, обучения и воспитания молодого поколения и т.д. Глобализация возникает в связи с возможностями цифровых, электронных средств коммуникаций, серьезно уменьшающих пространство между людьми, и технологическими изменениями, позволяющими распространять универсальные для всех культур и народов изготавливаемый продукт. Вследствие стремления к глобализации, как к цельной системе перед прогрессивным человечеством, отдельными народами стоит важная задача по сохранению своего исконного кода духовной культуры, этнического наследия, традиций, которые сосредоточены в фольклоре. Как особая дисциплина, этнопедагогика в своей основе опирается на фольклор, в котором обобщены все нравственно-этические, мировоззренческие, дидактические принципы народа, в данном случае тюркского.

В связи с этим сегодня актуальным является целевое обращение к дидактическим, воспитательным свойствам историко-культурных традиций тюркских народов, башкир в частности и фольклорно-этнографическим свидетельствам, которые являются первоисточниками для познания учащимися или обучающимися окружающего мира. Это позволит усовершенствовать и развивать на

качественно новом уровне компетенции, знания педагога в практическом применении этих народных ценностей.

Одним из шагов в этом направлении видится в использовании фольклора проживающих в городе башкир, которые являются носителями традиционной культуры, мировоззрения и этических ценностей народа в целом. В представленных в сборнике материалах, в интервью с самими информантами отражена воспитательная, педагогическая миссия фольклора. Городской житель, будучи оторванным по волею судьбы от малой родины и традиционной формы воспитания и дидактики, как никто другой понимает всю важность и значимость фольклора в педагогике, в деле воспитания детей, прививания им нравственно-этических, эстетических ценностей. Материалы, включенные в сборник, внесут свою лепту в эффективное повышение практикоориентированных, воспитательных, дидактических аспектов обучения в системе образования, дополнительного образования в области этнопедагогики.

## Инеш һүҙ.

## Өфө ҡала башҡорттары фольклоры: һаҡланышы һәм үҙенсәлектәре

Ҡала кешеһенең күңел асылы, тормош-көнкүреше, аш-һыу, кейем сифаты, ғөмүмән, йәшәү рәүеше ауыл халҡы тормошонан ныҡ айырыла. Төп факторҙар билдәле, аныҡ, әлбиттә. Бында беҙ ҡала мөхитендә ваҡиғаларҙың йәһәт үҙгәреүсән булыуын, темп һәм ритм киҫкенлеген, бәндәнең Тәбиғәттән сағыштырмаса төрлө милләт кешеләренең бер социумда булырға, ара йыйларға кәрәклеген һ. б. – барыһын да күҙаллайбыҙ. Аталған факторҙар бары ла кешенең тәбиғи асылына, булмышына, тормош-көнкүрмешенә йоғонто яһай. Ауыл кешеһенең күңеле, рухи сифаттары ла, йәшәү рәүеше лә Тәбиғәт ритмы, торошо менән яйланыуға, һәр кеше үҙ арауығында тик үҙен яуаплы хужа итеп тойоуына, дөйөм иркенлеккә яҡын булыуына бермә-бер бәйле. Тәбиғәт менән хозурланыу, уның менән "килешеү" әмәлдәрен белеү, ер-һыу мөхитен ҡәҙер итеү, йәнә эш-кәсебен, ваҡыт тойомон да ошоларға яйлау ауыл кешеһенең тышҡы донъя менән сағыштырмаса гармонияла йәшәүенә нигеҙ булып тора. Йәнә килеп, уның йән тыныслығы, ваҡыт-арауыҡ, үҙгәрештәргә мөнәсәбәте лә ҡала башҡортонан айырмалы булыу үҙенсәлектәрен билдәләй. Ауыл кешеһе алсаҡ, үҙтотошо иркен, аралашыуы бер ҡатлылыҡ һәм ихласлыҡ сигендә тора. Шул уҡ ваҡытта, ул башҡорт ифрат итәғәтле, уйы йыйнаҡ, үҙе күҙәтеүсән һәм һынсыл. Шуға бер ҡатлылыҡ тип күренгән сифаты һәр саҡ етди фәлсәфә, уйлылыҡ, ваҡиға-күренешкә эске аныҡ баһа биреүе менән йәнәшә булыр. Уның

бар булмышы, ҡылыҡтары, аралашыу сифаттары тәбиғилеге менән ылыҡтырып тора. Ауыл башҡортоноң холҡонда үҙе лә аңлап бөтмәгән, ген-ҡан төпкөлөндә ятҡан ғәзиз бер асыл – *Тәбигәт закондары һәм ундагы гармонияга лайыҡлы булып йәшәү инстинкты ята*. Шуға ла ауыл мөхите һаман халыҡ ижадының хаҡ бишеге, саф шишмәһе булып һаҡланыуын дауам итә: ошо ерлектә илһамлы ижад емештәре тыуа, үҫешә, алдағы тормошҡа, әҙәм йәшәйешенә рухи ҡорал булып таныла килә...

Әммә заман үҙгәрә, урбанистик, технологик процесстар хәҙер киңәйә һәм халыҡтың мәҙәни, ижади тормошонда ла етди үҙгәреш, трансформациялар киң урын ала бара. Ҡала мөхите – цивилизацияның айырылғыһыҙ өлөшө, йәмғиәттең һәр яҡлап үҫеш күрһәткесе ул. Шуға ла ҡала халҡы ижадын өйрәнеү – сәйәси, мәҙәни, мәғрифәти, ғилми, сәләмәтлек һаҡлау һ.б. күп сфераларҙа актуаль . Был иһә заман тыуҙырған стратегик проблемаларҙы тәрән аң-белеклек менән ыңғай хәл итеү өсөн ифрат мөһим, кәрәкле, көнүҙәк эшмәкәрлек була килә. Ижади булмышын өйрәнмәй тороп, ҡала башҡортоноң ғына түгел, бергә йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренең дә тормош-булмыш перспективаларын, күңел-хис, ҡараш йүнәлештәрен дөрөҫ байҡап, йәмғиәттең үҫеш юлдарын билдәләп булмай. Ҡаланың рухи ҡаҙаныштары баһалы, әхлаҡи, мәҙәни донъяһының юғарылығы – яңы быуатта кешелектең прогрессив үҫешенә аныҡ гарантия ул.

М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты йәки Аҡмулла университеты Башҡорт фольклоры

ғилми тикшеренеү үҙәге башлаған был хеҙмәт – ҡала башҡорттары фольклорын системалы өйрәнеү, йыйыу, һаҡлау, донъяға сығарыуҙа беренсе тәжрибә һәм артабан оло, маҡсатлы йүнәлештәргә ойотҡо булыр. Ҡала фольклорын өйрәнеү, ғөмүмән, донъя ғилемендә, бөгөнгө гуманитар фәндәрҙә иң көнүҙәк мәсьәләләрҙән һанала. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Аҡмулла университеты, Башҡорт дәүләт университеты (2022 йылдан – Өфө фән һәм технологиялар Университеты йәки Өфө университеты), һуңғыһының филиалдары булған З. Биишева ис. Стәрлетамаҡ, Һ. Дәүләтшина ис. Бөрө һәм Сибай институттары-ойошторған ғилми экспедициялар башлыса тик ауылдарҙа эшләне һәм ерле халыҡ ижадын туплау, һаҡлау, баҫтырып сығарыу эшен системалы алып барҙы. Һөҙөмтәлә, Башҡортостандың бөтә төбәгенән, шулай уҡ, башҡорттар күпләп йәшәгән тарихи территорияларҙа (Рәсәй Федерацияһының Силәбе, Һарытау, Ырымбур, Ҡорған, Һамар өлкәләре, Татарстан Республикаһы, Пермь крайы) яҙып алынған материалдар милли фольклорҙың нигеҙен тәшкил итә. Йыйылған материалдар “Башҡорт халыҡ ижады” күптомлығында башҡортса (36 том), русса 12 том донъя күрҙе. Был алтын фонд Башҡортостан, Рәсәй фольклористикаһында башҡорт халыҡ ижадын ифрат бай, күп жанрлы һәм ошо милләттең бик боронғо цивилизацияларға тамырланған рухи булмышын сағылдырған ҡиммәтле мираҫ итеп танытты. Шул уҡ ваҡытта *ҡала башҡорттары* тигән айырым этно-мәҙәни, социологик-мәҙәни,

субмәҙәни (субкультура) тигән күренеш һаман да әле ғилми рәүештә системалы, комплекслы өйрәнелмәгән.

Ҡала мөхите – ғөмүмән, башҡорт тарихында йәш феномен түгел. Б.э.т. III меңйыллыҡтарҙа уҡ хәҙерге башҡорттарҙың дәү ата-бабалары йәшәгән ҡалалар билдәле булған: Ҡараҡыя, Арҡайым, Һынташ һ.б. Бындай ҡалалар булыуы, уларҙың йәмғиәт,дәүләт үҙәге, идара итеү бағаны булыуына ла шик юҡ. Шуға күрә оҙайлы йәшәү тарихында борон-борондан башҡорт юғары аңлы эколог, ер-һыуҙы кәметмәй йәшәүҙе бурыс итеп алған алдынғы ҡарашлы өммәт булған тип раҫлай алабыҙ. *Ер-һыу ҡәҙерен аҡыллы файҙалана белгән, халыҡ тормошон конструктив алымдар менән ыратып йәшәй белгән дәүләт ҡануниәте күрһәткесе был.* Шуға дәлил: башҡорттоң “йәйләү”, “көҙләү”, “ҡышлау”, “яҙлау” тигән борондан килгән төшөнсәләре булған. Улар иһә башҡорт милләтен борон-борондан һис тә күсмә халыҡ ҡына итеп түгел, ә тормош-көнкүрешенең, йәшәүенең бик аныҡ сәйәси, дәүләтсел ҡуйылғанын күрһәтә. Борон-борондан биләгән изге территорияһын даръялай ҡан түгеп яҡланған халыҡтың Ер-һыуын һаҡлау, ҡәҙер итеү ҡанундары булыуын раҫлай был күренеш. Тәбиғәт байлыҡтарын һәр саҡ самалап тотонған, яланға мал сығарыу мәлдәрен, тирмә ҡороп, Тәбиғәттә күңел-йән торошон яйлап, аң-фекерен таҙалап торған, шулай уҡ, миҙгел-ваҡыт файҙаһын, ер эшкәртеү осорон да уңайлап, һаҡсыл йәшәй белгән халыҡ белеме, тормош ҡағиҙәһе улар.

Һуңғараҡ дәүерҙәрҙә иһә (XII-XIX б.б.) урбанистик тенденциялар социаль, мәҙәни, ижтимағи күренеш булараҡ, әүҙем үҫешкән мәлдә

“ауыл” һәм “ҡала” башҡорттары тигән айырымлыҡ шартлы исем булараҡ үҙ урынын ала килә. Ижади дәрт-ҡомары, Тәбиғәттән илһамланыу асылы, импровизацияға әүәҫлек күрһәткестәре иһә башҡорт милли булмышынан ҡалала йәшәһә лә юғалмай. Әммә мөхит, ваҡыт-арауыҡ, тормош ритмы айырымлыҡтары, йәшәү-көнкүреш рәүештәре үҙгәреүе милли ижадта, фольклорҙа сағылмай ҡалмай. Һүҙ, көй, уй-фекер тылсымын олоҡлай белеү, файҙаланыу, артабан боронғо белекле мираҫты быуындан-быуынға тапшырыу – башҡорт рухи донъяһының, әхлаҡи кодексының үҙәге, идеологияһы, изге аманаты булып ҡала килә.

“Урал-батыр” ҡобайырында, әкиәттәрҙә, миф-риүәйәттәрҙә “булған ти бер ҡала”, “һарай-ҡала балҡыған”, “алтын шәһәр” тигән атамалар йыш осрай. Был инде милли фольклорҙың сығанаҡ идея тамырҙары, тәүбулмышы, тәбиғи асылы ауылда ла, ҡала мөхитендә лә, дала илендә лә, ярым күсмә тормош көтөү даирәләрендә лә берҙәй рухиәт тотҡаһы булған, өҙлөкһөҙ үҫешә барған Традиция өлгөһө, тигән һүҙ. Халыҡ ижады ул – бик күп тамырлы, күп төрлө саф шишмәләрҙән, ер-һыу үҙенсәлектәренән һутланған, бер ҡасан һулымаясаҡ ифрат тәрән, изге рухи нигеҙле милләт Ағасы.

Ҡала башҡорттары тигән этник феномендың фольклорын, ижадын махсус өйрәнеү – йәмғиәттең яңы заман геополитик тормошонда ифрат мөһим, кәрәкле, перспективалы һәм етди ғилми мәсьәлә, тинек. Уны маҡсатлы, системалы байҡауға аныҡ сәбәптәр бар. Улар түбәндәге:

Беренсенән, ҡала башҡорттары фольклоры – XXI быуатта милләттең аң-фекер торошон, көнитмеш үҙенсәлектәрен, урбанистик тенденциялар йоғонтоһон, ваҡыт-арауыҡ-урын категорияларының функцияһын асыҡ сағылдырған ижади феномен ул. Ауыл һәм тәбиғәт мөхитенән айырылған, әммә милли рухиәте, тәбиғи асылы ауылда һут алған, уны дауам иткән халыҡтың ижады ул бөгөн ҡала башҡорто ижады. Бында ниндәйҙер кимәлдә стилизациялар, ябайлаштырыу ҙа бар. Әммә милләттең ижадсы икәненә кәрәкле күрһәткес сифаты күмемәйҙер.

Икенсенән, был төр этник феномен – милләтең артабанғы тормошо, тарихи эволюцияһы, үҫеше, рухи нығыныу юлдарын күҙалларға бик сағыу миҫал. Ауылда йәшәгән, һуңғараҡ ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында ҡалаға килеп йәшәй башлаған башҡорттың холоҡ асылы, менталь тәбиғәте, генетик хәтер торошо үҙгәрмәй тиерлек, киреһенсә, үҙенсәлекле асыла. Ят һәм төрлө мәҙәниәттәр урауында ҡалған этник мәҙәниәттең төп асылдары терелә, яңы сифаттары заманса байыға ғына бара. Тормош-көнкүреш итеү шартарына бәйле булараҡ, ҡала тиҙлектәрендә халыҡтың үҙен тойоу, яраҡлашыу процесстарында донъяны күҙаллау, тыуған телендә сағылдырыу ҡеүәһе, ижад итеү маһирлығы бермә-бер үҙгәрештәр кисерә. Ҡайһы осраҡта ҡыйынлыҡтар ҙа (мәҫәлән, туған телдең ҡулланыш  функцияһы тарайыуы) була. Шул уҡ ваҡытта ошо үҙгәрештәрҙе менталь тәбиғәтенә яраҡлап алған башҡорттоң фольклор хәтере, миллилек сифаттары тотороҡло ҡала. Ҡалаға килеп йәшәй башлаған башҡорттоң теле, фиғеле, үҙен тотошо,көнкүреш

итеүе, этикеты, кейенеү, аш-һыу рәүеше ҡала мәҙәниәтенә яраҡлаша. Икенсе яҡтан – ҡалала тыуып, ҡалала үҫеп, милли традицияларҙа ижад иткән башҡорт иһә “ҡала башҡорттары” тигән этнофеноменға ысын мәғәнәһендә яуап бирә. Бында ике ҡатлам берләшә – ҡалаға килеп йәшәй башлаған башҡорт ижады һәм ҡалала тыуып, милли фольклор традицияларын дауам итеүсе башҡорт ижады. Ошо икенсе ижад төрө нәҡ XXII быуаттарҙа йәшәйәсәк башҡорт милли булмышын күҙаллата ла инде. Киләсәк быуын башҡорт цивилизацияһына мәҙәни, рухи нигеҙ, этнотип асылы һалына.

Был китап – ҡалаға килеп оҙайлы йәшәүсе башҡорттарҙың фольклор хәтере, ижади маһирлығы, туған телендә һөйләү ҡеүәһе, мәҙәниәте миллилеген асыҡлауға арналған булараҡ – беренсе тәжрибә. Ниндәйҙер кимәлдә был хеҙмәт филологик юҫыҡта ғына түгел, ә тел ғилеме, этнография, социология, тарих фәндәренә лә ҡағылышлы, кәрәкле мәғлүмәттәр бирә. Йәғни, ҡала башҡорттары фольклоры тигән билдәләмәгә беҙ ҡалала 25-40 йыл тирәһе йәшәгән башҡорт халыҡ хәтере өлгөләрен индерәбеҙ. Ҡалала тыуып, ҡалала йәшәгән халыҡ ижадын белгән башҡорттарҙың иң башта иҫәп-хисабын, уларҙың күрһәткес исемлеген төҙөү маҡсат булып ҡала. Халыҡ хәтерендә һаҡланған жанрҙарҙы йыйыу, махсус программа буйынса маҡсатлы өйрәнеү ҙә алда тора. Әйтеү кәрәк – фәҡәт ҡалала тыуып, шунда йәшәгән ошо милли даирә “ҡала башҡорто” этнофеноменына тап килә, ә ижады “ҡала башҡортоноң халыҡ ижады” тип атала ала. Был йыйынтыҡта тупланған мәғлүмәттәр иһә

киләсәктә киң йәйеләсәк ғилми йүнәлеш, актуаль мәсьәләгә ҡиммәте ҙур объектив мәғлүмәт фонды була алыр.

---

Өфө башҡалабыҙҙың тарихы бик боронғо тамырлы. Мең ярым йыл элек уның боронғо карталарҙа барлығы билдәле. Имәнҡала тигән исеме лә һаман халыҡ аңында, тере хәтерендә йәшәй.

Беҙҙең эраға тиклем II-III мең йыллыҡта Көнъяҡ Уралда боронғо арийҙар, уларҙан алда сармат ҡәбиләләре йәшәп, бик күп археологик мираҫ ҡалдырған. Улар рәтендә, әлбиттә, боронғо Өфө ҡалаһы булыуы ла тарихта шикһеҙ ысынбарлыҡ. Күптән түгел башҡалабыҙҙың уғата ҡарт нигеҙҙәрен табып, мең йылдан ашыу тарихын иҫбат иткән Нияз Мәжитов исеме фәндә лә, йәмғиәт тормошонда ла ифрат ҡәҙерле. Башҡалабыҙ Өфө борон-борондан Имәнҡала тигән бөйөк атамаһы боронғо башҡорттарҙың рухи, мәҙәни, сәйәси, этнологик мәркәзе, үҙәге булғанына изге хәтер һаҡлаған! Сөнки борон-борондан ҡалалар ағастан төҙөлгән.

Бөгөнгө көндә Өфөнөң 450 йәшен билдәләүҙең тарихи шартлылығы сәйәси мәсьәләләрҙе алға ҡуйған дәүләт системаһына яраҡлы, күрәһең, Әммә халыҡ хәтерендә беҙҙең ҡалабыҙҙы ата-бабаларыбыҙ "әүлиәләр үре", "алиһәләр төшә торған урын"тип атаған. Имәнҡала исеме лә билдәле Икенсе бер сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, борон Өфө ҡалаһы ултырған түбә изге заттар ерләнгән зыярат тип һаналған, шунлыҡтан унда йәшәмәгән халыҡ. Ҡаланы төҙөгәндә лә 1574 йылдан алып һалына башлағас та яҡын тирә башҡорттар был төҙөлөштә ҡатнашмай, алыҫтан, Урал аръяғынан бер ике башҡорт ҡына килеп ҡатнаша. Урындағылар иһә

был тауҙың ни тиклем изге икәнен аңлаған..Тауҙы олоҡлау йолаһына яраҡлы йәшәгән. Шуға ла бөгөн һәр төрлө төҙөлөш алдынан үткәрелгән ер ҡаҙып тикшеренеүҙәр ваҡытында күбеһенсә ҡатлам-ҡатлам төрлө дәүерҙәргә ҡараған зыяраттарға тап булалар. Һуңғы табыштарҙың береһенә миҫал. Зәки.Вәлиди урамында Башҡорт дәүләт университеты ҡаршыһында яңы ятаҡ төҙөр өсөн асылған ҡаҙмаларҙа ана шундай зыяраттар ҡатламына тап була ла инде ғалим археологтар. Уларҙың яҡынса күҙаллауы буйынса, был ҡаҙмалар Ҡара Абыҙ мәҙәниәтенә, йәғни беҙҙең эраға са III-II-се быуаттарға ҡарауы ихтимал [https://resbash.ru/news/proishestviya/2018-11-15/v-tsentre-ufy-nashli-drevnee-zahoronenie-1609048].

2010 йылда Йоматау ял йортонда балалар менән махсус мәҙәни программаға ярашлы халыҡ уйындары, йыр-бейеү төрлө йолалар өйрәнеү, тәбиғәтте ҙурлау байрамдарын, йолалар үткәрҙем. Ял-тәнәфескә туҡталғас, бер оло йәштәге бик мөләйем әбей килеп сәләм бирҙе лә, иҫемдә ҡалырлыҡ ошондай һүҙҙәр әйтте: “Йоматау – борондан бик изге тау булған. Боронғо башҡорттар унда менеп теләк теләгән, ялбарыу йолалары үткәргән. Ямғыр саҡырыу, яу-дошманды ҡурҡытыу, ваба һ.б.сирҙәрҙән ҡотолоу өсөн уның итәгендә бик күп халыҡ йыйылыр булған. Шунда уҡ йәйге байрамдар үткәргән, “тау”, “тауға менеү”, “ҡояш сыуағы”, “сыуаҡ апай ахыры ул”, – тине. – “Был тау – аллалар тауы, бөтөн Өфө “аллалар тауы”, “әүлиәләр үре” булған, изге йәндәр төшә торған урын бит ул. Ҡартатайым һөйләгәйне”, тине ул. Ҡәҙерле Башҡалабыҙҙың борон-борондан ошондай ҙа тылсымлы, хикмәтле изге Урын булғанын һәр кеше белеп

йәшәргә был һүҙҙәр бик тә кәрәкле Белем! Тау баштары борондан иң изге, үтә лә таҙа, олоҡланған Ер икәнен белеп, тәңретау тип атаған ата-бабалар. Өфө тауының изгелеген аңлап, ҡәҙер итеп йәшәргә бурыслы беҙ.

“Рәсәй-Башҡортостан дуҫлығына 450 йыл тулыуға арналған байрам мәлендә Дуҫлыҡ монументы янында тағы бер мәғлүмәт яҙып алынды.

– Ни өсөн Өфөнөң флагында йәтсә һүрәте икән?

– Һыуһар, йәтсә лә тиҙәр – бик йылғыр, һылыу, егәрле йән эйәһе булған. Ул йәнлекте би-и-ик борон ошонда беренсе башҡорт һунарсыһы күргән. Матур, мөһәбәт, ап-аҡ ташлы тау, йылға янын буйлап йөрөгәндә, бик һылыу бер йәнлекте күрә. Кешенең алдына ла, артына ла сығып ҡарай, ти. Һунарсы йәнлектең был уйынында бер ишара һиҙә лә, артынынан китә, атмай. Теге уйнап, ҡайҙалыр әйҙәй икән быны. Һунарсы уйлы булған. Был миңә Хоҙай ишараһылыр, тип (элек кеше бик һиҙгер булған бит ул), кейек булған ерҙә ҡалған. “Ошонда төпләнәйем әле”, – тип егет торлаҡ ҡорған. Ғаиләһен алып килгән. Шунан киткән инде ҡала…”. Һөйләүсе ағайҙың исем-шәрифе яҙып алынғайны ла, әммә юғалған шул. *Әммә ошо хәкиҡәт шикһеҙ; археология, тарих, этнография фәндәре халыҡ Хәтере биргән мәғлүмәттәргә таянғанда ғына фән раҫлығы, тулайым ғилми ҡараш тыуа.*

Бына ошондай телдән-телгә күсеп, бик дәү, сал тарихтар, ысынбарлыҡтар, метафоралар, образдар һынында тәрән йәкмәткеле һабаҡ, терәк булырҙай аҡыл булып төйөнләнә. Бындай алтын хәтер һандығынан сыҡҡан хәкиҡәт һәр төрлө тарихи документтарға

ҡарағанда ҡиммәт һәм кәрәкле. Сөнки фольклорҙа бер генә образ, ваҡиға, сюжет алымы ла осраҡлы, буш түгел. Хатта бик ышанып бармаҫ уйҙарма, ҡатмарлы, сәйер фантазия төбөндә лә ысынбарлыҡ ята. Ундай мәғлүмәттәр бик күп, улар араһынан иң "тоҙон" ғына, иң нигеҙле, фекерле хәбәрҙе халыҡ хәтереаманат итеп, яман күҙҙән, тар аҡылдан йомаҡ итеп һаҡлап ҡала. Бына ошондай изге урын, бик боронғо дәүерҙәрҙән тау башында ҡәлғә булып ҡалҡып, күп халыҡтарҙы туплап, тирә-яҡ илдәргә үрнәк булып торған ул Имәнҡала – Өфө. "Аллалар тауы"нда балҡып торған Өфө – Имәнҡалабыҙҙың башҡорт милли рухиәтенә арналған, халыҡ ижадын барлаған был беренсе китап. Башҡала – экономик, сәйәси йәһәттәрҙән генә республика үҙәге түгел. Башҡаланың рухи, дәрәжәһе, ижади булмышы юғары, тәрән тарихлы, мәғлүмәтле булғанда ғына республиканың көсө, даны, абруйы ныҡ була. Сөнки башҡала- ул дәүләт һәм дәүләтселектең алтын бағаны, терәге.

Киләсәктә башҡалабыҙҙың тарихын тәрәндән барлауға, рухи үҫешкә, был хеҙмәт яңы фекерҙәр, фәндә яңы форматлы тикшеренеү мәсьәләләре, йүнәлештәр асһын.

**Йыйынтаҡтың төҙөлөшө.**

Башҡала башҡорттары фольклоры, ғөмүмән, ҡала мөхитендә һаҡланған халыҡ ижады – ифрат киң төшөнсә һәм әлегә тикшерелмәгән ғилми, мәҙәни мәсьәлә. Ул үҙ эсенә бик оҙайлы быуаттарҙы, күп ҡатмарлы ваҡиғаларҙы ла ала. Ҡала башҡорттары фольклорын, уның рухи тормошон, тарихи, социаль-мәҙәни үҫеш процесстарын тулыраҡ күрһәтеү ниәтендә был йыйынтыҡҡа беҙ

төрлө йылдарҙа, йәғни XIX быуаттан билдәле булған Баһауиҙың “Буҙйегет” ҡиссаһы һәм Өфөлә яҙып алынып, ҡасандыр “Башҡорт халыҡ ижады” күп томлыҡ тупламаға индерелгән жанрҙарҙы ла урынлаштырабыҙ.

Материалдарҙы йыйыусылар исемлеге һәм информанттар исемлеге алфавит буйынса бирелә. Артабанғы йыйыу, тикшеренеү эштәрендә методик ярҙам булһын өсөн китапты төҙөүселәр ҡулланған “Һорауҙар” тәҡдим ителә.

Жанр төрҙәре иһә информант һөйләүе буйынса уның исеме янында туплана; мәғлүмәттәрҙе жанрҙар буйынса ошолай итеп бүлмәй биреү информанттың хәтере, белеме, халыҡ ижадына ҡарата мөнәсәбәтен бар бөтөнлгөндә күҙалларға уңайлы булыр.

Ҡайһы бер аңлашылмаған һүҙҙәргә йондоҙсоҡ ҡуйыла, аңлатма бирелә.

Йыйынтыҡ төҙөлөшөндә тағын бер үҙенсәлек бар. Фольклорҙың социаль факторы, бөгөнгө көндә милләт рухиәтендәге, йәмғиәт тормошондағы роле, урыны, халыҡтың уға ҡарашы, ҡуллана белеүе һ.б. – бары ла заманыбыҙҙа көнүҙәк һорауҙар. Шуға күрә “Һеҙҙең өсөн халыҡ ижадының әһәмиәте нимәлә ул? Тормошоғоҙҙа урыны ниндәй?”, – тигән махсус һорауҙарға яуаптар үҙаллы урын биләп, материалдарҙан аҙаҡ бирелә. Был һорауҙарға яуаптарҙа, беренсенән, ҡала башҡорто хәтерендә фольклорҙың һаҡланыу кимәлен белеү генә түгел, ә, ғөмүмән, халыҡтың рухи, мәҙәни тормошоноң киләсәктәге үҫешенә уңай, кәрәкле юлдар, йүнәлештәр барлау, яйлау өсөн белем табыла. Икенсенән, зыялылар, интеллигенция вәкилдәренең һәм ябай

халыҡтың фольклорҙы аңлау, олоҡлау сифаты, йөкмәткеһе төрлө булһа ла, уртаҡ, универсаль ҡараштар, позициялар бар. Был фекернамәләр инде традицияларҙың, халыҡ ижадын ҡәҙерләүҙең йәмғиәт алдында торған стратегик, сәнәғәт, сәйәси, сәнғәти мәсьәләләрҙе уңай хәл итеүгә бик кәрәкле була ала. Сөнки халыҡ ижадына ихтирам, һөйөү кимәле милләттең цивилизацияһына баҫҡыс,юғары мәҙәнилегенә дәлил. Йәнә милли мираҫты ғәмәли ҡулланыу, йәш быуынды илһөйәр, гражданин итеп тәрбиәләү, башҡарыу-сәхнәләштереүҙә борондан халыҡ ҡуйған талаптарҙы белеү буйынса махсус белем, тәжрибә фонды ла булып тора зыялылырҙан алынған был белешмәләр.

Өсөнсөнән, халыҡ ижадына мөнәсәбәт, үҙаллы ҡараштарҙа иһә милләтең тәрән фәлсәфәһе, тормошҡа, ҡәҙере сикһеҙ булған аманатҡа һаҡсыллығы, юғары гражданлығы асыла. Бындай концепциялар, фекерҙәр милләттең алдағы цивилизацияға күсеү һәм урыны булыуына гарантия. Фольклорға бәйле ҡараштар менән танышҡанда уҡыусылар быға шаһит булыр. Материалдарҙы, информанттарҙың фекерҙәрен ғилми байҡау инде алда торған яңы маҡсаттарға, ғилми өйрәнеүҙәргә, ҡала фольклорының бәҫен күтәреүгә йүнәлеш күрһәтер.

Йыйылған мәғлүмәт һәм заман үҙгәрештәрен, йәмғиәттең үҫеш хәлдәрен системалы байҡау һөҙөмтәһендә беҙ ошондай һығымталар яһап тәҡдимдәр индерәбеҙ:

1. Ҡала мөхитен, уның айырмалы үҙенсәлекле шарттарын иҫәпкә алып, тыуған тел, милли рухиәтте үҫтереү йәһәтенән мәғариф

системаһында ҡала мәктәптәре өсөн, шулай уҡ башҡорт мәктәптәре өсөн махсус уҡыу-уҡытыу Программаларын эшләргә ваҡыт.

2. Ҡала экологияһын, халыҡтың рухи сәләмәтлеген ҡаланың милли, ижади булмышын һаҡлау, фольклор престижын үҫтереү, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе камилаштырыу хаҡына ҡала советы, ҡала районлары советтарына, Халыҡтар дуҫлығы йорттарына, Халыҡтар Ассамблеяһына махсус Милли проекттар булдырырға һәм эҙмә-эҙлекле эш алып барырға кәрәкле тип һанайбыҙ.

3. Республика ҡалаларының милли йөҙөн сағылдыра торған, башҡорт халыҡ ижады эпостары, әҫәрҙәренән алынған идея-образдарға таянып, масштаблы архитектура комплекстарын асыу ифрат актуаль мәсьәлә. Әйтергә кәрәк, Өфө башҡалабыҙҙың милли этник йөҙө әлегә бушаҡ, башҡорт тамырлы боронғо ҡала булыуы ла аныҡ сағылмай. Был йәһәттән маҡсатлы, фекерле эш башланыр тигән өмөттәбеҙ.

Шулай итеп, Өфө башҡорттары халыҡ ижадының ҡайһы бер өлгөләре уҡыусыға, файҙалы тарихи, ғилми сығанаҡ булыр.

*Розалия Солтангәрәева.*

**Боронғонан аманат.**

**Баһауи**

## БУҘЙЕГЕТ ҠИССАҺЫ[1]

Был ҡисса Баһауи тигән кеше тарафынан Буҙйегет сюжетына ҡараған фольклор әҫәре һәм ҡулъяҙма варианттары нигеҙендә 1842 йылда Өфөлә яҙылған. Автор был хаҡта ҡулъяҙмаһында былай ти: “Өфө шәһәренә барғанда, “Буҙйегет” китабын бер ҡатар күргән инем. Фарсы теле менән яҙылмыш ине. Йыры күп ине, һүҙе моңло ине. Егеттең аты Буҙйегет ине, ҡыҙҙың аты Ҡарасәс ине... Үҙебеҙҙең күңелебеҙ ҡайғылы көндә “Буҙйегет” китабына ҡайғыбыҙ төкән бер хәлүәт ерҙә мең дә һигеҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылында яҙып ирдек. Өфө илендә Ғәбделғәлләм тигән егеттең ханәһендә. Инде беҙҙең был көйләп уҡыу өсөн сығарған китабыбыҙ һәр ерҙә йәйелерҙер”.

Баһауиҙың үҙе тураһында тулы мәғлүмәттәр билдәле түгел, уның хаҡында әҫәрҙең үҙенән табырға була.

“Буҙйегет” ҡиссаһының әлеге тексы “Башҡорт әҙәбиәте антологияһы (2-се т.) китабынан ҡыҫҡартылып алынды (Өфө, 2007).

### Әл-ҡиссаи Буҙйегет

Әл-ҡиссаи Бузйегет китабы бу торор. Уфа шәһәренә барғанда Бузйегет китабыны бер ҡатар күреп идем, фарсы теле берлә яҙылмыш иде. Йыры күп юҡ иде, сүзе моңло ирде. Егетнең аты Бузйегет иде, ҡызның аты Ҡарачәч ирде. Бузйегетнең дустының аты билгесез ирде. Бер Кәмин дип язып идек. Бу ғәлат[2] иде. Йәнә шәһәрнеңаты юҡ иде. Без Нәфсе ай дип язып ирдек. Үземезнең күңелемезҡайғылы көндә Бузйегет китабын ҡайғымыз төкән бер хәлүәт ердәмең дә сикез йөз ҡырыҡ икенче йылында язып ирдек Уфа илендә Ғәбделғәлләм дигән егетнең ханасында. Инде безнең бу йырлапчығарған китабымызны һәр ергә йәйелептер. Әүүәл е яҙғанда «әл-ҡиссаи» дип

---

[1] Баҫмаға Н.Ә. Хөббитдинова әҙерләне.

[2] Ғ ә л а т — хата, яңылыш.

язып идек. Шәкертләремез Бузйегет китабыны барчасы анберлә язылса дикән сәбәпле, барча сүзен ан берлә яздыҡ, безнеңмоңлоғ әдәмләрнең күңеле ачылсын дип. Китабыны ан берлә[3] яз-маҡка рөхсәт бардыр... Арасында ғибрәт сүзен яздыҡ.

Әл-ҡисса. Ҡарачәч сылыу бер шәһәрзаданың ҡызы ирде, сәхипжамал[4] ирде. Ун биш йәшендә Бузйегетне төшөндә күрде, ғашиҡ булды, көннән-көнгә йөзә сулды, бер йыл ҡайғылы булып йөрөдө. Һәм табибдаркәрләр[5] ғилаж[6] тапмады. Икенче йыл тағы Бузйегетне төшөндә күрде, шунда һәм ҡыз егетне итәгенән услап жауап сораны...

Ҡызның әйткән жауабы:

Төндә илап, көндөҙ зар
Мин йөзеңә интизар.
Ни сәбәптән булдың йәр,
Мине мындай ҡылып зар?
Асылың әйтсән кәрәкте.
Бер йыл булды — янармын,
Үткән көннө санармын,
Һич ғаҡылымдан танармын,
Сүзгә ни көн ҡанармын —
Атың әйтсәң кәрәкте.

Әл-ҡисса. Буҙйегет төшөндә, сабыр ҡыл дип, әйткән сүзе:

Бән — сәнең, сән — бәнең
Жаныма төштө жаның,

---

[3] Ан берлә — көйләп уҡыу өсөн.
[4] Сәхипжамал — матур, күркле.
[5] Табибдаркәр — дауалаусы.
[6] Ғилаж — сара, әмәл.

Сытарма[7] зарлап аның.
Сабыр ҡылсаң кәрәкте.
Ғашиҡлар зарлап үтәр,
Тәңреңдән рәхмәт көтәр,
Моратҡа бер көн етәр —
Сабыр ҡылсаң кәрәкте.
Сабыр ҡылмай эш бөтмәç,
Мизгелсез арҙың[8] етмәç,
Зарлау мән ҡайғың китмәс —
Сабыр ҡылсаң кәрәкте.
Күнмәй булмас хаҡ салса,
Уйын мән көлкөң ҡалса,
Буйыңа бер сир йоғонса,
Әсең ҡайғыға тулса,
Күрерсең мизгел булса —
Сабыр ҡылсаң кәрәкте.
Боронғо үткән ғашиҡтай,
Ғаҡылың нисек кәрәкте.
Бүтән йәргә ҡайырылмай,
Нәфсеңә тиң кәрәкте.
Безнең өчөн һәр ердә
Йәнең ҡыйсаң кәрәкте,
Ҡылма күңелең боҙоҡтай,
Ағарып йәр йөҙөктәй,

---

[7] Сытарма — йөҙөңдө һытма.
[8] Арз — теләк хеләк, хыял.

Зөләйхә мән Иософтай —

Сабыр ҡылсаң кәрәкте.

Булды Ғашиҡ Ҡайғыдай.

Күркең йортҡа йәйелде.

Ләйлә берлә Мәжнүндәй

Сабыр ҡылсаң кәрәкте.

Әл-ҡисса. Ҡыз сабыр ҡылды. Әкә-чичәсе[9], йорто һич ғилаж тапмады. Өчөнчө йыл тағы төшөндә күрде.

Заманнан күп заманлар үтте, диде,
Ханзадаға ялғыз ул битте[10], диде.
Яҡшы узаҡ дәуран сөрмәк бармы?
Донъянан арманы мән үтте, диде.
Бер ул тыуды — батшаға, йортҡа лайыҡ,
Сауын[11] әйтеп, туй ҡылды илгә йәйеп.
Йортона күп яҡшылыҡ ҡылған икән,
Туй ҡылды, һәр жандан малды суйып.
Заманнан күп заманлар үтте, диде,
Тәңредән аманлығын көттө, диде.
Ете йәштән баласы уҡыу уҡып,
Ун йәшенә был инде етте, диде.
Йөрөптөр яманны уйына алмай,
Ялғанның ҡыҙығына күңел ҡуймай.
Ҡулына ҡөрьән мән китап устап,

---

[9] Әкә-чичәсе — ата-инәһе.
[10] Б и т т е — насип булды.
[11] Сауын — бүләк.

Барадыр мулласына бер көн ҡалмай.

Күрмәгән күрәйен дип йөрөй икән,

Таң ҡалып йөҙөн күргән тора икән.

Башында алтын айдар[12] толомо бар,

Айдайын яхшы булып йөрөй икән.

Бер көндә ятып йоҡтап төш күрәдер,

Алдында арғымаҡлы ҡыз күрәдер.

Ул тағы бер батшаның ялғызы икән,

Бер ялғызға бер ялғыз түш буладыр.

Арзы әйтеп, алдында сүз сорады,

Ғашиҡ йәрнең эздәсәң ник ҡурайды.

Яраҡайның ярлығы шулай икән —

Берен бере мәғкул очорады.

Ҡыз төшөндә егеткә биргән жауабы:

Ғафилмы сән, вай егет,

Егет буйтеп ятырмы?

Атҡа менеп чыҡмайын,

Ил улжаға батырмы?

Мин юлыңда интизар,

Мәйлең булса, эздәй бар.

Без — бер батша ялғызы,

Сезнең өчөн булдыҡ зар.

Өч йыл булды — сыҡтаймын,

Киләме дип юҡтаймын,

[12] Айдар — сәс шәлкеме.

Йөҙөңдө бер күрмәйен,
Ҡайтеп чыдап туҡтаймын?
Жаның жанға ҡушылған,
Чын хәҡиҡәт йәр булсаң,
Безнең өчен зар булсаң,
Шәһри Бостан Румдан
Безне эздәсәң, табырсың.
Бостан шәһәренең былбылы,
Сирай ернең бер гөлө,
Дарйа кичеп, тауны үтсәң,
Безне эздәсәң, табырсың.
Без — даръяның гәүһәре,
Бер булырбыз йәүһәре.
Алтын-көмөш ҡулға алып,
Абыз дисәң, табырсың.
Без — алтындан терәкбез,
Эздәгәнгә — кәрәкбез.
Юлдашларың жанға алып,
Безне эздәсәң, табырсың.
Нурдан өлгө алғанмын,
Тутыйғоштай булғанмын,
Таяғыңды ҡулға алып,
Безде эздәсәң, табырсың.
Ғибрәт сүзне белгәнләр,
Яҡын үсә килгәнләр,

Ҡоллоҡ ҡылсаң аллаға,

Әхирәтне табырсың...

Төшөндә бу ҡыз йырлап ғәйеп булды,

Егетнең күкрәгенә ҡайғы тулды.

Баҡсы[13] менән дәргәрдан дарман тапмай,

Егетнең көндән-көнгә йөзә сулды.

Әкәсе менән анасы хибез[14] булды,

Ялғызы өчөн жанларын ҡорбан ҡылды.

Дәртенә ялғызының дарман тапмай,

Әкәсе мән чичәсе зарлы булды.

Икенче йыл төшөндә дағы күрде,

Ҡыз килеп ҡәдам басып сәләм бирде.

Күҙенән йәш ағыҙып, ҡул ҡаушырып,

Ғарзын әйтеп, егеткә яуап бирде.

Ҡызның төшөндә әйткән жауабы:

— Дүрт йыл булды, сыҡтаймын,

Киләме дип, юҡтаймын,

Хәбәрең юҡ, үзең юҡ,

Сәләм дә бер сүзең юҡ...

Егетнең ҡыҙға биргән жауабы:

— Син — бер сүрәт назир сән,

Кич ҡашымда ахыр сән,

Уяна килсәм, янда юҡ.

---

[13] Б а ҡ с ы — им-томсо.

[14] Хибез — ауырыу.

Ни хәйратлы мизар сән?

Ни ерлексең, ереӊ әйт.

Тыуған-үçкән илеӊ әйт.

Мине мондай зар ҡылма,

Аныҡ ҡылып, йүнеӊ әйт!

Илеӊ синеӊ белмәсәм,

Саған төзү йөрөмәсәм,

Шәһәреӊ синеӊ белмәсәм,

Сине ҡайҙан табырмын?

Егетнеӊ ҡыҙға биргән жауабы:

— Атҡа менеп чыҡсаӊ син,

Безне ҡабул күрсәӊ син,

Ҡибла ҡарай торсаӊ син,

Эздәп безне табарсыӊ...

Төшөндә был ҡыз йырлап ғәйеп булды,

Егетнеӊ күкрәгенә ҡайғы тулды.

Бар ирде дусты, жаннан артыҡ,

Таӊ-иртән барып уӊа ғарыз ҡылды...

Дусты мән был икесе моӊдашалыр,

Уй уйлап, ғаҡыл тавып, серләшәлер.

Был икәүнеӊ ғаҡылын һич кем белмәс,

Юлаучыныӊ яптығын[15] ундашалыр...

Арғымаҡ аттан сайлап менеп алды,

[15] Я п т ы ҡ — кәрәк-яраҡ.

Әкәсе мән анасы юҡтап ҡалды,
Юлдашы мән ҡордашын ҡашына алып,
Тәүәккәл, дип, барын да юлға салды...
Заманнан күп заманлар үтте, диде,
Дарйа мән өч-дүрт айлыҡ китте, диде.
Бар икән бер аралда Мәймүн шәһәре,
Ходайым аға төш итте, диде.
Мәймүннең батырлары һай-һай салды,
Бәләгә бичаралар инде ҡалды,
Барын да бичараның устап алып,
Ер дин ҡаҙыған зинданға инде салды...
Бичаралар серләшеп моңдашдылар,
Ҡачыуға яптыҡ ларын ундашалыр.
Бу зинданның эчендә үләмез, дип,
Ҡачыуға әмәл тапмай илашалыр...
Чыҡтылар бу зинданнан хәйлә табып,
Ҡачтылар шәһәренән аттай чабып,
Дошманнан ҡотолсаҡ дип, ҡан илашып,
Төштөләр даръя эченә бер сал табып.
Сал менән бичаралар йөрөй бирде,
Ходайдан, аман ҡыл, дип күп теләйдер,
Сал менән бичаралар чыҡып әйде,
Алдынан күп кар ауан очрайдыр.
Карауанның бары килеп күрешәлер,
Беренән бере сорап белешәлер.

Ханымызның юғалткан ялғызы, дип,

Карауанның бары инде илашалыр...

Карау айларның егеткә әйткәне:

Батшамызның ялғызы! Без теләймез,

Аяғыңа баш ороп, сүз сораймыз,

Ялғыз йөрөп йәреңне табалмассың,

Ҡайтканың мәғкул икән, бер йөрөймез...

Егетнең яуабы:

Бу сүзне дошманға әйтмә, карауан,

Үлсәм дә юлымнан ҡайтмам, карауан.

Йәремә бер вәғәдәне ҡылғаннан суң,

Иәремнең йөҙөн күрмәй ҡайтмам, карауан...

Күп карауан был йөрөмәсен белде, диде,

Алтын-көмөш кәрәген бирде, диде.

Батшаның баласы инде китте,

Таудан, таштан, даръядан йөрөп үтте.

Ҡашында хеҙмәткәре — йән юлдашы,

Бер заманда шәһәргә яҡын итте.

Бер читенән шәһәрнең керде, диде,

Алдында бер өлкән өй күрде, диде.

Өй эчендә бер абыз ултыра икән,

Кереп өйгә, сәләмен бирде, диде.

Абыз тороп сәләмен алды, диде,

Быларны күреп таңға ҡалды, диде.

Алыҫтан килгән былар бичара икән,

Ултырың, дип, тиғәймәт[16] салды, диде:

— Вай, егетләр, юлыңыз булсын, — диде, —

Күп улйа[17] өйөңөзгә тулсын, — диде. —

Бичаралар, ереңез алыс икән.

Шәһәрдән йәреңезне эздәп ҡара,

Ҡай ердә әғрип (ғәрипләр) булса, шунан сора,

Йәреңез был шәһәрдән табылмаса,

Берәүеңез безнең өйгә ҡайтып ура.

Шәһәргә бичаралар керде, — диде,—

Алланың ярлығына күнде, — диде. —

Бер күчәнең[18] эчендә йөрөп иде,

Ҡырыҡ ҡыз бар икән, күрде, — диде.

Егеттән ҡызлар борон күргән икән,

Кичәдә ике ғәрип йөрөгән икән —

Батшаның ҡыҙының күзе төшөп,

Артынан бер аз ҡарап торған икән...

Хан ҡыҙының ҡызларға йырлап әйткәне:

Батыр ирдәй йөрөшө,

Батша улындай торошо,

Күргән төшөң турысы

Бөгөн килгән булмасын.

[16] Т и ғ ә й м ә т — биҙәкле кейеҙ.
[17] Улйа — табыш.
[18] Күчә – урам.

Ҡылдан пәрдә башында,
Юлдашы бар ҡашында,
Ҡайғы төшөп башында
Йәр эҙләүче булмасын.
Фида ҡылып малларын,
Ҡорбан ҡылып жанларын
Барып сораң алларын,
Сүз сораучы булмасын.
Төштә күргән йәремез,
Уға ҡорбан барымыз,
Көндөз-төндә зарымыз
Йәр эҙләүче булмасын.
Барып йөҙөн күреңләр,
Әдәп саҡлап тороңлар.
Бер аз ҡарап тороңлар,
Ил эҙләүче булмасын.
Барып хәбәр алыңлар.
Йөҙөн ҡарап күреңләр,
Ҡайғы-моңон сораңлар,
Йәр эҙләүче булмасын.
Унан хәбәр алғайны,
Сөйөнче хәбәр салғайны,
Алтын йөҙөк, гәүһәр таш,
Сөйөнчегә бирермен.

Хан ҡызы ғашиҡ йәрен белде, диде.

Ҡызларға йәрен әйтеп көлдө, диде,

Ҡырыҡ ҡыздан ике ҡыз юлдаш алып,

Был егеткә күргәле килде, диде.

Күчәдән ҡызлар эздәп тапмай ҡалды,

Был ғәрип ул ердән китеп ҡалды.

Ҡызлар килеп ҡараса — ул нәмә юҡ,

Һәр ердән ҡарап тороп әйләнәдер...

Ханчаға ҡызлар килеп хәбәр бирде,

Юлаучы икән уларың, кире ҡайтты.

Хан ҡызы күп ҡызларға сүз әйтәдер:

— Йәрем булса, ул нигә кире ҡайтты?

Буҙйегет юлдашы мән кәңәшәдер,

Һәр ердән муйын соноп ҡарашадыр...

Бер сарайның эчендә ут янадыр,

Айнаҡтан былар килеп ҡолаҡ салды.

Күп ҡызлар өй эчендә сүзләп ятыр,

Хан ҡызы йәрен юҡтап илап ятыр.

Ғашиҡ йәрем йөҙөн бер күрсәм, тейеп,

Ходайдан наләш[19] ҡылып илап ятыр...

Хан ҡызы илай инде — йырын бүлде,

Егетнең күкрәгенә ҡайғы тулды,

Ғашиҡ йәре икәнен белгәннән суң,

Йырын йырлап айнаҡтан[20] хәбәр салды:

---

[19] **Н а л ә ш — ыңғырашыу.**

[20] **Айнаҡ — тәҙрә.**

— Сезне мында яратты,
Безне унда яратты,
Бер аз зарлап йөрсөн дип,
Арада даръя яратты.
Чүлдә йөрдөм сыу тапмай,
Күп ғәриплек күргәнмен,
Юл башлаучы бер тапмай.
Дүрт йыл булды — юлында
Хайран булып йөрөймөн,
Даръя кичеп, тауны үтеп,
Күрмәгәнне күрдем мин.
Табанларым уйылып,
Ҡул тирем суйылып,
Дәүләт-бағым юйылып,
Зар-сәргәрдән булдым мин.
Атамды мин күрмәдем,
Анамды мин күрмәдем,
Өйдә үмер сөрмәдем,
Бер син өчөн йөрдөм мин.
Сине эздәп йөргәнмен,
Буйың төштә күргәнмен,
Жаным ҡорбан ҡылғанмын,
Рәхим итсәң кирәкте.
Зәғәферәндәй сулығанмын,
Өч йыл тотҡон булғанмын,

Йөҙөң күрер көн булса,

Ни булсам да булғанмын.

Миһман булып килепмен,

Хайран булып йөрөпмен,

Нурың төштә күрепмен.

Рәхим итсәң кәрәкте.

Атым минең Буҙйегет,

Ҡашымда бар дус егет,

Бер ҡайғылы ҡуш егет,

Рәхмәт итсәң кәрәкте.

Сын хәҡиҡәт йәр булсаң,

Өйгә керсәм кәрәкте.

Жаным сөйгән жананым,

Йөҙөн күрсәм кәрәкте.

Ҡызның жауабы:

Чын микән, өтрек[21] микән сүзең синң?

Танымаймын: ҡай ерлексең үзең синң?

Төшөмдә алла ҡушҡан йәрем булсаң,

Кил, айнаҡтан күрәйем йөҙөң синң.

Буҙйегет туры айнаҡҡа килде, диде.

Ҡыз ҡарап егет йөҙөн күрде, диде.

Битендәге бәрдәсен ачып иде,

Ҡапча ғашиҡ йәрен инде белде, диде.

[21] Өтрек – ялған.

Тунын кейеп, хан ҡызы ҡадәм басты,
Йүгереп ҡызлар тороп ишек асты.
Ушытап алтын-көмөш ҡулына алып,
Мәрүәрит мән мәржәннән чәчү чәчте.
Ҡошаҡташып күрештe ғашик йәре,
Ҡашында ҡырыҡ ҡыз бар, хеҙмәткәре.
Ҡызлар тороп алдында «йәр-йәр» әйтеп,
Хан ҡыҙының табылды интизары.

Ҡызларның әйткән йәр-йәре:

Әлхәм сүрә ҡөрьәннең башындадыр, йәр-йәр,
Пәйғәмбәрләр алланың ҡашындадыр, йәр-йәр.
Берең — мәрүәрит, берең — мәржән, тезелептер, йәр-йәр.
Берең — хандыр, берең — ханча, йәр булыпсыз, йәр-йәр.
Берең — тутый, берең — былбыл, йәр булыпсыз, йәр-йәр.
Берең — алтын, берең — көмөш, тош булыпсыз, йәр-йәр.
Берең — гөл, берең — йофар, хуш булыпсыз, йәр-йәр.
Берең — айдыр, берең — көндер, ҡайырылмаңыз, йәр-йәр.
Заман ахыры булғанчы айырылмаңыз, йәр-йәр.
Берең — гәүһәр, берең — яҡут, йәрәшептер, йәр-йәр.

Береӊ — тутый, береӊ — былбыл, сайрашыптыр, йәр-йәр.

Береӊ — хур ҡыз, береӊ — нур егет, бер тороӊыз, йәр-йәр.

Заман ахыры булғанчы бер булыӊыз, йәр-йәр.
Сез шаһзада, без хеҙмәткәр, мәшаалла, йәр-йәр,
Береӊ аға, береӊ мирада иншаалла, йәр-йәр.
Терек донъя ирешер күп мал менән, йәр-йәр.
Ғалигә көн ирешер сөйгән йәр мин, йәр-йәр.
Малы юҡныӊ йәне юҡ, түсәге юҡ, йәр-йәр.
Йәре юҡныӊ йәне юҡ, тәүсәге юҡ, йәр-йәр.
Йәр-йәр әйтмәк боронғо өлгөмөз бар, йәр-йәр.
Терелектә бер аз көн көлкөмез бар, йәр-йәр.

Йәр-йәр әйтте ҡырыҡ ҡыз уйнап-көлөп,
Ҡолаҡ салды хан көӊө*[22], тыштан тороп.
Ҡызларныӊ был уйынын ишеткән суӊ,
Йүнәлде ханға табан, хәбәр белеп.
Йәр-йәр әйтеп күп ҡызлар хөрмәт ҡылды.
Бер көӊө батшаныӊ тыӊлап белде.
Ҡырыҡ ҡызныӊ йәр-йәрен ишеткән суӊ,
Килде лә батша алдында жауап бирде:
— Тәҡсир, хан, ҡызыӊызға барып килдем,
Бер шомлоҡ бар икән—тыӊлап белдем.

[22] Көӊ — шымсы.

Ҡырыҡ ҡыз йәр-йәр әйтеп ятыр икән,
Ишеткән яманлыҡны әйтә килдем.
Был йәр-йәрен ишетеп өйгә кердем,
Туйларын, ҡылған эшен ҡарап тор дом.
Күп ҡызлар бер туй ҡылып ятыр икән,
Ике егет эчендә — аны күрдем.
Ҡызыңыз мән бер егет муйындашып,
Ятыптыр таҡ өҫтөндә ҡуйындашып.
Минең әйткән сүземә инанмасаң,
Ҡараңыз, тәҡсир, ханым, ишек ачып.
Ишетеп хан ҡылычын ҡулына алды,
Иленә ачыуланып хәбәр салды.
Күчәдә күп солдатлар йыйылып,
Хан ҡыҙының таш өйөн ҡамап алды.
Хан тыштан ачығланып аҡырадыр,
Өйдәге ятҡан ҡыҙын чаҡырадыр,
Өйдә йөрөгән дошманны үлтерең, дип,
Бейләре тышта тороп аҡырадыр.
Солдатлар өй эченә инеп килде,
Бичаралар тапмады ҡачар юлды.
Ғәрип жаннән төңөлөп бичаралар,
Алла әмеренә муйын сондо.
Солдатлар мән икесе орош булды,
Бирмәде күп солдатлар ҡачар юлды.
Бичаралар ишеккә омтылғандай,

Аяғына йәбешәдер сигез ҡолды.

Йа алла, дип ҡылычын ҡулына алды,

Алдына киз[23] килгәнде ҡырып салды,

Бичаралар таш өйдән чығып иде,

Тыштағы күп солдатлар уртаға алды.

Үлтерең, дип хан тороп йарлыҡ ҡылды,

Тыштағы солдатлар уртаға алды.

Бичаралар атына менеп алып,

Йөз егерме кешесен ҡырып салды.

Буҙйегет юлдашы мән ҡачып китте,

Шәһәренең кучәсенән чавып үтте.

Ходай тәғәлә саҡласа, бәлә булмас,

Баяғы абызына аман етте.

Остай алмаған инде ғәзиз булды,

Йөз егерме кешесе үлеп ҡалды.

Айағың аҫтынан бәлә чығып,

Ходайым, был бәләне ҡайдан салды!

Әйтеп-әйтеп булмаған суң, ҡызның йәнә әйткәне:

— Ғаҡылсызға сүз әйтсәң,

Күкрәгенә ҡунмаҫтыр.

Рәхимсезгә сүз әйтсәң,

Ни әйтсәң дә булмастыр.

Күзе юҡ ханларның,

Саңрау булыр көн икән,

---

[23] Киз — тура.

Ғаҡылы юҡ ҡартларның,

Суҡыр булыр көн икән.

Заман ахыры булғанча

Асылмасын күзеңез,

Дошмандан яу булғанда

Берекмәсен сүзеңез.

Көнөңөз моңло булғанда,

Хәйерсезгә киз булыңыз.

Зарлы көнгә ҡалсаңыз,

Саңрау йортҡа киз булыңыз.

Малыңызны алған чуҡ,

Күңелеңез һич ҡалған юҡ.

Атаңызны үлтереп,

Муйынына ҡылыч салған юҡ.

Найза[24]-ҡылыч жанға алып,

Балта-бычаҡ ҡулға алып,

Әкәңезне үлтергән

Дошманыңыз был, имеш.

Ғәйебе юҡ әдәмнең

Ҡанын түгеү юл, имеш.

Ҡыз бичара йортондан төңөлөптер,

Йәренә яҡынырaҡ өңөлөптер.

Әкәсе мән йортонан дарман тапмай,

Йә күҙенән ҡанлы йәше түгелепдер.

---

[24] Найҙа — һөңгө.

Ҡызның егеткә биргән жауабы:

— Уй егет, ҡыуанма был уйынға,
Шайтан кергән ҡуйынға.
Аҡылыңны йыймасаң,
Ҡылыч етәр муйынға.
Вай егет, вай мас егет,
Аҡылыңны йый, мас егет.
Жан чығыҡҡа етепте,
Күп эчендә аз егет.
Бузйегетем, күҙең ач,
Әүәлдән ҡушҡан йәр килде,
Сикереп тороп ишек ач,
Ҡылыч сапмай башыңны.
Зарланып йәрең килгәндә,
Илап килгән йәреңнең,
Йорто телен алмаңдыр.
Ҡаты бауыр хан атам
Ҡыҙына күз салмаңдыр.

Ҡолчолоҡ йыл, Баһауи,
Донъяда һич кем ҡалмайды.
Вафасы юҡ ҡара ер
Теренең барын ялмайды.

Жан юлдашы ишектә илап утыра,

Ходайдан аман ҡылып, теләп утыра.

Хан ҡыҙына ирәхим буламы, дип,

Ҡызның сүзен ишектә тыңлап утыра.

Бичара белде инде булмағанын,

Атасы ҡызның сүзен алмағанын.

Дустымның йөҙөн күрәйен, дип,

Өйгә керде ҡорбан ҡылып жанын.

Дустының ҡашына яҡын килде,

Ҡыздан дарман булмасын инде белде.

Үлсәм бергә шу ердә үләйен, дип,

Жегет жанын дусты өчөн ҡорбан ҡылды.

Мас булып дусты мының ҡарамайдыр,

Һич ҡайһы мының хәлен сорамайдыр.

Дустының ҡолағына йыр йырлайын,

Тик ултырып сығыуы ярамайды.

…Әл-ҡисса. Бер батша бар ирде. Бер уғлы бар ирде. Аты Зәйтүн ирде. Хикәйәт китабын да Зәйтүн дир ирде. Турҡан иртәкләрендә аты Зәйтден дирләр. Әммә китаптағы дөрөҫтөр. Хан ҡыҙын борон шуңа бирәмен дип йөргән икән. Зәйтүн ҡыҙға ғашик икән. Ҡызның хәбәре юҡ икән. Был хәбәрне ишетеп, мең кеше мән Зәйтүн килгәникән. Мәғлүм булсын.

Бар ирде бер батшаның уғлы, диде.

Күп иде алтын-көмөш пулы, диде.

Хан уға ҡыҙын бирмәк булған икән,

Арасы бер айчылык юлы, диде.

Бер жадикәре[25] килде вә хәбәр алды,
Күп ғәскәр йыйып торған, ҡырып салды.
Мең кеше ҡашына юлдаш ҡылып,
Килгән, күргән әдәм таңҡа ҡалды.
Хан алдына килде лә сәләм бирде,
Хан килгәнен ғарыш күреп, ғәләйкә алды:
Кәрәк көндә киз булдың, кейәүем, дип,
Үзенең уң яғынан урын бирде.
Хан тороп, балам, инде ултыр, диде,
Ҡызымны вәғәдә бирдем былтыр, диде.
Арамызда жади гуй пәйҙә булып,
Башын кисеп, сән мәған килтер, диде.
— Тәҡсир, хан, рөхсәт бирсәң, мин барайын,
Башын кисеп, сезгә мин килтерәйен!

Атына, рөхсәт алып, менде, диде.
Күп ғәскәрең суҡабығин күрде, диде.
Ғәскәрдән биш йөз кеше ҡайтҡан икән,
Алдында ачыу ҡылып тордо, диде.
Күп ғәскәр: Без орошҡа бар дыҡ, диде,
Мең кеше уртамызға алдыҡ, диде,
Яртымызны ул безнең ҡырып салды,
Көчөмөз безнең етмәй ҡалдыҡ, диде.
Алдына киз килгәнне ҡырып салды,

[25] **Ж а д и к ә р** — **сихырсы, күрәҙәсе.**

Үзе артына, юлдашын алға салды.

Көчөмез тапмай, унан ҡачып киттек,

Дүрт йөз кеше безләрдән ҡырып салды.

Зәйтүнден жауабы:

Хан ҡызын былтыр безгә вәғәдә ҡылған,

Ике хан бер-беренә фата ҡылған,

Мынча илен ҡырдырып, ханның үзе

Безне әүүәлдә чаҡырмай, хата ҡылған.

Күреңез, сезгә ҡызыҡ күрсәтәйен,

Уҡ менән башын уның озатайын,

Икесенең бердәйен башын кисеп,

Ханчағызға апарып күрсәтәйен.

Күп ғәскәр бергә инде йердө, диде,

Ҡырасын бичараны күрде, диде.

Буҙйегет ташҡа бер уҡ аткан икән —

Ташҡа уҡ кизенән батты, диде.

Был да инде бер уҡ атты, диде,

Ташҡа уғы уртасынан батты, диде.

Үз көчең кәм икәнен белгәннән суң,

Йортона ярлыҡ әйтеп ҡайтты, диде.

Бездән ул ҡачты инде, килмәс, диде,

Был шәһәргә инде ул инмәс, диде.

Ханчаңыз безең берлән ҡушылған суң,

Килсә лә эт ҡорло күрмәс, диде.

Күп ғәскәр теркөрәшеп ҡачты, диде,

Үлтердек, дип, ханчаға әйтә килде.
Ҡыз, бахыр, терелектән өмот өзмәс,
Шулай да көндән-көн йөзө сулды.

Егетләрнең хәле:

Бичаралар яралы булған икән,
Йән юлдашы йығылып ҡалған икән.
Күзен ачып ҡараса, тауға килде,
Исе ауып ҡалғанын инде белде.
Бейек тауның ҡашына килеп иде,
Таудан бер аз төшөүгә күңел ҡылды.
Ат ялына ҡул ҡарышып ҡалған икән,
Дошманлар күп яраны салған икән,
Ҡашына ҡарап торса — юлдашы юҡ,
Бичара бер ердә үлеп ҡалған икән.
Йән юлдашым, бичара, үлгән икән,
Күп дошман эчендә ҡалған икән.
Тере булса, ҡашымда йөрөмәҫме иде,
Күкрәгенә күп ҡайғы салған икән.
Һәр ердә ярасы бар — ҡан ағадыр,
Был ердә үлсәм, мине кем бағадыр.
Күп ярадан үлемне уйына алып,
Ике күздән ҡанлы йәш инде ағадыр.
Бер ергә атын бәйләп төштө, диде,
Ғәзиз жаннан өмөтөн әздә, диде.
Ялғызлыҡта янымда юлдашым юҡ,

Башлады дусын юҡтап сүзен, диде.

Бузйегетнең дустын юҡтап илаганы:

Тузан басты тунымны,
Туфраҡ басты юлымны,
Ҡайғы басты күңелемне,
Ачылыр көн булырмы?
Ғәриплеккә төшкәндә
Дустым миңә килерме?
Исемә алып юҡтасам
Минем хәлем белерме?
Ялғызлыҡка төшкәндә,
Бер күрер көн булырмы?
Боронғодай берегеп
Бер йөрөр көн булырмы?
Был ҡайғылы көнләрем,
Онотолор көн булырмы?
Артымдағы дошманнан,
Ҡотолор көн булырмы?
Ҡаршы ҡарап дошманға
Йөрөсәм, юлым булырмы?
Боронғодай берегеп,
Бер йөрөр көн булырмы?
Айырылып сән, йән дустым,
Күрер көнөм булырмы?
Эзләйен, дисәм, дарман юҡ,

Сәне ҡайдан табайын?

Бергә үлсәк, арман юҡ,

Сәне ҡайдан табайын?

/Дустын юҡтап, зар ҡылып ингерәйдер,

Күрмәменме дустым, дип күп илайдыр.

Бейек тауның башында бер ҡарлыған

Баласына ем бирептер асырайдыр/.

Ҡарлыған ҡарлығачҡа ем бирәде,

Ҡарындашы ҡарындашҡа дим бирәде.

Ялғызлыҡҡа төштө ғәрип башым

Минем буйтып йөрөгәнем кем беләде?

Илағаным белмәйдер атам минең,

Зарлығымны белмәйдер анам минең.

Ғәриплеккә төшөптөр ғәрип башым,

Сорарға һич кем юҡ хәлем минең,

Көнләр безгә бар икән буйтып[26] йөрөр,

Зарлансам да һич кем юҡ хәлем сорар.

Үз жаныдай аçыраған атам-анам,

Булырмы тағы сезне бер көн күрер.

Ағачның башын киссә, төбө ҡалыр,

Икәүнең бер үлсә бере ҡалыр.

Ялғызның үзе үлсә, нисе ҡалыр,

Менгән ат, кейгән тунятҡа ҡалыр.

Барам, дисәм, булышы юлым тоноҡ,

---

[26] Буйтып — былайтып.

Әйтәм, дисәм, ят илдә сүзем сыныҡ.
Ни ҡылса да ирек бар, чарамыз юҡ.
Булмаҫты ахыр ғәриптән күңеле сыныҡ.
Тыуған ергә, әсә, өйгә төштө юҡ,
Булды ҡашымдағы йән юлдашым юҡ.
Йөрөмәҫ ергә очрады ғәрип башым,
Ағадыр ҡан аралаш күздән йәшем.

Был донъяның эчендә үлмәй ҡалған,
Булырмы уйлағайның барын алған?
Баһауиның башында ҡайғысы бар —
Аның өчөн был йырны табып алған.
Яздым мин моңло күңелем ачылсын дип,
Һәр ергә был бер сүзем сәселсен дип,
Донъяда төрлө-төрлө әдәм булыр,
Ҡайғылы әдәм күңеле басылсын, дип.

Бузйегетнең ходайға наләш[27] ҡылғаны:

Олуғларның олуғы — ходайым сән,
Килеп торам алдыңда гидайың мән,
Үзең ярдам ҡыласың без, ҡолоға,
Ялғызлыҡҡа төшөпмән нитәйен мән.
Уйлайым да жаным мында ҡалырмы дип,
Моңло башым был ердә ҡалырмы дип,
Кем үлмәй ҡалыр мында яра алған суң?

[27] Наләш — зар.

Ҡурҡамын, ҡол кәфенсез ҡалырмы дип,

Хода, тәҡдиреңнән ҡалырым юҡ,

Ярдам эздәп, һич ҡайда барырым юҡ.

Күңелемә бер нәмә зари моң буладыр:

Кәфен табып гүр эченә саларым юҡ.

Ун сикез мең ғаләмде яратып сән,

таратып сән.

Мәҡанлы мәҡанына

Таш эчендә ҡортларға ем биреп сән,

Ердәге әдәмләргә дим биреп сән.

Ходайа, әмер ҡылсаң, һич хәлем юҡ,

Боролоп ҡача дисәм, дарманым юҡ.

Ходайа тәҡрарым татбирым юҡ,

әмәлем юҡ,

Ҡолоңно бәхеттә кәм ҡылдың — иларым юҡ,

Хәлем ничек булырын белерем юҡ,

Ярлыҡасаң мин ҡолоңно, рәхмәтең

Сәндән башҡа һич кемдән теләрем юҡ.

Әүүәлдәй без ҡолоңно батша ҡылдың,

Ҡолоң затыны үҙең белдең.

Ни ҡылсаң да без, бәндә, чарамыз юҡ,

Ғазап ҡылсаң, ҡолоңа ҡәһәр ҡылдың.

Бичара тәңресенә наләш ҡылды,

Ятраҡаннан башҡа ни хәлен белде,

Бичара наләш әйтеп утыра ирде,
Ҡара тычҡан алына ҡаршы килде.
Тычҡанны был бичара устап алды,
Үзендәй һәр еренә яра салды,
Боронғодан ишеткән сүз бар икән,
Дәрденә был тычҡанны дәргәр[28] ҡылды,
Тычҡанны епкә бәйләп ҡуя бирде,
Тычҡан эздәп һәр ердән чүпне ейде.
Һәр ердән тычҡан чүпне эздәй-эздәй,
Бер чүп ейеп тычҡан шифа булды.
Бичара бер чүп ейгән икән,
Чүпне ейеп шу ергә ыуып салды,
Чүптән был ергә ыуып салып,
Ярасы сау кешедәй була ҡалды.
Тычҡанның сарҡытын[29] табып алды,
Бер азын яраға ыуып салды,
Ярасының әҫтәнән салып иде,
Ярасы сау кешедәй була ҡалды.
Хаҡ тәғәлә, әмере илә дәртен язды,
Атына менеп, юлға ҡадәм[30] басты.
Бер көнө ҡасып-чабып йөрдө, диде,
Шәһәрнең читенә инде, аралашты.

Ҡалған дустының хәле:

[28] Д ә р г ә р - дарыулау, чүп-үлән.
[29] Сарҡыт — ҡалған аҙыҡ, тешләм.
[30] Ҡадәм, аҙым.

Бичара дусты мының ҡалған икән,
Мыңа ла күп яраны салған икән.
Эченән күп ғәскәриең дустын тапмай,
Баяғы абызына барған икән.
Ете көн дустын тапмай эздәп йөрдө,
Ҡыҙға йәрен таба алмай хәбәр ирде,
Хан ҡызы мән икесе ғаҡылдашып,
Инде килсә, ҡачуға мәғҡул күрде.
Ҡыз әйтте, уны әпкил, диде,
Үле мәйетен, уны тапҡыл, диде,
Был шәһәрнең эчендә бер кәмпер[31] бар,
Йәшереп өйөнә уны әпкил, диде.
Юлдашы батшасын эздәп йөрдө,
Күп күренсә, атының башын бордо,
Бер түбәнең башына килеп иде,
Жан юлдашы киләдер, аны күрде.
Атына менеп, дустына ҡаршы барды,
Бере-беренә илашып ҡулын бирде.
Берен-бере күрешеп күңел тынды,
Шәһәргә керәйек дип, атына менде.
Дустысы хәйз өйөнә йәйәү килеп,
Аман йәрең, килде дип, хәбәр бирде.
«Сөйөнчегә теләгәнде алғыл, диде,
Ҡулыңа алтын йөҙөк салғыл, диде.

[31] Кәмпер — әбей.

Кәмпергә биш мең алтын бирмәк булдың,

Йәремне унан барып күрмәк булдым.

Инде мында килмәгел, дошман белер,

Төзөрсән инде кәмпер безнең юлды.

Һәр ердән дошман беҙгә күз саладыр,

Кәмпернең өйөнә алып барғыл, диде,

Кәмпергә хәбәр биреп, вәғәдә ҡылдым,

Кичә барып төндә бергә тормаҡ булдым».

Хан ҡызы хан дустына хәбәр ҡылды,

Кәмпернең өйөнә алып барғыл, диде.

Һәр ердән дошман безгә күз саладыр,

Төзөрсән инде кәмпер безнең юлды.

Шәһәрдән берәү мыны күрде, диде,

Баяғы ҡызның йәре килде, диде.

Бичаралар кәмпергә килгән икән,

Күргәнләр ханға әйтәм дип, киләдер.

Ишектән хан алдына килде, диде,

Бер йомошҡа килгәнен белде, диде.

Теллә — алтын тәңкә????

Баяғы дошманығыҙ — ике егет,

Ул кәмпернең өйөнә килде, диде.

Бейләре хан алдына килде, диде,

Ике егет килгәнен белде, диде.

Был дошманнан без ҡалайтып ҡотолайыҡ.

Йортон йыйып кәңәшен ҡылды, диде.

Баяғы Зәйтүн батыр бергә килде,
Кейәү булып чығадыр түргә, диде.
Хан ҡыҙын аламын дип ҡыуанды,
Сәләм биреп, аладыр зурға, диде.
— Тәҡсир, хан, рөхсәт бирсәң, мин барайын,
Әмәл ҡылып мин аны үлтерәйен.
Ул кәмпер өйөнән тере эстәсәм,
Алдыңа сөрәп мында килтерәйен.
— Вай балам, уны үлтерсәң, ҡыз сәнеке,
Буладыр дошман китеп, дус сәнеке.
Ханнан рөхсәт алған суң йөрөй, диде,
Кәмпернең был өйөнә килде, диде.
Бер ҡуржынға тултырып, алтын биреп,
Кәмперне ахыр алдап ордо, диде.
— Вай кәмпер, сәңә алтын мул бирәйен,
Үлгәнче хеҙмәткәр — ҡол бирәйен,
Аларны ыу бирсәң де үлтер, кәмпер,
Ғүмереӊ үтмәй тороп юл бирәйен.
Таң-иртән тороп, кәмпер, эш ҡыларсән,
Биһуш дигән дарыуны алдырырсән,
Хан сәңә, мыны үлтерсәң, чин бирәдер,
Бер ҡәүем хатынларға баш буларсән.

Ахыр юлдан кәмпер азды, диде,
Быларға инде чоҡор ҡазды, диде,

Базардан биһуш дигән дарыуны алып,

Таң-иртән кәмпер ҡылды эшне, диде,

Бичара был дарыудан эчеп салды,

Юлдашы белмәй мының тышта ҡалды.

Юлдашы юҡ, беренә бирдем дарыу,

Үлтерсәң, дип, батшаға хәбәр салды.

Баяғы Зәйтүн үзе килде, диде,

Ғәриптән инде кикен алды, диде,

Таң-иртән базарда үлтерәм, дип,

Зинданға тимерләп салды, диде.

Солдатлар батшаға хәбәр салды,

Дошманнан ханның инде күңеле тынды,

Ҡызымны мин Зәйтүнгә бирәмен, дип,

Йортона, туй ҡылың, дип хәбәр салды.

Хан ҡыҙын алам дип, ҡыуанадыр,

Был ҡызны минән башҡа кем аладыр.

Бузйегетне зинданға салғаннан суң,

Күңеле сыуыр ханча дип, уй ҡыладыр.

Хан иртән ярлыҡ ҡылды, үлтереҥ, дип,

Баҙарға алып барып үлтереҥ, дип,

Дошманымның үлгәнен йортом белсен,

Дошман үлеп, дус күңелен тындырың, дип.

Солдатлар асыл ирне алып барды,

Баҙарға ил йыйылды уңдан, сулдан.

Бичара мас булып, аҡылы юҡ,

Әжәл инде мында төшәр булды.
Юлдашы хан ҡыҙынан ҡайтып килде,
Бер шомлоҡноң булғанын инде белде,
Кәмперенең ачыуланып жанын алды,
Дустының ул кәмпердән ҡанын алды.
Дустының ҡонон сәнән алайын дип,
Башын алып, киҫкеләп эткә салды,
Бичара дусын юҡтан зар иңгерәйдер,
Киз килеп күренгәннән бер сорайдыр,
Һәр ердән сорай-сорай килеп иде,
Базарда йыйылып ил шаудайдыр.
Бер ердә күп халайык ҡарашыптыр,
Һәр ердән асыучы ни сорашыптыр,
Үлтереүче берәү ирнең ҡулын тотор,
Асыучы, киҫеүче: — Мин теләптер.
Берәүе, асамын дип, еп алыптыр,
Берәүе алмас ҡылыч бәйләнептер.
Дустына яҡын килеп ҡадәм басты,
Нә ҡылырын белмәде, ҡатты, шашты.
Илап-иңерәп ҡашында тороп иде,
Бер заманда бичара күзен ачты.
Аяғыны ҡоршап бәйләделәр,
Үлтереүгә урынны сайладылар,
Түңәрәккә ҡараса — бары дошман,
Ғәрип жан нығыуға ҡынадылар.

Уң янында жан дусты илап утырыр,
Үлтереүгә йорт бары шаулап торор,
Әжәл етсә, һич кемнән дарман булмас,
Иман әйтеп, үлерен уйлап торор.
Бичара үләрен инде белде,
Дустына, бире кил, дип, бер ым ҡылды,
Дустына ҡорбан инде жан юлдашы,
Ҡашына был яҡынырак килеп тордо.

Ағызын ачып дустына сәләм әйтте:

— Терелек инде, дустым, бездән ҡайтты.
Асыл жаннан бичара төңөлгән суң,
Иле мән йортона сәләм әйтте.

Бузйегетнең дустына жырлағаны:

— Вай, жан дустым, яҡын кил,
Арзым сәңә әйтәйен,
Сәнән башҡа дустым юҡ,
Сүзем кемгә әйтәйен?
Ҡарчыға ҡошноң ҡанаты
Ҡайырылышыр көн булды,
Амандашып дустынан
Айырылышыр көн булды.
Бер көн ҡалмаҫ дустынан
Айырылышыр көн булды,
Һай, жан дустым, яҡын кил,
Әжәл безгә етепте.

Күп дошманның эчендә
Дарман бездән китепте.
Был көннән суң, жан дустым,
Инде сезне күрмәк юҡ,
Боронғодай берегеп,
Инде бергә тормаҡ юҡ.
Был ердән сез ҡайтыңыз,
Йортҡа сәләм әйтеңез,
Моңло ҡалған атама,
Зарлы булған анама,
Ялғызыңның сүзе дип,
Бездән сәләм әйтеңез.
Ҡарчыға ҡоштай ҡундырған,
Ҡашымда сөйөп ултырған,
Дидарыма[32] туймаған
Ялғызым, дип уйлаған,
Моңло ҡалған атама,
Зарлы булған анама —
Ата берлә анаға
Сәламемне әйтеңез.
Бала анадан тыумаҡ бар,
Бейек булса тормаҡ бар,
Әжәл тейгән әдәмгә
Артыҡ әмер сөрмәк бар.

[32] Дидар — йөҙ.

Ҡанатынан ҡайырылған,

Ялғызынан айырылған,

Ҡайғысы күп анама,

Сабыр ҡыл, дип әйтеңез.

Кемне балам, тиер бул,

Кемне мин, дип сөйөр ул.

Без исенә төшкәндә,

Янған утҡа көйөр ул.

Көйгәненә киз булсаң,

Сабыр ҡыл, дип әйтә күр.

Башымдағы бүркемне

Моңло ҡалған атаға,

Ҡулымдағы йөзөкно

Зарлы булған анама

Үз кулыңнан биргәйсең,

Күңелен аулай йоргәйсең.

Башымдағы бүркемне

Кейсә дә ул онотмаç.

Ялғыз улым килер дип,

Ул безләрне көтмәсен.

Ҡулымдағы йөзөкнө

Дус ҡулыңа салғайсың,

Сәләме дип ялғызың

Анама син биргәйсең.

Ялғызым, дип иласа,

Күңелен шулай йөргәйсең.
Без икемез бар идек,
Һич айырылмасдай йәр идек,
Бер көн сине күрмәсәм,
Күрәйек, дип зар идек.
Алладан фарман етте,
Дусы дусынан ал китте,
Был донъяла күрмәсәк,
Әхирәттә күргәймез,
Тәҡдир итсә алласы.
Безнең өчөн, жан дустым,
Күп рәнжеүне күрдең сән,
Ата-анадан айырылып,
Бер мән өчөн йөрдөң сән.
Иленә син барырсың.
Ата-анамны күрерсең,
Арзын әйтеп иларсың.
Барсаң, сәне күргэйләр,
Ҡашыңа килеп торғайлар,
Йыйылып күп жәмәғәт,
Бездән хәбәр сораса,
Күзем күргән юлдашлар,
Бергә йөрөгән моңдашлар,
Безне исенә алғанлар,
Бездән мәхрүм ҡалғанлар,

Бездән хәбәр сораса,

Сәләмемне әйтеңез.

Бездән рәнжеү алғанлар,

Бездән күңеле ҡалғанлар,

Күп эчендә бар булса —

Разый булсын, әйтә күр.

Ялғыз да үтер донъянан,

Яман да үтер донъянан.

Донъя эчендән, армандан

Зарлы ла үтер донъядан.

Ҡунаҡ булдыҡ донъяға,

Ейәр дәме бөткән суң

Кем үлмәде донъядан.

Фәкиранә Баһауи,

Үлмәй тороп, ҡоллоҡ ҡыл,

Сән дә үтәрсең донъядан.

Дустының жауабы:

— Айырылырың белгәнмен,

Ҡурҡа-ҡурҡа йөрөгәнмен.

Алла әмеренә чара юҡ,

Муйын соноп торғанмын.

Ана сөтөн имешкән,

Жаннан татлы сөйөшкәй,

Заман ахыры булғанчы

Айырылмайыҡ, татлы жан дустым,

Жаным ҡорбан ҡылсам да,

Ошо күпнең алдында

Сезнең өчөн үлсәм дә.

Күп дошманның эчендән

Ҡотолмаç ай көн булды,

Башҡа төшкән эшемез

Онотмаçтай көн булды.

Жаннан татлы жан дустым,

Күп көн бергә йөрөмәдем,

Был көннән суң ахыры

Инде сезне күрмәдем.

Син үлсәң, мин ҡайтырмын,

Ғарзым ҡайтып әйтермен,

Атаң чыҡса алдымдан.

Нә дип жауап әйтермен?

Ҡани[33], дисә, уланым,

Анаң чығып алдымдан,

Ҡани, дисә, уланым,

Алдымда тороп зарланса,

Нә дип жауап әйтермен?

Шағирның сүзе:

Ата менән анадан,

Малың берлә баладан

[33] Ҡ а н и — ҡайҙа.

Кемде айырмаҫ был үлем?

Вай бичара Баһауи,

Мәддәт телә алладан,

Сәңә лә килер был үлем.

Бузйегетнең үлгән ере:

Бичаралар моңдашып күп тороптор,

Ғарыздашып икәүе моңдашыптыр,

Базардағы йыйылған күп жәмәғәт

Быларның сүзен өгөп илашыптыр.

Бер заманда вәзире килде, диде,

Бичаралар үлерен белде, диде.

Солдатлар алдында хәзер тороп,

Ҡылыч белән чабың! — дип ярлыҡ ҡылды.

Үлтерер ергә мыны бәйләделәр,

Ҡылычын үткер ҡылып ҡайрадылар,

Солдатлар ҡылыч менән чабып иде,

Үтмәде ҡылыч, жанын ҡыйнадылар.

Вәзире, үткер ҡылыч килтер, диде,

Кичектермәй мыны тиз үлтер, диде._

Битендәге пәрдәсен ачып чабың,

Батшаң күңеле, чапсаң, тыныр, диде.

Битенән ҡыл пәрдәсен суйып алды,

Яланған муйынына ҡылыч салды,

Башында алтын айдар толомо бар,

Күргән әдәм быларға таңға ҡалды.

Тиң кеше булмас дип, уйлап идек,

Күп кеше уртаға алып сөйләп идек,

Ҡайтаң, залим батша тел алмады —

Үлтермә бичараны, ҡуй, дип идек.

Ул ердә Зәйтүн батыр аҡырадыр,

Һәр беренә, үлтереҥ, дип чаҡырадыр.

Хан ярлығын боҙоуға хәлеҥ бармы,

Солдатларға, чабыҥ, дип аҡырадыр.

Солдатлар башын өзә чабалмады,

Ғилажын үлтереүгә табалмады,

Үлтерәм дип, ҡыйнаптыр ғәзиз жанын,

Ҡылыч солдатлар телен белә алмады.

Бузйегетнеҥ жауабы:

— Вай ғәскәр, безгә яман сөйләмәҥез,

Ҡылыч итем кисер дип уйламаҥыз,

Табанымныҥ астында алмас ҡылыч,

Алып чабыҥ, жанымны ҡыйнамаҥыз.

Кәүдәмне һич кем минем өзмәс, димен,

Үз ҡылычым булмаса, кисмәс, димен,

Йәнемне алсаҥыз да ҡыйнамай ал,

Тәҡдир ҡылса, тәҥрем бозмас, димен.

Бичараныҥ итеген чичеп алды,

Кәүдәдән ғәрип башын өздө, диде.

Алтыға бөкләп салған алмас ҡылыч

Бер чапҡанда муйынын өздө, диде.

Ғәзиз жаны ҡыйналып ергә төштө,

Айдай йөзә ярҡырап[34] ергә төштө.

Ҡашында жан юлдашы илап ултыра,

Дустынан айырылып, өмөт өздө.

Зәйтүн батыр, алыңыз башын, диде,

Дарға бәйләп, юғары асың, диде.

Йорт эчендә үлгәне мәғлүм булсын,

Хан, ханша күңелен басың, диде.

Ғәрип башны дарға асты, диде,

Йорт бары илап, унан ҡачты, диде.

Ханға йорт, үлтердек... әйтеп килде,

Ҡотолдоҡ, дип дошманнан, сачу сәчте[35].

Туй ҡылың, дип йортона ярлыҡ ҡылды,

Батшаның үлтергәнен йорто белде,

Ҡыз, бахыр, был эштән иссез, ғафил,

Мал суйып, туйын инде ҡылды, диде.

Бичара ул шәһәрдә үлеп ҡалды,

Дусты үлгәнен күреп ҡалды.

Дарға башын асҡанын күргәннән суң,

Илай-илай бичара талып ҡалды:

— Һай, һай донъя, һай донъя,

Кемгә уафа ҡылдың сән?

[34] Ярҡырап — ялтырап.

[35] Сачу сәчте — сәсеү сәсте, йәғни бүләк һипте.

Искәндәрдик батшаны

Үз ҡулыңа алдың сән.

Ничә-ничә шәһәрләрне

Иңгерәтеп алдың сән.

Фәхере ғалим Мөхәммәд

Уны тағы алдың сән,

Алып-алып туйғаның юҡ,

Һич тә бер сән ҡайғың юҡ.

Кисәге йөрөгән жан дустым,

Бөгөн тағы алдың сән.

Донъя, донъя дигәймен,

Донъя ғәмен эскәймен,

Әжәл етеп үлгәймен

Үлсәм, кәфен кейгәймен.

Ҡарачәч сылыуның сүзе:

Ҡыз саҡлайдыр, юлдашы киләме, дип,

Килеп бездән бер хәбәр аламы, дип,

Ҡыз өйөнә юлдашы килмәгәй суң,

Ҡыз ҡурыҡты, бер шомлоҡ булдымы, дип.

Кәмпергә хан ҡызы килде, диде,

Кәмпер үлеп ятыр, күрде, диде,

Өйөнә илай-иңгерәй ҡайтып килде,

Бер шомлоҡноң булғанын белде, диде.

Барын да ҡырҡ ҡызның ҡашына алып,

Шәһәрдән йәрен эздәй йөрөмәк булды.

Төн эчендә ҡай ердә тауыш булса,

Айнаҡтан бары килеп ҡолаҡ салды.

Бер ергә килсә күп йорт туй туйлады,

Ошонда минең йәр дип ҡыз уйлады,

Һәр айнаҡың төбөндә йыр йырлайды,

Йәрен юҡтап бичара зар иңгерәйде.

Шиғырчының сүзе:

Боронғолар үтепте,

Үлмәйчэ ҡайда китепте?

Бу үлемне, Баһауи,

Уйыңа алсаң кәрәкте!

Бичара ҡыз динайын ҡулына алды,

Турҡаға[36] ҡанлы башны урап салды,

Өйөнән алтын-көмөш ҡулына алып,

Йәренә там[37] торғоҙоу уйына алды.

Ҡашына йөз егерме ҡолон алды,

Алтын менән көмөштән мула салды,

Был муласын хан ҡызның белешкән суң,

Йортона: Йыйылыу!—дип хәбәр салды.

Йортона: Ҡыз ҡашына барың, — диде, —

Нағып йөрөй ҡыҙым минең, белең, — диде.

Ҡызымның бер аз көндә күңеле сыуыр,

Ҡызымның ҡыл дигәнен ҡылың, — диде.

---

[36] Т у р ҡ а — ебәк.

[37] Там — өй.

Күп ғәскәр ҡыз ҡашына килде, диде.

Там торғоҙоп булыпты күрде, диде.

Ҡыз быларның килгәнен яҡырырмады,

Ғәскәрнең бары ҡайтып йөрөдө, диде.

Ҡызыңыз там торғоҙоп булған икән,

Шәһәрдән зәргәр[38] йыйып алған икән,

Был шәһәрдә ундайын өй табылмасы —

Алтын менән көмөштән салған икән.

Хан ҡыҙын күреүгә ояладыр,

Анасы, ялғызым, дип зарланадыр,

Ҡашына бер-ике әдәм юлдаш алып,

Чыдай алмай анасы бер барадыр.

Ҡыҙына илап килеп билен быуды:

— Вай, балам, был көн сиңә ҡайдан тыуды

Ходай ҡушҡан, илереңнән, зар иңгерәтеп,

Ғаҡылы юҡ әкәңнән ҡан яуды.

Ғаҡылы юҡ атаңды тел алмайды,

Дошмандарың с үҙенән һәм ҡалмайдыр,

Ҡызыңны илатма, дип әйтеп алдым,

Ҡанча әйтсәм дә телемне тыңламайдыр,

Оялғаннан ҡашыңа килә алмадым,

Атаңның һич аҡылын белә алмадым.

Оялып, атаң синең зар иңгерәде,

Безне, өйдәсезме, мында уйламады.

---

[38] Зәргәр — алтын оҫтаһы.

Ҡылыптыр атаң синең ҡорбан ғәйете...

Ҡыҙының ҡашына йәшен түгеп,

Күкрәгендә уйлаған ғарзын әйтте.

Ҡыҙына илап ханым моңон әйтте.

Баласы инәсенә ҡарамайдыр,

Оялып, инәсе өйгә ҡайтты,

Ҡыз инде там торғоҙоп булды, диде,

Эченән бикләгәндәй ҡалды, диде.

Ҡашында ҡырыҡ ҡыз менән амандашып,

Күз йәшенә дала йыр тулды, диде.

Ҡарачәч сылыуның ҡызларға илаған сүзе:

— Йәр-йәр әйткән йәр-йәрем,

Аман булың, хуш будың!

Безгә үтәр көн булды,

Сездән китәр көн булды.

Аман инде, хуш булың,

Безгә үтәр көн булды.

Йәр өчөн үләр көн булды,

Сезгә ҡалыр көн булды.

Бездән рәнжеү алғандар,

Бездән күңел ҡалғандар,

Уйыңызға алғайсыз,

Риза булың, дусларым!

Бороңғодай булырсыз,

Сөйгән йәргә барырсыз,

Уйнап-көлөп йөрөрсөз.

Аман булың, дусларым!

Турғайға ем табылыр,

Ауырыуға им табылыр,

Башыңыз йәш, дусларым,

Бездән донъя үтәдер,

Терелек инде булмастыр.

Был ялғанның эшендәй,

Һич кем үлмәй ҡалмаҫтыр.

Минең өчен иламаң,

Миндәй бер ҡыз табылыр,

Терегә йәр табылыр,

Үлгәнгә ер табылыр.

Минең йәрем үтептер,

Кил, дисәм дә, килмәс ул,

Зар ҡылсам да белмәс ул.

Чын йәремнән ҡалғым юҡ,

Ялған йәргә барғым юҡ,

Был донъяда ҡалғым юҡ.

Аман булың, дусларым!

Әл-ҡисса. Ҡарачәч сылыу ул кейемләрен күреп йырлағаны:

— Алтын, ефәк, кеш тунлар,

Сезне кейер кешем юҡ.

Алтынлы эйәр күк юрғам,

Сине менер кешем юҡ.

Алтын бизәк киң сарай

Сезгә керер кешем юҡ,

Барыгызны нитәйен?

Бергә йөрөр кешем юҡ.

Атам сезне күп күрде,

Улжа әйткәнен йоп күрде,

Йәремездән айырып,

Тороузны хуп күрде.

Андай улны тыудырып,

Көндәй ҡызны тыудырып,

Бездән алып бөйәмнө,

Алып букча ҡылсын ул.

Күркле ҡызны тыудырып,

Сөйгәненә бирсен ул.

Яудан аҡкан бөйөмөн,

Алып букча ҡылсын ул.

Син йәремдән ҡалғым юҡ,

Ялған йәргә барғым юҡ,

Атама әйтең сүземне,

Ҡанлы йәш алды күземне.

Атама донъя киң булсын,

Ҡорбан ҡылдым үземне.

Донъя йәмен сәйәрсең,

Алтын-кемөш кейерсең,

Әжәл бер көн киз килсә,
Барын ҡуйып китерсең.
Был ялғаннан файда юҡ.
Әжәл, үлем ҡайда юҡ,
Үлем килсә, файда юҡ,
Ҡолчолоҡ ҡыл, Баһауи.

Бичара ҡыз илай-илай тамға керде,
Терелектән үлгәнен яҡшы күрде.
Там ишеген эченән биктәгән суң,
Үз эченә үзе был хәнжәр ордо.
Түшәкендә хан ҡыҙын ҡуаҡ ирде,
Үзен үзе бычаҡ мән бычаҡ ордо,
Тамында кергән ҡыз сыҡтап утырды,
Хан ҡызы тышҡа чыҡмай оҙаҡ тордо.
Хан ҡызы йәре менән ҡушылыптыр,
Ғәзиз жаны кәүдәсенән өҙөлөптөр.
Атасына йорто хәбәр иткәннән соң,
Ҡылғаны хан туйы боҙолоптор.
Хан ишетеп йортонан илап килде,
Анасы битен йыртып, иңгерәп килде.
Тамам йорт был хәбәрне ишеткән суң
Өлкән-кесе — мулаға бары килде.
Иласа да эш үтеп ҡалған икән,
Ике ялғыз донъядан барған икән.

Ханым, мындай булырын белмәдем, дип,
Үз битен үзе тырнап ярған икән.
Тышта тороп хан ҡыҙын чаҡырадыр,
Йортона, ишек ач, дип аҡырадыр.
Ханым әйтә ачыуланып батшасына —
Эш үткән суң был инде ни ҡыладыр?
Күп ғәскәр там ишеген боздо, диде,
Битен ачып күрделәр ҡызны, диде.
Ҡочаҡлашып ятыптыр ике ялғыз,
Күргән суң өметләрен өздө, диде.
Хан ҡызның ҡашында зар иңгерәйдер,
Үз ҡулын үзе тешләп йолҡколайдыр.
Ханымы батшасына ачыуланып,
Бары шомлоҡ үзеңнән, дип илайдыр.
Хан, фәкир, илай-иңгерәй өйгә ҡайтты,
Сыртынан там торғоҙ, дип ярлыҡ әйтте.
Сыҡылын*[39] был баланың белмәдем, дип
Йортоноң барын йыйып үпкә әйтте.
Сумбатын күргәндән суң ҡайтмадығыз,
Алтын айдар толомон әйтмәдеңез.
Сумбатын күргәннән суң шомлоҡ ҡылсам,
Шунда минең муйыныма өйрәтмәнеңез.
Ханымы ханға, мәғкул булдың, диде,
Ялғызыңны үлтереп тындың, диде.

[39] Сыҡыл — ҡайғырыу, һыҡтау.

Инде артында сыҡыл кем ҡылады
Үлә үлгәнчә яманат алдың, диде.
Ялғыз ҡыҙың үлтереп тындың, диде.
Мулаға жанын алып ҡуйдың, диде.
Алдында ҡыуанының кем буладыр,
Терелектә тоҡомоң юйдың, диде.
Бичара хан әйтәдер, белмәдем, дип,
Үлтерер дә баҙарға кермәдем, дип.
Саҡалын йолоп батша күп илайдыр,
Бичараның мөхәббәтен күрмәдем, дип.
Муласына хан килеп йорт йөргөздө,
Алтын мула сыртынан там торғоздо.
Бичара ялғызым, дип хан илайдыр,
Илаған мән үлгәнне кем тергезде?
У дарманда үтептер бу дарманда.
Белмәдем, дип, илады хан да арманда.
Алладан тәкдир килсә, хәбәр булмас,
Донъяның үтеп китте, бары арманда
Ике ғашик бердәйен үлеп ҡалды,
Атасы, йортон йыйып, мула салды,
Бузйегетнең мәйетен ҡочоп жан дусты,
Дусты өчөн жан дусты талып ҡалды.
Дусты өчен бичара күп илайдыр,
Ходайдан аман ҡылып, дип күп теләйдер.
Дустым миңә аманат биреп иде,

Тапшырмай үлсәм, ди үпкәдәйдер.

Егетнең йырлағаны:

Мин ҝайтыуға уй ҝылдым,

Миһербаным, әлвидағ.

Кемнең берлә йөрөгәймен,

Кемне дустым дигәймен?

Син исемә төшкәндә,

Киткем килмәс ҝашыңнан.

Иласам да файда юҝ,

Күздән аҝкан йәшемнән.

Миңә синсез эчкән аш

Ҝыҙыл ҝанға оҝшайдыр,

Ҝайтам дисәм йортома,

Ҝайғың аяҝ тышайдыр.

Күп тубынан айырылған

Ҝаздай булып ҝалдым мин.

Күп иленән айырылған

Ҝаздай булып ҝалдым мин.

Бутасы үлгән дөйәләй

Инде буздап ҝалдым мин.

Ҝолоно үлгән бейәдәй

Инде кешнәп ҝалдым мин.

Жаның хаҝҝа тапшырдым,

Йәрең бергә, ҝашыңда.

Ялғызлыҝҝа илаймын,

Күп ҡайғы бар башымда.

Үләйен дип уйласам,

Аманатың бар ҡуйынымда.

Йөрәйен дип уйласам,

Ялғызлыҡ бар муйынымда.

Аманатың тапшырып,

Тере булсам, килермен.

Жаннан татлы жан дустым,

Юлыңда мин үлермен.

Ҡотолдоңоз донъядан,

Икәү булып, берләнеп,

Юлдашыңнан айырылып,

Дустың ҡайтты зарланып.

Дустының өйөнә барған ере.

Бичараның сүзе инде бөттө, диде,

Йортоноң йүнен сорай китте, диде.

Хан саҡласа, бәндәгә бәлә булмас, —

Аман-исән йортона етте, диде.

Алдында бер-ике әдәм күрде, диде.

Еткән суң яҡын сәләм бирде, диде.

Ике әдәм үз иленең кешесе икән,

Амандашып бергә инде йөрдө, диде.

Ялғыз егет, атынды бормай әйдә,

Синең безгә килгәнең булды файда.

Сезләрне эзлән чыҡкан күп кеше идек,

Ялғыз йөрөйсоң — ҡашыңда дусың ҡайда?

Егетнең жауабы:

— Ходайым ялғызлыҡҡа салды, диде,
Жан юлдашым илай-иңгерәй ҡалды, диде.
Ходайым, тәҡдир етеп, алды, диде,
Жан йәремдән айырылып ҡалдым, диде.

Ике кеше был хәбәрне ишеткән суң,
Шәһәргә алып мыны йөрөдө, диде.
Ялғыз дус шәһәргә кергәннән суң,
Йорт бары мыны килеп күрде, диде.
Башлады егет күпкә сүзне, диде,
Ағыҙып ике күздән йәшне, диде.
Ялғызын хан ишетсә, үлер, диде,
Ханға барып әйтеүгә шашты, диде.
Йыйылып күп бейләр кәңәшәдер,
Ялғызы батшаның, дип моңдашадыр,
Бер ахун бар икән йорт эчендә,
Йыр менән белдереүгә уңдашадыр.
Ахун менән жан дусын алып йөрөдө,
Күп бейләр сәләм биреп ханға килде.
Ялгызының жан дусын күреп иде,
Хан, ханымы урынынан илап тордо:
— Жан юлдашың — ялғызым ҡайда, — диде,
Көйөп, эчемез ялҡын булды, — диде.

— Балаңыз йәре менән артта ҡалды,

Туй булыр өйнөң эчен шайла, — диде.

Атамыз без барғуча йортон йыйып,

Аямай суйсын, — диде, — туйға малны,

Бичара ханымы инанадыр,

Мал суйын, йыйылғанға туй ҡыладыр.

Ҡары ахун бәйләргә алды налиб,

Йырлауға йырын инде уй ҡыладыр.

Бейләре: Ахун, йырың йырла, — диде, —

Ялғызы ханның килер өйгә, — диде. —

Был көнгедәй туй булмас, хан ишетсен,

Ялғызның туйын йырлап туйла, — диде.

Хан, ханымы, йырла, ахун, йырла, — диде,

Ошондай мынан суң ҡайда? — диде.

Ҡулларына алып килеп ат менән чапан,

Ахунға арнап аны бәйлә, — диде.

Әл-ҡисса.

Хан алдында ҡары ахун йыр йырлады,

Әйткәнен ҡолаҡ салып күп тыңлады.

Йырчының сорасаңыз исемен инде —

Ғәли ғаҡылы бар әдәмләр мыны аңлады.

Йырчы йыр башлаған ере.

Күпне күргән ҡарың мән,

Бер аз йырны йырлайын.

Асмандағы турғайдай

Алдыңызда сайрайын.

Өй эчендә ултырған

Ҡолаҡ салың, яхшылар,

Был яманнан файда юҡ —

Тәҡүә булың, яхшылар.

Ҡарыңызның сүзенән

Ғибрәт алың, яхшылар!

Ҡарыларың — иске сүз,

Эшкә алмай йөрөмәңез,

Ғалимларның күзле сүз,

Күңелгә алмай йөрөмәңез.

Егетләрнең ялған сүз —

Жен, шайтаннан ҡалған сүз.

Ҡарыларның хәйер сүз —

Боронғодай ҡалған сүз.

Ғалимларның ғәдел сүз —

Пәйғәмбәрдән ҡалған сүз,

Ходаның дустылары

Күңеленә алған сүз.

Дәртемезгә дарман юҡ,

Ҡайғысызға арман юҡ.

Дәртегә файда булмаса,

Яратканнан фарман юҡ,

Елгән аттан ер ҡалыр,

Тапҡан ирдән мал ҡалыр,

Ир башыға көн тыуса,

Сөйгән йәрдән ул ҡалыр.

Батшалардан таҡ ҡалыр,

Мәргәндәрдән яҡ[40] ҡалыр,

Ир башыға көн тыуса,

Донъяның бары юҡ ҡалыр.

Ғалимлардан хат ҡалыр,

Осталардан яд ҡалыр.

Уйлап торсаң, яхшылар,

Был ялғаннан кем ҡалыр?

Тимерчедән дад[41] ҡалыр,

Йөрөгән ердә юл ҡалыр,

Күргән ердә шул ҡалыр,

Ҡалғандарға улжа өчөн.

Байларыңнан пул[42] ҡалыр,

Хатын булса, тол ҡалыр,

Тапҡан ирдән мал ҡалыр,

Алтын-көмөш пул ҡалыр.

Эттәй шаулап, талашып,

Кем күренгән, шул алыр.

Өйөң булса, буш ҡалыр,

Уйнап йөрөгән дус ҡалыр.

Бу ергә килгәндә йорт белде, диде,

---

[40] Яҡ — йәйә.

[41] Дад — тимер тауышы.

[42] Пул — аҡса.

Ҡарының күптер сүзе, ярый, диде.

Ҡары әйтте, хакимым, йортом, диде

Ҡарының ҡандай яхшы сүзе, диде.

Ҡары икенче төргә төштө,

Ҡыҙарып ике бите нурға төштө.

Хан алдында белгәнен асыҡланмай,

Кимәнен чичеп алып, сурға төштө.

Тыуғанмын дип ҡыуанма,

Тыуған үләр көн булыр.

Үлгән жанның барынан

Сорау сорар көн булыр.

Малым күп дип ҡыуанма,

Малны күрмәс көн булыр.

Алтын менән ер тулса,

Күзең салмас көн булыр.

Бер үзеңнән башҡаны

Күңелгә алмас көн булыр.

Телле мин, дип йыуанма,

Тел бәйләнер көн булыр.

Ҡылған эшең яҡмаса,

Тамуғ әйдәр көн булыр.

Көчөм бар, дип уйлама,

Көчөң китер көн булыр.

Янған тамуғ өҫтөнән

Сират үтер көн булыр,

Донъядағы ҡолларыңа

Күзең салмас көн булыр.

Балам бар, дип йыуанма,

Бала да ҡалыр көн булыр

Ғалиммын дип ҡыуанма,

Тиргәү алыр көн булыр,

Ҡылған эшең яҡмаса,

Залим син, дир көн булыр.

Ҡыҙыл йөзгә ҡыуанма,

Суйылып ҡалыр көн булыр.

Ҡорт-ҡырмыҫка йыйылып,

Туйынып ҡалыр көн булыр,

Батша идем, дип уйласаң,

Искәндәр мән Сөләймән

Алар да үткән донъядан,

Балам күп дип уйласаң,

Йөз ҡырыҡ бала атасы

Әдәм үткән донъядан,

Малым бар дип уйласаң,

Малы сездән күп булған.

Ҡарун үткән донъядан.

Көчөм бар, дип уйласаң,

Ҡаһарман менән Ғәли

Улар да үткән донъядан.

Сәсәнмен дип уйласаң,

Ничә-ничә сәсәнләр
Сөйләп үткән донъядан.
Ничә-ничә түрәләр
Ничә-ничә яхшылар
Илап үткән донъядан.

Хан алдында ҡары ахун йыр йырлайдыр,
Сүзенең төбөн ханға бордо инде.
Йырлаучы был ергә килгәнендә
Хан бер тороп урынына бер утырды:
— Ахуным, яҡшы әйткән йырың синең,
Үлем әйтеп чығадыр ҡырың синең,
Йырыңның иңе-буйы үлем икән,
Безгә ҡарай тейәдер ҡырың синең.

Йырчының жауабы:

— Тәҡсир, хан, үлемне әйтмәй, нине әйтәйен?
Был ергә әжәл етсә, мин нитәйен?
Әдәмнең ахыр-суңы үлем дигән,
Чын әйтсәм, аны әйтмәй ни әйтәйен?

Йырчының икенче жауабы:

— Яраҡкан суң китермез,
Бу ялғаннан китермез,
Башҡа үзгә үлем юҡ,
Илай-иңгерәй китермез.
Әжәл дусар булған суң,

Чарамыз юҡ, китермез,

Әмер килеп алланың

Муйын соноп ятырмыз,

Донъя сәсрәп, көл булса,

Ҡара ергә батырмыз.

Әдәм иде атамыз,

Һауа ирде анамыз,

Бу донъяда файда юҡ,

Улар да үткән донъядан,

Туфан сыуы ташҡанда,

Таудан, таштан аҡҡанда,

Һәр йәндектән алып ул,

Кәмә эченә ҡалып ул,

Аман-исән ҡалып ул,

Нух пәйғәмбәр үткән донъядан.

Нимрут утҡа атҡанда,

Ут эчендә ятҡанда,

Чын сүзенән танмады

Ялғыз улы Исмәғил.

Бычаҡ менән жеп алып,

Минә тауына апарып,

Ҡорбан чалған Ибраһим,

Ходай тәғәләнең хилалы,

Ул да үткән донъядан.

Ун ике уғыл эчендә

Тотҡон идеп яткырып,

Рәхмәт итте алласы,

Мысырның булды батшасы.

Етмеш йылның суңында

Йөҙөн күрде атасы.

Ахыр ғүмер хан булып,

Йософ үткән донъядан.

Ернең йөҙөн алған ул,

Төрлө шәһәр салған ул,

Көнчығышҡа барған ул,

Көнбатышны күргән ул,

Ғәдел туған хан ирде,

Ер йөҙөнә фана иде,

Жан үлемгә еткәндә

Ернең йөҙө боҙолоп,

Көннөң күзе тотолоп,

Мәңге сыуын табалмай,

Искәндәр үткән донъядан.

Дауд уғлы Сөләймән

Донъяда хан булған ул,

Ернең йөҙөн алған ул,

Алтын татҡа менеп ул,

Асман менән очоп ул,

Мең хатынны ҡочоп ул,

Ходай тәғәлә юл биргән.

Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,

Ялғызына уғыл биргән.

Бала өчөн армандай,

Ер йөҙөнә хан булып,

Сөләймән үткән донъядан.

Ничә-ничә ер алған

Ханлар үткән донъядан,

Шундай-шундай аяулы

Ханлар үткән донъядан.

Ибраһим мән Исмәғил

Ҙикер йа мән Зөлкәфил,

Ҡабил мән әүүәл Һабил

Улар ҙа үткән донъядан.

Күзсезләрне күз күргән,

Аяҡсызны йөзгөргән.

Йығылғайны торғоҙған,

Әүлиәләр үткән донъядан,

Хаҡ әмере мән күккә оҡан

Алла тәғәләгә ғашиҡтай,

Ауыҙынан ут чығарып,

Ялан аяҡ, ялан баш.

Ике күздән ағып йәш

Диуаналар үткән донъядан.

Мең дөйәгә йөк артған,

Йөз шәһәргә килтергән,

Алтын татға ултырған

Алтын берлә көмөшкә,

Ереӊ йөҙөн тултырған

Малдан зәкәт бирмәде,

Хаҡ әмерен ҡылмады,

Үлем ғәмен еймәде,

Мындай байлыҡ ал мән,

Иман-ислам табалмай,

Ҡарун үткән донъядан.

Әүүәле дә Мөхәммәд,

Ахыры да Мөхәммәд,

Ун сигез меӊ ғәләмнеӊ

Фәхредәй Мөхәммәд.

Өмөтөнә зар илап,

Ярлыҡ дип күп теләп,

Өмөтө өчөн атасын,

Теләмәде анасын,

Ходайдан ярлыҡ килгәндә,

Ҡорбан итеп баласын

Ун сикез меӊ ғаләмне

Аныӊ өчөн яратҡан,

Мөхәммәд пәйғәмбәремез үткән донъядан...

Ер йөҙөнә килгәннәр

Мин-мин диеп йөргәннәр,

Меӊ йәш ғүмер сөргәнләр —

Бары да үткән донъядан.

Хан да үткән донъядан,

Ҡары да үткән донъядан,

Бай да үткән донъядан,

Ярлы да үткән донъядан.

Күп тә үткән донъядан,

Аз да үткән донъядан.

Яман яхшыны айырмай,

Бары да үткән донъядан.

Атаң синең — ҡара ер,

Анаң синең — ҡара ер.

Ейәр дәмең бөткән суң

Барыр ереӊ — ҡара ер.

Торор ереӊ — ҡара ер,

Күрер ереӊ — ҡара ер.

Ҡары ахун был ергә килде, диде,

Хан шомлоҡноң булғанын белде, диде.

Терелекнең суңында бары үлем,

Алла әмеренә хан муйын сондо, диде.

Әйтеп йырын, был ахун тора килде,

Сүзенең төбөн ханға бора килде.

Яҡындатып йырын бороп иде,

Бер сүз инде әйтеүгә тура килде:

— Яраҡан хан барындай,

Хан киткәнгә охшайдыр.

Бөгөн күргән төшөмдә

Сезнең дағы балаңыз

Ул үткәнгә охшайдыр.

Анан суңғы безләргә

Дағы кизәк яҡынайға охшайдыр.

Балаңа, хан, илама,

Бездән борон үтте, дип,

Бу донъядан китте, дип.

Улар китте атаға,

Ата берлән анаға,

Сез дә бер көн барырсыз

Борон үткән балаға.

Әжәл етмәй үлмәк юҡ,

Алла әмеренән ҡалмаҡ юҡ.

Әжәл етеп үлгән юҡ,

Һич кем ҡайтып китмәк юҡ,

Тәҡдир етсә, ҡалмаҡ юҡ,

Әжәл ҡуйып алмаҡ юҡ.

Әжәл етеп үлгән суң,

Һич кем барып алмаҡ юҡ,

Орош-талашы ҡылмаҡ юҡ.

Ярлыға күше ҡылмаҡ юҡ,

Анадан бер тыуған суң,

Һич кем алмай ҡалмаҡ юҡ.

Ханымның баласын эздәп барғаны.

Ханымның ярлығын йорт белде, диде,
Йыйылып ғәскәр ун мең булды, диде.
Хан-ханым, ялғызын күрәмен, дип,
Ясанып, атларына менде, диде.
Күп ғәскәр көн-төн тынмай йөрдө, диде,
Ҡырыҡ көндә шәһәргә килде, диде,
Быларны күреп хан ҡурҡадыр:
— Бу ғәскәр ҡайдан пәйдә булды? — диде.
Быларға илче ҡылып кеше салды,
Илче килеп, былардан хәбәр алды.
Баяғы ялғыз егет атасы икән —
Күргән илнең бары да таңға ҡалды.
Хан ҡурҡып йорто менән атҡа менде,
Килгән хан алдына ҡаршы килде.
Әжәл-хаҡтан, сәбәбе бездән булды,
Ғәйебен муйынына алып, ғарыз ҡылды:
— Тәҡсир хан, әжәле уның бездән булды,
Нә ҡылса да бәндәсенә алла салды.
Ғафиллыҡ мән был эшне ҡылып идек,
Үкенеп, йортноң бары илап ҡалды.
Алдында ғәйебемез бар, ғарыз ҡылдыҡ,
Ат менеп алдыңыздан ҡаршы килдек,
Ҡулыңызда ҡылычыңыз тотасыздыр,

Нә ҡылсаң да, ғәйебемез бар — муйын сондоҡ.

Балам тәңрем тәҡдир ҡылған чығар.

Сәбәбе уның сездән булған чығар.

Тиргәүең әхирәттә булсын синең,

Аллаға ҡылған эшең ғаян чығар[43].

Ҡаныгыҙ кичтем[44], хан, — дип, атҡа менде,

Бу хан кичкән суң күңеле тынды.

Күп ғәскәр шәһәргә барып керде,

Бузйегет муласына килде, диде.

Хан-ханым муласына яҡын килде,

Өйгә инмәй, ханым тышта тауыш ҡылды.

Ишеген ачайым дип бағып иде,

Ача алмай йорт бары ғажиз булды.

Ялғызын юҡтап ханым зар илайдыр,

Ялғызым, ишек ач, дип зар иңрәйдер.

Муласы зар иңрәп тордо, диде,

Ханым өчөн ҡайғырып күп илайдыр.

Ханымның илаган йыры.

Ун ай сине күтәреп,

Имчәкемне имезеп,

Татлы тәғәм йигезеп,

Аҫыраған анаңмын.

Анаң тора ҡашыңда,

[43] Ғ а я н  ч ы ғ ы у — асыҡланыу.

[44] Ҡан кичеү — ғәфү итеү.

Зар илайдыр башында.
Тормас ергә китеп сән,
Торғол, балам, торсана
Моңло анаңны күрсәнә,
Хәлемне бер сорасана!
Сиңә килдем, күргәле,
Бит-йөзөңнө сөйгәле,
Артымда кем ҡаладыр,
Ҡолоном кем буладыр?
Сине уйлап зар ҡылсам,
Күзем ҡанға туладыр,
Һай-һай, балам, һай, балам,
Кемне балам дигәймен,
Кемнең менән йөрөгәймен,
Йөҙөң ҡайда күргәймен?
Уҡысам иде сүзеңне,
Күрсәм иде йөзеңне,
Илап анаң килгәндә,
Илап-иңрәп торғанда,
Моңло көндә, ай, балам,
Илап анаң килгәндә,
Бер күрмәйсең, жан балам.
Бутасы үлгән дөйәләй,
Буздай килдем, жан балам,
Ҡырыҡ көнлөк киң юлда

Эздәй килдем, жан балам,

Алла үзе биргәнде,

Әжәл етеп алғанды,

Анаң илай ҡалғанды,

Иласа да ни ҡылсын.

Алла әмеренә күнгәнде,

Зарлап анаң ҡалғанды,

Күрер көнөм булғанда

Бер күренсә жан балам.

Баласын юҡтап ханым талып ҡалды,

Күп ғәскәр бу ханымнан өмөт өздө.

Ханымның ҡайта илап ҡайтҡаны.

## “Башҡорт халыҡ ижады”нан өлгөләр

1. **Бәйғәмбәр ташы**. Ҡалмаҡ ятҡан яланы. Йылайыр районы Ҡаҙырша ауылында тыуған Өфөлә йәшәүсе Фәриҙә Игибаеванан Ф.А. Нәҙершина 1982 й. яҙып алған.

**Бәйғәмбәр ташы[45].**

Йылайыр районы Ҡаҙырша ауылынан ике саҡрым алыҫлыҡта, Бирмәҫ йылғаһы буйында, бейек ҡая таш бар. Шул таштың итәгендә кеше аяғының эҙе бар. Береһе ҙур эҙ, береһе бәләкәй бала аяғының юлы. Бик эҫе ваҡытта, хатта таштар эреп ятҡан бер саҡта, Мөхәммәт пәйғәмбәр бер улы менән тау башынан шунда һикергән икән, тип һөйләйҙәр ауыл кешеләре.

Ул таш изге таш һанала. Юлдан үтеп йөрөүсе кешеләр, йәше-ҡарты, шул таш эргәһендә туҡталып китәләр. Ҙур аяҡ эҙенә сәскә, еләк, муйыл, бик булмаһа, матурыраҡ таш киҫәге булһа ла һалып уҙалар. Икенсе аяғының эҙе ауылда, йылға буйында.

**Ҡалмаҡ ятҡан яланы[46].**

Беҙҙең Йылайыр яҡтарында элек ҡалмаҡтар ҙа йәшәгән. Улар менән башҡорттар араһында татыулыҡ булмаған. Бер алышта ҡалмаҡтар еңеләләр ҙә, ҡасыр алдынан урманға ут төртәләр. Бик күп урман янған. Шул урман урынында башҡа ағас үҫмәгән. Халыҡ уны Ағасҡороған яланы тип атаған. Ҡалмаҡтарҙың йәшәгән урынын әле булһа ла Ҡалсаҡ ятҡан ялан тип йөрөтәләр.

---

[45] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар / төҙ., баш һүҙ, ком. авт. Ф.А. Нәҙершина. Өфө: Китап, 1997. 71-се б. (Артабан: БХИ)

[46] БХИ. Риүәйәттәр, легендалар. 80-се б.

2. **Толпар баҫҡан таш**. Өфө ҡалаһында Учалы районы Сәфәр ауылында тыуған Миңнебай Юлмөхәмәтовтан Әхмәт Сөләймәнов 1971 й. яҙып алған.

**Толпар баҫҡан таш[47].**

Ҡужай ауылы янында Уй йылғаһы буйында бер ташта ҡәҙимге бер даға эҙе бар.

Тәкәғашҡа тигән батыр булған. Ул шул тиклем көслө, ғәйрәтле була: уҡ-йәйәһен күтәрергә башҡаларҙың көсө етмәгән.

Бер ваҡыт ҡаҙаҡтар менән алыш-һуғыш ваҡытында, Тәкәғашҡа ҡамауҙа ҡала. Бының толпары була. Тәкәғашҡа шул толпарына менә лә саба, артынан саң-туҙан ғына тороп ҡала. Ҡаҙаҡтар быны ҡыуа төшәләр. Тәкәғашҡа, Уй йылғаһына килеп еткәс, толпарына һуғып ебәрә. Шул саҡ толпар һикереп йылғаның ткенсе яғындағы ташҡа килеп төшә. Ташҡа толпарҙың тояҡ урыны уйылып тороп ҡала. Был таш һаман да толпарбаҫҡан таш тип йөрөтөлә. Уның эргәһенән үткән кешеләр тәңкә һалып китәләр.

3. **Ҡыҙтораташ**. Өфө ҡалаһында Әхмәр Үтәбаевтан Ф.А. Нәҙершина 1981 й. яҙып алған.

**Ҡыҙтораташ[48].**

Элекке заманда Алтын урҙа осоронда, башҡорттар монгол-татар иҙеңе аҫтында булған. Монгол баҫҡынсылары башҡорт ауылдарын яндырған, кешеләрен үлтергән, ҡол итеп, ҡыуып алып киткән. Монгол ханы әленән-әле башҡорт иленә баҫҡынсыларын ебәреп торған.

[47] БХИ. Риүәйәттәр, легендалар. 77-се б.
[48] БХИ. Риүәйәттәр, легендалар. 164-се б.

Баҫҡынсылар беҙҙең ауылға ла ҡағылған (Баймаҡ районы Буранбай ауылы). Ауыл ҡарттары һөйләүенсә, ауылға монголдар килеп ингәс, бер кеше лә ҡасып тотола ҡотола алмаған. Тик бер ун һигеҙ йәшлек ҡыҙ ғына ҡасып китә алған. Тик уны һыбай эҙәрләгәндәр. Ҡыҙ алыҫ ҡаса алмаған. Урман юлы менән ҡасып барып, ауылдан бер саҡрым алыҫлыҡтағы ҡаяға инеп йәшеренгән. Баҫҡаҡтар аттарынан төшөп, ҡаяны уратып алғандар. Ҡыҙ таштың өңөш эсенә һаман төпкә ҡасҡан. Ҡарттарҙың һөйләүенсә, ул ваҡытта таш йомшаҡ булған. Ҡая ишелеп, ҡыҙҙы ҡыҫҡан. Тегеләр ҡыҫылып, ҡысҡырып торған ҡыҙҙы күргәндәр ҙә, инергә ҡурҡып кире киткәндәр. Ҡыҙ шунда ҡыҫылып үлгән. Өлкәндәрҙең һөйләүенсә, ҡыҙҙың һөйәктәре лә ятҡан, тиҙәр. Һуңынан күлдәктәре генә ҡалған.

Ҡаяны геологтар шартлатҡайнылар. Элекке хәленә кире ҡайтып, ҡаяның ауыҙы кире асылды. Шунда биш бармаҡ менән баҫҡан һымаҡ, ташта соҡорҙар уйылып ҡалған. Шул соҡорҙарҙы ҡыҙҙың бармаҡ эҙҙәре тип һөйләйҙәр. Ысынлап та, биш бармаҡ менән баҫып ҡараһаң, бөтә бармаҡтар ҙа үҙ урынында булып, тап килеп тора. Ә ҡаяны Ҡыҙтораташ ҡаяһы тип йөрөтәләр.

4. Шарлы урман. Сығышы Әлшәй районы Маянған ауылынан булған Өфө ҡалаһында йәшәгән Ҡотлоәхмәт Вәлиәхмәтовнтан 1980-се йй. аҙағында Ф.А. Нәҙершина яҙып алған.

**Шарлы урман[49].**

---

[49] БХИ. Риүәйәттәр, легендалар. 190-сы б.

Беҙҙең яҡтарҙа Яйыҡһыбы ырыуы (Мең ҡәбиләнең бер тармағы) башлығы Яйыҡһыбы ҡарт хаҡында элгәрерәк бик күп һөйләй торғайнылар. Хәҙер ҡарттар аҙайғас, онотолоп бара инде.

Яйыҡһыбы нәçел-нәсәпле, заманында бик абруйлы кеше булған. Унын уландары ғына һигеҙгә еткән: Ҡармыш, Сураҡай, Сурай, Әлшәй, Аҡколай, Ҡайып, Дүртөйлө – Яйыҡһыбы ҡарттың һигеҙ улына һигеҙ ауыл булған. Был  ауылдар әле лә шул уландар исеме менән йөрөтөлә.

Бер саҡ ырыу башы, бер татарҙы тәржемәсе итеп яллап, Петербурға яһаҡ тапшырырға ебәрә. Был татар үҙен Яйыҡһыбы ҡарттың туғыҙынсы улы итеп күрһәтеп, Туҡтар-Әдрәшит тип яҙҙырып ҡайтҡан. Шуға был татарҙар араһы башҡорттарҙың мең ырыуына туғыҙынсы ауыл булып ингәндәр.

Туғыҙ ауыл һуғышҡа, яуға һәр ваҡыт әҙер торған. Ағай-энеләр ҙә берҙәм, татыу йәшәгән. Тик бер заман әллә ни урыç баярының хәйлә тоҙағына эләшеп, ағай-энеләрҙең өсөһө, бер булып, Шарлы урманын (Әлшәй, Бәләбәй районларындағы урман. Шарлы – һаҙлы тигәнде аңлата) һатып ҡайтҡандар. Ҡалғандары быға бик әрнегән. Урманынан ҡолаҡ ҡаҡҡан халыҡ йыр сығарған:

Шарлы урманҡай тигән урман ҡайҙа?

Ҡайҡымбирҙе (Шарлы урман йылғаһы) кеүек һыу ҡайҙа?

Шарлы урманҡай беҙҙән китте инде,

Кинәнеп һурып эсергә бал ҡайҙа?

Шарлы урманҡайҙарҙың уртаһында

Ҡушылып-доролоп үçкән бер уçаҡ,

Шарлы урмандар беҙҙән китмәҫ ине

Бөтә Яйыҡһәбә бер булһаҡ...

5. **Заһидулла**. Силәбе өлкәһе Ҡонашаҡ районынан сыҡҡан билдәле башҡорт шағиры, драматургы Ҡадир Даяндан (1910-1975)[50] яҙып алынған.

**Заһидулла[51].**

Сабып ҡына барып, ат бәйләнем
Әйҙе генә буйына ҡамышҡа.
Татлы йоҡоларҙан уянып килдем
Заһидулла, тигән тауышҡа.

Йүгереп кенә мендем, ай,
тауҙарға,
Тау башҡайы ҡая таш икән.
Донъя ҡайғыларын юик п күрҙем,
Күрер өсөн тыуған баш икән.

Бейек кенә тауҙы өс әйләндем,
Бәләкәй генә турысай бар саҡта.
Сер бирмәйсә йөрөнөм
дошмандарға,
Ҡулдарымда форсат бар саҡта.

Ҡапҡан ғына һалдым, ай, күк
боҙға,
Ҡама йәнлек менән ҡондоҙға.
Ултыра ла торғас, бер йырланым,
Юлдаштарым юҡҡа, яңғыҙға.

6. **Илсе Ғайса**. Башҡортостандың Иглин районында тыуған билдәле башҡорт йырсыһы Мәғәфур Хисматуллиндан[52] (1915-2004) яҙып алынған.

---

[50] Белешмә өсөн: 1930-33 йй. буласаҡ әҙип Өфөлә К.Е. Тимирязев ис. Башҡорт педагогия институтында уҡый. Был осорҙа шағирҙың донъяға ҡарашы киңәйә, белеме арта. Бында ул Ғалимов Сәләм, Мөхәмәдйәров Хәй кеүек яҙыусы яҡташтары менән тығыҙ бәйләнештә аралаша. Институттан һуң Ҡадир Хәким улы Башҡорт китап нәшриәтендә консультант, Стәрлетамаҡ педагогия училищеһында уҡытыусы булып эшләй. 1936-1941 йй. БДПИ-ның башҡор теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире вазифаһын атҡара. Башҡорт теленең стилистикаһы һәм грамматикаһы буйынса ғилми хеҙмәттәр авторы. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Һуғыштан һуң хеҙмәт юлын, ғүмеренең ахырынаса, Өфөлә Башҡорт китап нәшриәтендә дауам итә. Халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһына.

[51] Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар / төҙ., баш һүҙ, ком. авт. С.А. Галин. Өфө: Башҡ. кит. нәшр-е, 1974. 119-сы б.

[52] Белешмә өсөн: 1931-34 йй. Мәғафур Хисматуллин Башҡорт сәнғәт техникумында белем алғандан һуң, 1934-36 йй. Баймаҡ колхоз-совхоз театрында эшләп, өс йыл буйына Мәскәү консерваторияһы янындағы Башҡорт студияһында вокал төркөмөндә уҡый. Йырсы хеҙмәт юлын 1939 й. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында тәүге труппа солисы булып башлай һәм ғүмеренең ахырынаса ошо театрҙа эшләй.

## Илсе Ғайса[53].

Аҙаштырған болан балаһылай,
Яңғыҙ башым ситтә интегәм.
Көндәрен дә төнөн йөрәгем яна,
Иҫемә төшһә тыуған ил генәм.

Йүгереп кенә мендем тау башына,
Гөрләп тә генә килә машина.
Һау-сәләмәт ҡайтһам Уралыма,
Тарих яҙыр инем ташына.

Ҡара ҡытат елән, ай, иңемдә,
Ҡара ебәк билбау билемдә.
Башҡайҙарым ситтә йөрөһә лә,
Күңелдәрем тыуған илемдә.

[53] Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. Күрһәтелгән том.148-се б.

## Хәҙерге заман ҡала башҡорттары фольклоры.

### *Солтангәрәева Розалия Әсфәндиәр ҡыҙы*

### *яҙып алған материалдар*

**1.Абдуллина (Рыҫҡолова) Гөлгөнә Рәхимйән ҡыҙы (1957 й.).**

Бөрйән районы, Әбделмәмбәт ауылында 4-се бала булған. Белеме – урта белем. Ике рәт ауыл советы депутаты булған. Өфөлә 1978 йылдан йәшәй. Фольклор менән 1981 йылдан бирле махсус шөғөлләнә, “Тәлсәр һандуғас” премияһын алған. Ике тапҡыр Туймазылағы Төбәк-ара “Оҙон көй” йырсылар конкурсы лауреаты (2016, 2018 йылдар). М. Хисмәтуллин исемендәге конкурста өсөнсө урын алған (2022 й.).

Г. Рыҫҡолованың нәҫел тамыры атаҡлы Сабирйән сәсән тоҡомона бәйле. Һәр һөйләменә тиерлек мәҡәл, ләҡап, көләмәс ҡыҫтыра. Сағыу, матур, моңло тауышлы.

**Соматикаһы:** Оҙон ғына буйлы,бик теремек, ихлас Сәнғәткә,ижадҡа мөкиббән кеше. Мыҡты кәүҙәле, ҡара һоро күҙле, танауы тупаҡ ҡына, йоҡа иренле, йоморо битле, күҙҙәре ҙур түгел.



Гөлгөнә Рыҫҡолова менән

**Әйтемдәр**

“Күңелем килһә – күлдәймен”.

“Һөйләй белмәгән ауыҙҙан с...а белгән күт яҡшы ,тим мин ”.

“Артын ялаһаң да, телең ялаһаң да – ярап булмай ул бер кемгә!”. Яман тип күрергә теләһә- күрә шулай итеп, ҡамыры шундай Шуға алтын булһаңда – һине яманлай. Был ҡара көнсөл кеше була..

“Холҡом шулай – үҙгәртмәйем. Мин булам!”.

“Үҙеңдең хеҙмәтең менән ашаһаң – ризыҡ татлы була”

Үлер алдынан әсәйем әйтте. “Мин һеҙҙе кәртәләгәнмен, минән алда берегеҙ ҙә китмәй. Белегеҙ!” –тигән. Әсәйе Йомабикә Ҡунаҡбаева, 2014 йылда вафат була (9 бала әсәһе).Әйтеме ошо булды

Көслө рухлы әүлиә кеүек, дауасы ине әсәйем .

Әсәйем әйтеме: ҡутара һалма тәрилкәләргә ашты! Кеше күп , бесәндән ҡайта бит! Үҙегеҙ генә түгел. Бергә ашаң, ти ине!

Риза булды һәр нәмәгә, һәр һынауға.Тыныс китте...

“Ир ҡаҡҡанды мир ҡаға”.

“Бисә мөхәббәте булмаһа – ир юғала”. Был бик дөрөҫ! Ирҙе яратырға кәрәк. Яратып йәшәргә, маҡтап ҡына. Уға иркәклек бисәнән дә ныҡ кәрәгерәк. Шулай тине әсәм.

Ир- ҡатын ҡапҡасы ул Гонаһтан пәрҙә.

Ирле кеше – ҡәҙерле ҡатын кеше була ул

Арт һаҫыҡ тип, к...те ҡырҡып ташлап булмай! Барын күтәрәһең үҙеңдән дә.

Йәлләмәһәң итеңде – ир йәлләмәҫ к...ңде!

(Гөлгөнә Рыҫҡолова бик ихлас, иркен һөйләй, шул саҡ үҙе рәхәтләнеп көлә. – Р.С.).

**Мәҡәлдәр**

1. Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын.
2. Ир ҡаҡмаһа – мир ҡаҡмай.
3. Ир баш – ҡатын муйын.
4. Ир тигән ирҙә (эсендә) эйәрле ат ятыр.
5. Ир бер әйтер – эшләр.
6. Ир булмаған күп һөйләр – эш булмаç.
7. Ир бысаҡҡа – ҡатын ҡосаҡҡа туймаç.
8. Бисә көләс булһын, булмаһа – юҡ һын.
9. Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы, бер булмаһа бер була.
10. Әсәнән күргән – тун бесәр, атайҙан күргән – ат егәр.
11. Әсәйҙең аяғы аçтында ожмах булыр.
12. Әсәһен күрҙә – ҡыҙын ҡос.
13. Ҡатын тулаһа – аттан яман.
14. Әсә һөтө менән кермәгән тана һөтө менән кермәç.
15. Ҡыҙ-ҡатын ерҙән ала көс.
16. Ир – илдән ала көс..(.Вар Бисә ерҙән ала көс, ир – күктән ала көс)
17. Ҡыҙға ҡырҡ яҡтан тыйыу кәрәк
18. Ҡатын ысындаһа – бүренән ҡан ҡоçторор.
19. Ҡатын ысындаһа – бүрене тыстырыр.

## Йолалар

### Табын тәртибе

Табынға ултырғандар өйгә килгән кешене өçтәлгә саҡырырға тейеш. Хужала уртаҡ аш булырға тейеш. Мин шуны бер һынаным

Бер мәл мине аш өçтөнә, кешегә табынға килһәм дә – саҡырманылар Ә мин бик нығ асыҡкан инем. Нығ! Улар мине өçтәлгә саҡырманы. Шул саҡ берејһе ҡарлыҡты һөйәккә. Шулай ул, ризыҡ йәлләү.Көскә ҡотолда ахыры.

**Ғибрәтле хәл**

Халыҡ йыйылып ҡунаҡ көтәбеҙ мәжлескә. Ҡасандыр бер бик зар булып, йомош менән килгәндә оло түрә ҡабул итмәне мине.. 30 йылдан һуң әлеге мәжлескә килеп төштө был! Эйе , шул кеше беҙгә ҡунаҡка төштө. Шулай була ул донъя… ҡунаҡ иттем. Ҙурлап, йырлап , ихлас туғандар менән. Сер бирмәнем.

**Аҡмулланан**

1. Аҡ туныңды яманлап

Яҡшыһын ҡайҙан алырһың?

Алған бисәңде ямандап-

Арыуын ҡайҙан табырһың?

Туғаныңды туған итмәй-

Тоғроно ҡайҙан табырһың?

Үҙ башыңды ҙур итеп,

Тиңдәш ҡайҙан табырһың?

**Ҡобайырым.**

Ҡолағың һал йырыма,

Уйлан төнөң буйына.

Хәсрәт килһә башыңа-

Уйылып китмә уйыңа!

Шат-күңелле булһаң да,

Хәсрәт йөртәм иңемдә.

Ҡалай итеп онотайым-

Бары минең иңемдә?...

## Йырҙар

### Йомабикә йыры**.

1.Алтын самауырҙар, алтын самауырҙар,
Эсендә һыуы ялҡын.
Һеҙҙең яҡта иҫкән елдәр, иҫкән елдәр –
Үҙегеҙ кеүек яҡын.

2.Һыу буйында йәшел үлән, йәшел үлән
Ҡыйып алаһы ине.
Мәңге һағынмаҫлыҡ, һағынмаҫлыҡ итеп,
Ҡарап ҡалаһы ине. 2 т.

***Был йырҙы "Дарман" ансамбле үҙенең репертуарына алды. Ошо йырҙы йырлағанда Фирдус Шәрәфетдинов баянда уйнаған (баянист, Башҡорт халыҡ артисы.*

### Аҡ ҡарсыға

1. Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға.

Борон бүре ҡыуып та тау сыға.

Ашап-эсеү менән дандар сыҡмай.

Татыу йәшәү менән дан сыға.

2. Һаҡмар ғына буйы ай, ҡырсын тыш.

Ҡыҙыл ҡырсын буйлап йүгерҙем.

Уҙып та ғына барған был ғүмергә

Ҡулъяулығым болғап та һыҙғырҙым.

### Яратыу хикмәте

Атайым инәкәйемде шу хәтлем ныҡ яратты. "Бикә, күҙемдән осоп ҡына бараһың!", – тигән атайым ҡатынына. Йомабикә инәйем

бик һылыу, матур бейей, йырлай, кеше араһында күрмәлекле, күркәм ине!

Еңел һөйәкле , ихлас ине!! Һәр бер мәжлес, ҡор ул булғанда ялтыраҡ булды!. Бәлки ныҡ яратып әйткәндер инде атайым. Йәнәһе, еңел йөрөйһөң, янымдан бына-быма китерһең кеүек, тип. Иҫтә ҡалған ошо бик матур әйтем. Сабирйән сәсән Гөлгөнә Рыҫҡолованың атаһы Рәхимйән яғынан туған. Гөлгөнәнең өләсәһе менән Сабирйән сәсән бер туғандар. Быны Мөхтәр ағай Сәғитов әйтте...

**Сабирйән сәсән һүҙе.**

“Түңгәккә шиғыр”. Ошо шиғыр арҡаһында Сәсәнде ултырталар, Себергә ебәрәләр. Заманында ауылда мәктәп аса, күп яҙыша, Халыҡ аңын күтәрә. Беломор-Каналға ебәрәләр, шунда 44 йәшенә тиклем була. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем була. 1989 йылда Сабирйән олатайымды аҡланылар. Аҡса бирҙеләр. Әммә уларҙы вис ҡыҙҙары алды. Бер кемгә лә , тейешле кешеһенә лә бирмәнеләр. Кеше өлөшө уларға өлөш булманы. Йолалар ҙа хәрәм булды, туғандарынала бирергә кәрәк ине бит. Ҡайғы шуға күрҙеләр, оло бәлә. Ай, ярамай бит ул кеше өлөшөнә кереү!

**Шиғыр**

Һин әүәле, бер йәш ағас инең,

Баштарыңа солоҡ ултырған.

Күпме кеше һинән файҙа алды.

Күпме кеше

Күләгәңдә ятып ял иткән...

**Сабирйән шиғыры**

Килке-килке ғүмер шулай уҙыр.

Барыбер ҙә шулай буласаҡ.

Артта ҡалған етем вариҫтарҙың.

Күлдәй күҙ йәштәрен һөртәсәк!

**Тәртип**

Аш иң алда – иргә бирелә. Һәр саҡ шулай булырға тейеш Кем килһә лә !!! Бына бер хәл. Беҙ өҫтәл артында көтәбеҙ. Атай ашай башлағас ҡына, әсәм шунда ғына , тик өлкән улына ғына шәкәр бирә. “Ул (улым) ул хаҡы бар”, – тип. Ир булған улым – хаҡы ҙур тигән һүҙ. Шуға ул хаҡы ла алда, һеңленән алда йөрөй. Был бик аҡыллы ғәҙәт.

**Йортто таҙартыу тәртибе**

Ишектән кергәс – һулаҡайҙан башлап йөрөп урайһың, аҫтан-өҫкә, өс төрлө үлән менән ишек төбөнә тупһаға тиклем төтәҫләп еткерәһең. Шунан көлдө йыйып алаһың. Ҡайҙа ныҡ төтәй – шунда иғтибар итеү кәрәк.

Ишек төбөндәме, тәҙрә төбөндәме, табала мәтрүшкә, баламут (иван-чай, кипрей) – бары ла әйбәт төтәҫләргә тейеш. Бик кәрәк өй таҙартыу. Артыш, әрем, мәтрүш кәрәк бергә, төтәҫләп алып бараһың.

Артышты алыҫтаныраҡ алырға кәрәк. Үлән сыҡмаған урындан алырға кәрәк. Тыныс урындан! Алғас, урынына өлөш һалырға кәрәк. Кәнфит, тәңкә, тоҙ һ.б.

Шунан, төтәҫләп бөткәс – ул көлдө алабыҙ йыйып гәзиткә, шунан 7 юл сатына илтеп ырғытаһың, тубыҡҡа бөгөлөп кенә һалаһың. Нисек етте – шулай түгел... Эйелеп кенә ергә.

Ҡайтҡанда ла, барғанда ла кеще осраһа, урап үтергә. Әммә һүҙ ҡушмаҫҡа! Кем осрай,кем белә... бәлки ошо кеше хөсөт итәлер. Дүрт юл сатында ла көлдө ҡалдырырға ярай. Әйтергә кәрәк :

“Ете тау аръяғына,

Ете диңгеҙ аръяғына.

Серек түңгәккә кит!”, – тип әйтәһең.

Боролоп ҡайтҡанда, бер кем менән һөйләшмәҫкә!

Ҡояш байығанға тиклем эшләйҙәр был әмәлде.

**Теләк көсө**

Теләк теләгәндә лә әсәйем мөрйәнән әйтә ине. Мөрйәгә ауыҙ ҡуйып теләй ине. Мөрйәнән әйтте! Эйе! Ҡабул була ине теләк! Өй, тирмә ишеге көнбайышта түгел, көнсығышҡа ҡарарға тейеш. Белеү кәрәк.

Тупһа таң ата торған яҡҡа ҡарарға тейеш. Иртән шундуҡ тупһаны, янын һеперергә кәрәк! Унда бит ни генә килмәй төнөн.

**Тәртип**

Ҡыҙлы өйҙөң тәҙрәләре урамға ҡарамаған. Ихата эсенә генә ҡараған. Эйе. Шулай буған.

Урамға ҡарамаған. Теләһә кем ҡарамаһын, тип. Ҡыҙ һаҡлау ул. Беҙҙең Бөрйән яғында шулай булған. Ике тәҙрә ине өйҙөң.

**Таш өй**

Таш өй бар. Бөрйәндә, Яуымбай ауылы янында ул мәмерйә бар. Ул икенсе ул Байназар менән Яуымбай араһында. Таш өй тип әйтәләр, электән.

**Йырлау хикмәте**

Бер белекле кеше йәшәй ине . Бабай мулла һуҡыр, бәләкәс кенә ине. Иҫе дөрөҫ. Күп белә. Минең хаҡта әйтте иргә :“Киленде тыйма. Йырлаһын. Мин тыйҙым, ҡатыным 75 йәштә ауырыуға һалышты. Үҙе 75 йәштә генә ине. Бына ауырыны ошо 75 йәштә. Кешенең үҙеңә лә һис сик ҡуйырға ярамай. Йырлаған кеше үлгәнсе йыраһын Ул бит Хоҙай бүләге. Шулай тинеләр ололар Һәр кем лайыҡ та түгел бит ул йыр йырларға .

Күберәк йырларға кәрәк, йыр, таҡмаҡ йыр яратам. Сир китә хатта..

Оҙон көй үҙенән-үҙе килеп сыға ул. Ярайммы, ярамайммы, йырлайым да ебәрәм. Рульдә лә , машинала ла йәрөгәндә лә күп йырлайым.

**Таҡмаҡ**

Ҡыҙыл яулыҡ уртаһына.

Төшкән майҙың туртаһы.

Һеҙ дуҫтарҙы көтә-көтә,

Етте йәйҙең уртаһы!

**Халыҡ ижадына ҡарашым**

*(Р.Солтангәрәева әңгәмәләшә)*

– Гөлгөнә ханым, башҡорт халыҡ ижады ни ул һинең өсөн?

– Күңел донъяһы, булмышы, йәшәүе ул фольклор ! Күңел һыуынһа, күңел буш була. Фольклор бит күңел йылыта ул! Халыҡ күңеле лә һыуына – фольклор бөтһә. Бала саҡтан һөйөү, тәрбиә һалыныу кәрәк фольклорға. Тормош киләсәк быуынға бурыслы, сөнки оло, изге мираҫлы беҙҙең халыҡ. Халыҡ ижадһыҙ буламы ни? Юҡ! Ул

ижад донъяһы, илаһылыҡ. Эпостарҙы беҙгә өйрәтмәнеләр бит, улар заман менән килде беҙгә. Шөкөр хәҙер. Ә ниндәй көслө рухлы, телле булыр инек. Йәштән өйрәтеү кәрәк ине! Булмай инде, тип ярамай. Бер ваҡытта ла һүң түгел Йәштәргә асып һалыу кәрәк фольклор мәғәнәһен!! Әңе бар бит һәр йырҙың, һүҙҙең. Моң бар!.

– Башҡорт йырҙарын, көйҙәрен ябайлаштырып, икенсе төрләләндереп,заманса эстрада тип үҙгәртеп сәхнәгә сығаралар . Ошоға нисек ҡарайһыҙ?

– Бер һүҙем минең быға!! Ярамай боҙорға фольклорҙы, йырҙы. Ярамай. Уны бит һин сығармаған , быуаттар яһаған. Ниңә тейәһең? Даңҡыр-доңҡорҙан моң ҡаламы ни? Тыңап булмай ул уже Арғымаҡты ла, башҡалар ҙа нисек теләй – шулай йырлай, һуҙа, боҙа....

**2. Бабичева (Иксанова) Нәфирә Нәжметдин ҡыҙы** (1951 й. 14.03). Мишкә районы Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында тыуған. Белеме - урта махсус – медучилище тамалаған. Режиссер, башҡорт халыҡ ижадын бик йылдам күп йылдар пропагандалаусы, сәхнәгә ҡуйыусы;музыкант, дирижер, сценарист, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Республикала киң билдәле ижадсы,

“Шәйехзада Бабич атаһы менән минең олатайҙың атаһы ике туғандар, мин Бабич нәҫеленән. Бөтә Бабичтар Мишкә районында тыуған. Мөхәмәтзәкир бик уҡыған кеше булған. Олатай шунда ҡалған. Минеңсә, Ҡыйғаҙытамаҡта Мөхәмәтзәкир Ш. Бабич атаһы ерләнгән”, – тине .

**Соматикаһы**. Оҙон ғына буйлы. .ҡаҡса кәүҙәле , урта буйлы, ҡара-һоро күҙле, бөҙрә сәсле, бите тулы түгел,танауы осло ғына Бик ихлас, теремек, күркәм аралаша,.көлдөргөстәр һөйләй.

**Уйындар.**

Беҙ бәләкәй саҡта тау башында “Әйлән-бәйлән” уйнай инек. Кругҡа бәләкәйҙәрҙе керетмәйҙәр. Уйнап-бейеп, төртмә таҡмаҡ әйтәбеҙ. Егеттәр, ҡыҙҙар бар. Оло апам, Сажидә бик шәп гармунда уйнай ,йырлата, бейетә ине. Средняя Азияға китте.

Ағайым талъянда (талъян уйнай ине, ҡустым да (мәрхүм инде) уйнай ине .Бөтәбеҙҙә лә гармун. 8 бала уйнаныҡ! Мин алтынсы бала ! Ағайым өйрәтте. Улар, минең атай-инәй – techinstitut бөткәндәр. Диплом алмай ҡайтып киткәндәр бар . Ясли садта эшләне инәйем.

Атайым завклуб булған, колхозник булған. Ныҡ егәрле кеше ине, за всех отдувался. Ат унын аяғына баҫкан. Шунан сатанлап ҡалғас, һуғышҡа алмағандар.

Атайым ауылда бөтә өйҙәрҙе һалған кеше!. Олатайы Имаметдин һалған (1914 йылғы. һуғышта пленда 7 йыл булған), быйма эшләне, матур ҡата эшләй ине. Шулай тегенеп кейҙерҙе бөтәбеҙгә кейем. Олатай кейендерҙе инде бар балаларҙы. Рәхмәт уға.

**Таҡмаҡтар**

1.Был кем көйәнтәһе,

Был кемдең көйәнтәһе лә,

Был кемдең һөйәркәһе.?

2.Шаһинур быймаһы,

Шаһинурҙың быймаһы,

Был кемдең көймәһе?

Әлиләү генәйем дә,

Бәлliләү генәйем!

3.Аҡлы-күкле, шаҡмаҡлы

Күлмәк алырҙай булам.

Һин йөрөгән һуҡмаҡты

Әлиләү генәйем дә,

Бәлиләү генәйем.

Үбеп алырҙай булам!

**Уйын тәртибе.**

Уртаға сыҡҡанға төрттөрөп йырлайҙар. Баҫтыралар берәүҙе түңәрәк уртаһына тәүҙә сығарып, теге илай бахыр ул.Таҡмаҡ күүүп әйтелә . Ниндәйе генә юҡ! Әсе, сөсө, һәммәһе, түҙер әмәл юҡ унда!Тәртибе шулай. Шунан, млай, барыһыы ла әйҙәәәәә уны көйләйҙәр, йыуаталар.Ҡыҙыҡ ғәләмә, инде! Шул уйын ула ине.

3. **Ғилемйәнова Рәхилә Төхвәтулла ҡыҙы,** 1956 й., Курган өлкәһе, Баҡай ауылында тауған, Өфөлә 2002 йылдан алып йәшәй. Фольклор түңәрәгенә, йөрөй. “Селтәр” фольклор ансамле солисы.

**Соматикаһы.** Урта буйлы, тулы кәүҙәле, теремек. Бик ихлас, көләс. Ҡуңыр сәсле, йоморо битле, ҡара-һоро күҙле, йоҡа иренле иренендә миңе бар, осло танаулы.

## Йолалар, ғәҙәттәр

Йыйын алдынан ауылда ҡолғасы йөрөй. Һөрән һалып йөрөй. Кем һөрән ишетә – шул сығып, күкәй, май, ҡорот йә таҫтамал, яулыҡ әҙерләй. Һөрәнсе килеп еткәс, ҡолғаһына бары бүләкте бәйләй, теләк теләй:

Һабантуй ҡотло булһын,

Иген уңһын,

Илдәр имен булһын!

Бөтә ауылды йөрөп сыҡҡас һөрәнсе йортона ҡайта, ҡолғаға оло-өлкән бабайҙар фатиха-бата уҡыйҙар. Шул "Ҡолға ҡотлау" була. Йәш ирҙәр ҙә ҡатнаша. Ошо кәңәштә барып һөйләшәләр, Кем ҡайҙан килә, ниндәй ырыу ҡатнаша, ниндәй аттар була.

Ҡатындар салбар кеймәгән элек. Киң балаҡлы, баулы ыштан була. Елберҙәп йөрөшкәндә – күлмәк аҫтынан ыштан кейелә. Ыштан-ыштан була ул.

## Бала тыуғас

Кендек инәһе: "Ерҙән алған балам!", – тип әйтә. Ер бит әсәбеҙ беҙҙең. Шулай әйтелә.

## Туй йолаһы

**Ҡыҙ сеңләүе:**

Атаҡайымдың мейесе

Ҡыҙыл ғына кирпес булһасы

Атаҡайымдың өйөнән

Китмәç кенә йола булһасы

Әй! Ү-ү!!

Атаҡайым, бесән сабырһың,
Артыңа ла боролоп ҡарарһың
Артыңа ла боролоп ҡара ниһәң,
Балаҡайым юҡ, тип иларһың.
Әй! Ү-ү!!

Ефәк тә шаршау, бауы таҫма -
Һин ҡорҙорҙоң да, еңгәкәй.
Килгән дә ҡоҙа ҡайтыр ине
Һин бирҙерҙең дә, еңгәкәй.
Әй! Ү-ү!!

Инәкәйемдең алҡаһы
Баҫкан ғына һайын сылтырай.
Инәкәйем хуш, бәхил бул,
Йөрәкәйем тағы ҡалтырай.
Әй! Ү-ү!!

Әй таш тирмән, таш тирмән
Таш булһа ла үҙе ыуылмай
Таш бәғер микән, инәкәйем
Мин илаһам да, иламай!
Әй! Ү-ү!!

Ғилемйәнова Рәхилә Төхвәтулла ҡыҙында ҡолаҡасыҡ – баш кейеме, ҡушъяулыҡ, муйынсылар һаҡлана. 1928 йылда Үлмәҫбикә инәйе эшләгән.

**Туй йолаһы**

Кейәү һөйөү. Мин ул йоланы Дәүләкән районында ишеттем.шул йола бар. Кейәүгә йыйылып ирҙәр теләк әйтәләр. Билен күк билғау менән быуалар.

**Кейәү һөйөү**

Илең ныҡ булһын!
Билең ныҡ булһын!
Нәҫелең күп булһын,
Нәсәбең бай булһын,
Ырыу-ырыу ултырһын!

**Килен һөйөү**

Ололарға һәр саҡта
Кесе бул һин, киленсәк.
Кешеләргә һәр саҡта
Оло бул һин, киленсәк.

Осҡан ҡоштай - йылғыр бул
Һайыҫҡандан - һаҡсыл бул.
Ҡарсығалай – етеҙ бул.
Барыһынан алда бул!

**Йырҙар**

Бәләкәй генә бүртә, әй, яй юрта,

Яй юртаһа ла, юлды ла күп үтә

Кейгән туҙа, ашаған да бөтә,

Татыу йәшәгәндәргә ни етә?

Татыу йәшәгәндәргә ни етә?

Белорет районынан оттом был йырҙы, тине информатор. Әсәһе Йомабикә Дәүләтбай ҡыҙы Ҡунаҡбаева (Темәстә йәшәгән) 1980 йылда. Унан отҡан йырҙы.

**Аҡ ҡарсыға**

Аҡ ҡарсыға менән, күк ҡарсыға

Берен-бере ҡыуып тау сыға.

Ашау-эсеү менән дандар сыҡмай.

Татыу йәшәү менән дан сыға.

1980 йылда әсәһе өйрәткән – Йөмәбикә Дәүләтбай ҡыҙы Ҡунаҡбаева.

**Шәүрә килен**

Бөгәсә лә төндә бер төш күрҙем.

Көмөш ҡалаҡ менән һыу эстем,

Шул төш минең раҫка килде -

Һеҙ туғандар менән күрештем.

Ағайымдың курсташы Әнүәр ағайҙан йырҙы оттом (Белорет районы).

**Ҡара юрға**

Йоморо матур тояғынды

Дағалармын, "Юрғам!"

Ҡырас матур ялдарыңды

Уҡалармын, юрғам!

Өҫтөңдәге һылыуыңды

Төшөр инде, юрғам.

Һайт, ҡарға юрғам,

Һайт, ҡарға юрғам! (ҡушымта)

“Ауаз” ансамбле бергәләшеп йырланы (2022 йыл, июль).

**Тарих**

Аҫылбикә Йәнтүрә менән 1812 йыл яуға киткәндәр. Еңеп ҡайтҡандар. Асылбикәгә миҙал биргәндәр. Ошоноң тарихы буйынса Зөлфиә Ҡудашева менән икебеҙ бейеү һалдыҡ! (Ҡудашева Зөлфиә – бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ артисы).

**Фольклорға минең ҡарашым**

*(Р.А. Солтангәрәева әңгәмәләшә)*

– Рәхилә апай, Ни ул фольклор һеҙҙең өсөн, кәрәклеге нимәлә?

–Белеү кәрәк уны һәр кемгә ! Фольклорҙы, уны бәлмәһәң- милләт тип һүҙ әйтмә.Мин шулай тим. Өйрәнһендәр! Мин һаман өйрәнәм дә, өйрәтәм дә. Арырға ла ярамай. Ватанға һөйөү, рух, иман, йәштәргә фатиха , тормош рәүеше, күсәгилешлек бит ул ! Башҡорт халҡы мәңге йәш ул, мөхәббәт юлы. Минең өсөн фольклор – бына ошо өс һүҙ ул фольклор -Ватан, рух ,халыҡ!

**4. Ғәбиҙуллина Фәнүзә Фәхритдин ҡыҙы, 1958 й., Бөрйән районы Иҫке Собхангол ауылы.** Бөрйән районы Иҫке Собхангол ауылында тыуған. Ҡыпсаҡ ырыуы ҡыҙы. Профессияһы – уҡытыусы (химик, биолог). Иптәше менән 2005 йылдан Өфө районы Жуков ауылында йәшәй. Ҡыҙы менән улы ла Өфө районы ауылдарында төпләнгән, икеһе лә ғаиләле, икеһе лә икешәр ул үҫтерәләр. “Селтәр” халыҡ студияһы ағзаһы.

**Балалар үҫтерәбеҙ**

Беҙ шулай үҫтерәбеҙ,

Йыр менән үҫтерәбеҙ

Күңелгә рәхәт сағы ла – йыр!

Күңел ҡыйында ла – йыр!

Ижад – ҡыуаныс бирә,

Тормошҡа – дәрт бирә,

Рух көсө бирә,

Милләт үҫешенә йыр кәрәк!

Үҙем өсөн йыр – кешегә изгелек эшләү, шатлыҡ, аҡыл бирә.

Белгәнеңде биреп ҡалырға кәрәк.

Йәш быуынға кәрәк.

5. **Мөхәмәҙиев Ризван Мөхәмәтдтин улы**, 1 ғинуар, 1941 й., Балаҡатай районы Билән ауылында тыуған (17.02.2006 й. яҙып алынған материалдар).

**Соматикаһы:** һомғол  буйлы, ҡаҡса, мөләйем йөҙлө, ҡуңыр сәсле, ҡара-һоро күҙле. Ике бала атаһы. Өфөлә 1960 йылдарҙан алып йәшәй. Бик ипле, итәғәтле, ихлас кеше. Республикала билдәле йырсы.Башҡорт халыҡ йырҙарын бик оҫта башҡара.

**Хөрәфәттәр**

Шайтан йөрөй ул. Атай ҡарт яланға ебәрә атты – бик ныҡ уҡынғас ҡына ебәрә ине. Әтеү шайтан эйәрә тине, атты менгәс ап-аҡ ат әллә ҡайҙан килеп сыҡты! Атайымды берәү ҡосаҡлап алды, ҡурҡтыҡ. Ат беҙҙең менән тиңләгәс, берәү "һаумыһығыҙ!" – тине.

Зам.пред.совета ауылдың ҡайтып килә икән. Һаубуллашты ла һөйләшеп торманы – китте лә барҙы, йәһәт кенә. Сәйер бит инде..

- Был ең булды, улым! – тауышһыҙ ғына шулай тине атайым.

Бер-нисә көн үткәс, ҡайтҡас һорайым теге кешенән:

- Һеҙ шунда булдығыҙма?

- Ни эшләп, мин унда йөрөгәнем дә юҡ! –тине был. – Мин түгел ул! – тине.

Атайым минең мәҙрәсә бөткән, дини, динде лә уҡытҡан кеше, Шайтан ул, тине әйләнеп.

- Шайтандан зыян юҡ ул, уҡынырға ғына кәрәк тине. Ҡурҡмаҫҡа.

**Шайтан күренде**

Өс-дүртенсе класта уҡығанда мәсет эргәһендә зыяратты тегеләй-былай әйләнеп сыҡтым "Шайтан юҡ" тип. Атай әйтте бит, - ышанам инде шуға. Өйгә ҡайтһам – күҙ төбөндә ҙур керикүк! Атайыма "Сана кәртәһенә һуктырҙым" тинем. Сөнки зыяратта йөрөргә ярамай йөрөргә. Ат эйәһе килтереп һуҡҡан!, - тип һөйләгән кешегә. Ә беҙгә, балаларға – икенсе хәбәр һөйләгән. Конный дворҙа хәл шулай булды. Шайтан, әйе бар ул. Үҙе шулай гел уҡынып ҡына үткәрҙе атай. Көслө имсе ине. Миңрәүҙе, тел-теш баҫыуҙы, күҙегеүҙе ла дауалай ине. Ҡалын китабы бар ине. Бәйеттәр унда күп ине... Ана шул дәфтәрен ул үлер алдынан юғалттыҡ.

**Төш юрау**

Әсәйем төшкә керҙе. Ҡайтып күренде. Йәшәргә туры килер инде, һеҙҙә тине. Мәғәфүр ағайымдың күп этажлы итеп иҫке өй менән

дә бейек итеп ҡушып эшләгән өйө булды. Мал өйөн дә шуға ҡушҡан ине. Шуға әйткәндер. Рухы беҙҙең яндалыр, йәшәй инде, тип уйлайым. Гел фатихала булды ул инәйем. Хәүеф булыр булһа, киҫәтә ине.

**Йырҙар**

“Ҡалды” йыры (Силәбе өлкәһе яғы йыры)

Ҡалды ине, яландарным ҡалды инде.
Һары баш үләндәр ҡалды инде,
“Ҡалды” буйҙарында үткән ғүмер
Һағынып, эй һағынып, һөйләргә ҡалды инде

**Шәрәфетдин**

Йылға ғына буйлап йөрөгәндә
Бер таш табып алдым беләүгрә
Күргән хәлдәремде. һөйләр инем
Үҙем кеүек йәтим берәүгә.

**Һанайһары**

Һанайһары тауҙың, ай башынан
Күренеп кенә тора а-һай, күп ерҙәр,
Ғәриз ерҙәренән, ай айырылып,
Әрәм генә була а-һай, күп ирҙәр.

**Манжур**

Иртә лә томан, кистә томан,
Томанда ғына ҡарҙы эретә
Нужна килһә, тартып ала,
Илде Манжурға һата
Бик ауыр хәл, сит-ят илдәрҙә,

Ил һаҡлауы бигерәк ерһетә.

Тәҡдир ҙә генә менән ризыҡ нәфҡәт

Ғәзиз башҡайҙарҙы йөрөтә.

Нужна килә, тартып ала

Илде Манжурға һата

Бик ауыр хәл, сит-ят илдәр ҙә

Ил ташлауы бигерәк ерһетә.

Бик ауыр хәл,

Сит-ят илдәрҙә

Һағынам тыуған илемде.

**Тәфтилләү**

1. Шаулап ҡына аҡҡан ағын йылға

Тәфтилләүҙәр аша сыға алмаç

Ир-егеткәйҙәрҙең хаҡ өлөшөн

Тәфтилләүҙәр генә быуа алмаç.

**Ҡапсыҡ урман йыры**

1. Ҡапсыҡ ҡына тигән әй, ҡарурман.

Күләгәһе китмәй ҙә, төш етмәй

Күп илдәрҙә йөрөнөм, күпте күрҙем

Тыуып-үçкән ергә һис етмәй.

Ҡ-та: Юл тар булһа,

Ҡушылып та сабырбыҙ.

Баш һау булһа

Дуçтарҙы табырбыҙ.

Рәхмәтулла Бүләкәновтан өйрәндем был йырҙы. Рамазан Йәнбәков менән йырларға барсаҡтарыбыҙ Ризванға – бешмәне “Ҡарасәй” йыры бик һирәк, уны ла йырлайым. Сәйфуллин (ҡурайҙа) менән бер ваҡыт мин сыҡтым сәхнәгә*. “Ҡолой контон”, “Тәфтилләү”ҙе йырланыҡ. Халыалы ныҡ яратты.

“Һинең бит тешең сыҡҡан ҡустым!”, – тине Рәхмәтулла ағай. Бүләкәнов, рәхмәтем бик күп уға. Өйрәнеп ҡал, тип көндә төнгө өскә тиклем көй өйрәтә миңә. “Һин миңә өйрәтмәйһең, ә ниңә Ризванға өйрәтәһең?”, – тине Йәнбәков Рамазан уға. Йәне көйҙө. “Һиңә бит икенсерәк йыр кәрәк”, – тигән булды Рәхмәтулла ағай. Мин уға рәхмәтлемен.

Мин йырлаған йырҙар исемлеге ошо: “Урал”, “Абдрахман”, “Асылы”, “Буранбай”, “Бейеш”, “Инйәр буйы”, “Илъяс”, “Йәмәлекәй”, “Ҡаһым түрә”, “Мәҙинәкәй”, “Азамат”, “Саҡырмасы кәкүк”, “Өҫкәлекәй”.

Рәхмәтулла Бүләкәнов “Өҫкәләкәй” йырын өйрәтте:

**Өҫкәләкәй**

1. Өҫкәләкәй буйын талдар баҫҡан,

“Юлдар” шырау төлкө һуғырға

Башҡынаңа төшһә ауырлыҡтар,

Арҡаланма яҡын дуҫтарға.

Башҡынаңа төшһә ауырлыҡтар,

Арҡаланма яҡын дуҫтарға!

Миңә был йырҙы Рәхмәтулла Бүләкәнов өйрәтте:

**Әлмөхәмәт кантон**

Әй! Һаҡмар ғына буйларында

Тутый туғай кеүек ер ҡайҙа?

Әй! Егерме лә йәштә кантон булған

Әлмөхәмәт кеүек тә ир ҡайҙа?

*Шырау* – ҡалҡыулы, осло, ташлы юл.*

**Түрәкәй**

Парлап та, парлап ат ектергән,

Ай түрәкәйгенәйем,

Ҡайһы илдәрҙән әй, килгән был түрәм.

Был түрәлек ай-һай биреллдеме икән, тимен

Һай түрәкәйгенәм!

Аҡылдары камилға күрә.

**Ҡарағай**

Ҡарағайҡай тигән бейек ағас

Ыжғыр елдәрҙә лә бирешмәй

Ирмен дә генә тигән ир-егеткә

Башты түбән эйеү килешмәй.

Ирмен дә генә тигән ир-егеткә

Башты түбән эйеү килешмәй.

……………………………………………

Минең әсәйем оҫта сеңләүсе булды. Мөхлиса исеме. Бик күп мәҡәл белә ине. “Татар күтен бирһә лә, телен бирмәç!” – уның әйткәне. “Наҙан түрә булһа, белеклегә көн юҡ”, “Ир намыçы – йөрәктә. Буштан йөрәк б...ҡ ташып кем булыр”.

6.**Нафиҡова (Ғәйнуллина) *Лилиә Вәлиәхмәт ҡыҙы*** (1938 й.,Учалы районы, Мулдаш ауылында тыуған). Өфөлә 20 йыл йәшәй.

**Соматикһы:** Бик мөләйем, сабыр холоҡло, иғтибарлы, тыныс һҡйиләшә. Ҡара сәсле, оҙонсараҡ битле, еңел,зифа кәүҙәле; ҡара-һоро күҙҙәр, ослораҡ танау,эйәк. Һылыу йөҙлө, ҡара ҡашлы, бите нескә һыҙатлы Нәсел башы Силәбе өлкәһе Булат ауылында XVII быуатта йәшәгән йорт старшинаһы булған Бикбаш Иштимеров исеменә бәйле. Дүрт бала әсәһе. Ифрат тынғыһыҙ, ижади, өлгөр шәхес: Өфө ҡалаһы "Өфө хәтирәләре" вокаль төркөмөндә, "Селтәр" студияһында ҡатнаша, ҡул эштәре ,биҙәүестәр оҫтаһы.

**Туй йолаһы**

Ҡыҙ оҙатыу. Ҡыҙҙы оҙатырға әхирәттәре, күршеләре, дуҫтары килә, ауылдаштары килә.

Атай йортонан оҙаталар, тормош юлына, сит кешегә бит инде. Беренсенән, күскән ҡыҙға шул мәлдә әйтелергә тейеш хушлашыу һүҙе. Яратҡан егетенә ҡушылһа, "сәскә-сәсе бәйләнә" тиҙәр бит. Икенсенән, иң яҡындарынан айырыла. Курган башҡорттарының үҙенә хас йолалары бар, әммә һаҡланып килә. Яңы тормошҡа сеңләп оҙаталар.

**Сеңләүҙәр**

Атаҡайымдың мейесе
Ҡыҙыл ғына кирпес булһасы
Атаҡайымдың өйөнән
Китмәҫ кенә йола булһасы.

Ефәк тә шаршау, бауы таҫма,
Һин бәйләнең аны, еңгәкәй.
Киләр ҙә ҡоҙа ҡайтыр ине
Һин димләнең аны, еңгәкәй.

Атаҡайымдың өйөндә
Ултырғайным тәҙрә төбөндә
Сит кешеләрҙең өйөндә
Йөрөрмен инде ишек төбөндә.

Атайымдың урамы киртләс-киртләс,
Киртләстәре бөтөр яҙ еткәс,
Ир балаҡай ҡайта хеҙмәт иткәс,
Ҡыҙ балаҡай ҡайтмай бер киткәс,

Мин бараһы ауыл ҙур микән.
Борма-борма ғына юл микән?
Ауыл ҡарттарынан фәтиха алып,
Китеүҙәрем минең шул микән?

Сеңләгәндә кем яулыҡ, кем аҡса тағалар ҡулъяулыҡҡа. Яҡындары туйға барғанда һарыҡ, ҡаҙ, быҙау алып бара.

Еңгәләре ҡыҙҙы өйҙән сығарғанда, уны ағаларының ҡулына бирәләр. Атаһы ҡулынан тотоп оҙата. Өйҙән сыҡҡанда, ҡыҙ ишек яңағына таяна, шул ваҡытта атаһы йыр әйтә. Тормош юлының бирнәһе (беҙҙә икенсерәк итеп әйтәләр) була ул. Оло ағаһы элегерәк

ат менән оҙата  барған, хәҙер еңел машина менән туйға баралар. 3 тапҡыр икәүләшеп арбаны урап сығалар ҙа, ағаһы  уны арбаға үҙ ҡулдары менән ултырта, Шулай тапшыра кейәү ҡулына.

**Йырҙар.**

**Байғужа йыры**

1. Әүеш кенә менән ЯлсыҒолдоң –

Аралары унар саҡырым.

Ҡайт ахуным инде, ҡайт, ай, илеңә

Мәсеттәрең тора мәхерүм.

2. Әүеш кенә  тауҙың әй, сейәһе,

Беште ниһә ергә тейәһе.

Мәсеттәре тора, әй үҙе юҡ,

Ҡайҙа икән уның эйәһе?

Ҡайт ахуным инде, ҡайт илеңә,

Тағы күпме һине көтәһе?

*"Ҡайт, ахуным инде, ҡайт илеңә" Байгужа был йырҙы үҙе сығарған тиҙәр. Ҡәбере Әүештә. Изге ерҙәрҙә, Рамазан әүлиә менән шул тауҙа ерләнгән улар.*

**7.Сөләйманова Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы (05.02.1940)** Баймаҡ районы Темәс ауылында тыуған. Белорет педучилищеһын, аҙаҡ Башҡорт дәүләт университетын (1965 й.) тамамлаған. Яҡшы уҡыған, бик тырыш булған. "Ким Әхмәтйәнов рәхмәт хаты яҙҙы. Госты – 5-кә, практиканы 5-кә бирҙем.Бик шәп, матур уҡыным. Белем алыуҙы мин

нык изге эш күрҙем", – ти. Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры (1985-1988 авгусына тиклем), ике йыл обкомда фән һәм уҡытыу эштәре буйынса начальник урынбаҫары булып эшләгән (1983-1984).

Педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы, башланғыс мәктәптәр өсөн рус теле дәреслеге, Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының башланғыс мәктәптәре өсөн методик әсбаптар авторы.

**Соматикаһы**: ҡара сәсле, урта буйлы, ҡара-һоро күҙле,үткер ҡарашлы, алғы сәстәре ағарған, киң маңлайлы . Уртаса текә танау, ҡалын ирендәр. Көр һәм матур тауышлы. Уң битендә – ҡартлыҡ билдәләре, һоро таптар күп. Сырайы яҡты , көләс.

**Көнкүреш хәлдәре**

Самауыр – башҡорттоң иң ҙур кәрәге ул. Унһыҙ көн юҡ !Самауырҙа хатта ит бешереп ашағандар.

Данлы Әҙеһәм ағай Исҡужинды беләһегеҙ! Уны бит ҡурайҙа минең Ғәйзулла олатай өйрәткән! Шулай булған!

Атай үлгәс, минең әсәй кейәүгә сыҡманы. Нык һағынып , рухына тоғро ҡалды Мин нык Һағынам атайымды. Төштә күрҙем (күҙҙәре йәшләнде ). Мин бит 26 йәшемдә генә әсәһеҙ ҡалдым.

**Аят үткәреү тәртибе**

Ырыуҙан үлгәндәрҙең исемдәрен үҙебеҙ яҙабыҙ. Ҡағыҙға ҡултамғалар ҡуябыҙ. Шунан ғына аят уҡыйбыҙ. Нурмөхәмәт хәҙрәт өйрәткән тәртибе ул ошолай. Шулай мин атай-әсәйгә аят уҡыттым.Әсәйем 1915 йылғы, оло әсәйем 1909 йылғы,ул 81 йәштә үлде.Бик күп боронғоно, йолалар белә ине...

## Йырҙар

Ҡыҙыл да ғына ерән ат һимерттем,

Ҡыҙыл буйы, ҡыҙыл төлкө өсөн.

Беҙ килмәнек ашап-эсер өсөн,

Беҙ килгәнбеҙ уйын-көлкө өсөн*...

**Әсәйемдән отоп , унан ҡалған халыҡ йыры,тине С.Ғ.Сөләймәнова*

## Ҡара бүрек

2. Ҡара ла ғына бүркең

Күтәреп кей.

Ҡара бөҙрә сәсең күренһен.

Дошмандарың күреп, көйөнһөндәр.

Дуҫ-иштәрең күреп һөйөнһөн!**

***Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы бик-бик һағынып һөйләй ире Айрат Ғәйзулла улын . Уның йырҙарын хәтерендә һаҡлай, йыш башҡара. Айрат Ғәйзулла улы был йырҙы олатаһынан отҡан (Баймаҡ).*

## Ырымбур йыры

1. Ырымбурҙа күп йөрөнөк тә,

Урамдарын йәйәүләп.

Һинме-миңә, әллә минме – һиңә

Ҡәҙерлерәк тип уйлап та,

Ҡәҙерлерәк тип уйлап.

2. Ырымбур тигән ҡаланың

Урамдары таш ҡына.

Ырымбурҙа бер һылыуға

Йөрәккәйем ашҡына ла

Йөрәккәйем ашҡына.***

****"Нык шәп йырламаҫка", - тине информант был йырҙы. «Ҡайнымдың бер туганы, Шәрифулла исемле апаһынан ( ир туганынан) Айрат ирем был йырҙы отҡан", - тине*

**Ҡара сәүкә**

1.Ҡара ла ғына сәүкә,

Ай булайым,

Ҡайһылай талға ҡунайым?

Һеҙҙәрҙә генә икәү, мин үк яңғыҙ –

Ҡайһынығыҙға ла булайым?**

2 Йырылып ҡына аға, йырып аға Ҡыҙыл буйҡайының һыуҙары .

Берегеҙ менән берегеҙҙәү туған

Айырмаһын инде Хоҙайым ..

***Революция ваҡытында бер аҡтар, бер ҡыҙылдар мәлендә сыҡкан йыр. булган. Шулай ҡайҙа барырга белмәй йөрөгән бит башҡорт.*

**Йәнбикә**

1. Һыйырыңды һаумайынса

Ниңә ҡыуып ебәрҙең?

Ай-һай боҙоҡһоң, Йәнбикә,

Күткә тибеп ебәрҙең!***

2. Бүҙер-бүҙер бүҙәнә лә,

Ҡойма буйҙап килә(лә).

Өс көн тормай, Йәнбикә әбей

Мине ал, тип үк инәлә!

***Айратымдың йыры,тине С.С.Ғ. *"Артылыш" көйөнә йырлана. Әсәйем уның йырҙарын оҫта йырланы. Тарихы былай .*

Ул Йәнбикә Бисә бик уҫал булған. Ир кеше яратмай бит ул ундайҙарҙы. Уҫал булғанға ирҙең к... нә ныҡитеп. Типкән Шунан ир ҡыуып ҡайтарған. Ҡайтҡас, өс көндән ул үҙе, Йәнбикә, инәлеп ҡабат иренә килә, "ал инде мине бисә итеп", – тип.

– Алғанмы һуң яңынан?

– Минеңсә, инәлгәс, алған инде.

**Тарихтан**

Жалобалар, ялыу яҙғас Г. Жуков өҫтөнән, Сталин әйтә: "Һин, Георгий Константинович – китеп тор, Одессаға, юҡһа һәләк.. ", — ти. Сталин Хрущевты министр итеп ҡуя ла янылыша бит ул .

Мин шул тиклем И. Сталинды яратып йәшәнем! Ул – тәрән уйлы кеше...

– Все ли вы продумали?- тип Рокоссовскийҙы төрмәнән сығара ул.

– Я остаюсь при своем мнении, - ти Рокоссовский.

– Значит, это у вас верное решение, – ти Сталин (освободить тип приказ бирә Рокоссовскийҙы).

Ленинды йәһәт үлтерерҙәр ине Сталин ҡотҡара, ул йәшереп алып ҡала. Битен бәйләп, кейемен бирә, бер урынға йәшерә... "Ему нельзя работать", – тигән. Уныһы һаман яҙып торған, ныҡ күүүүп эшләгәнбит ул.

**Йырҙар**

**"Был донъяларҙа..." йыры**

*Сәбилә Сөләймәнова һүҙҙәре, көйө.*

“Башта башымда йөрөнө, оҙаҡ ҡына уҡмашты көйө. Шунан тыуҙы әңе менән , шунан ошо йырҙы Сибайҙа гел йөрөйөм йырлап”, - тине.

1. Был донъяларҙа беҙ мәңге түгел,

Яҙын ғына үҫкән гөл кеүек.

Йәшәһәксе ҡыҫҡа ғүмерҙәрҙе

Ҡояш китмәҫ яҡты көн кеүек.

2. Был донъяла беҙгә малдар кәрәк,

Дуҫ-иш кәрәк донъя көтөргә.

Белһәк ине ҡыҫҡа ғүмерҙәрҙә

Бер-беребеҙҙе ҡәҙер итәргә.

*Йыр китапта баҫылган .С. Сөләймәнова. Күңелдә ҡалган эҙҙәр. – Өфө, 2009. – 22 бит (54).*

## Минең йәшәү тарихымдан

“Өләсәйем яланаяҡ Темәскә килгән, минең әсәйемде елкәһенә ултыртып. Шунда Шаһит Хоҙайбирҙинға ярҙам һорап кергән. Ире үлгәс ,өләсәйемде халыҡ дошманы ҡатыны тип, илдән ҡыуырға булғандар. Ул ваҡыт Таһир ауылы янған. 12 өй янған, сөнки ел ыңғайы булған шул саҡта .”Ииии Аллам, бер һандыҡ ҡалды, бер сыт ҡорот ҡына ҡалды ул саҡта”, – тигәйне.

“Сыт” – талдан үрелгән кәрзинкә. Оҙон була. Бары янды!!! Сынаяҡты ла тота алмаған, яныуҙан һуң, шулай ҡулға көс төшкән,хәлһеҙләнгән әсәйем. Әсәйем өйҙән нәмә барын ташығандар бит, һыу ғына эсергәндәр. Арманһыҙ арып,хәлдән тайып бөткәндәр .Мин бик күп тарих, күп нәмә өләсәйемдән, унан бик күп итеп өйрәндем. Белемгә ынтылдым гел“.

Сәбилә Сөләймәнова үҙе дәфтәрҙән блокнот эшләп алған . Нык белемгә тартылған. “Сәбилә, 1955  блокнотлы дәфтәре. Аҡыл блокноты XVI ВЛКСМ конференцияһы. 1955 йыл”, тип яҙылған. Мин бик күп тарих, күп нәмә өләсәйемдән, унан бик күп итеп өйрәндем. Белемгә ынтылдым гел. Рәхмәтем күп уға..

1965-тән  мәктәптә уҡыу бөткәс, Сибайға уҡырға килдем. 1970 йылдан бирле Өфөләмен. Тора-тора әсәйем үлеп китте, 4 айҙан ирем китеп барҙы. Ҡайғы төбөнә төшөп киттем... Бер ни кәрәкмәне... Бер кем кәрәкмәне. Тормош йәме китте  .. Айратым китте... Ҡаты ауырыны Үлер алдынан:

– Ни эшләрһең минһеҙ? – тине. – Мин китһәм, балалар эргәһенә бар, унда бул, бойоҡма! – тине.

Ул ни уйлағандыр...

– Мин һинһеҙ донъямды күҙ алдыма килтерә алмайым. Китмә! Китмә! – тинем. Әй...әжәл бит ул (С.С.Ғ. илаңҡырап, күҙе йәшләнеп алды).

Васыят итеп әйтәм; “Тере саҡта бик ҡәҙерләп йәшәгеҙ бер-береегеҙҙе. Ғүмер бик ҡыҫҡа...Шулай“.

***

Шәмсетдин ағайым бик ҡыйыу булған. Хатта ат өҫтөндә уҡтан атҡан, ҡурайҙа уйнаған.

Ат шәп итеп сабып барғанда аттың аҫтынан, биленән сыҡҡан! Ғафаров Шәмсетдин ағайым бик батыр булған! Көнсөлдәр килеп төндә алып китәләруны . Өйөндә бер нимә  яман нәмә булмаған. 8 декабрь уны аталар! Айрат мәрхүм документ табып алып ҡайтты шул

турала. Уң ҡулын һындырғандар ағайымдың. Шәмсетдин ағамды көнсөлдәр шулай эшләткән, ялыу яҙғандар. Шулар Искужин Сәфәр өҫтөнән ялыу яҙғандар. 4 малайы булған, йәтим тороп ҡалғандар, бахырҡайҙар. Бына көнсөлдәргә барыбер төшә ул. Тар булыу ярамай, никүререн белмәйҙәр. Улар әле лә күп Талантты күрә алмайҙар .Һин яҡшы беләһең быны. Ишеткәнем бар һинең менән булышҡандарын, үҙең әйтмәһәәң дә (көлә..) һәммәһен халыҡ белә. Ооо...

Атайым Ғәйзулла 1942 йылда һуғышҡа киткән. Ҡайтмаған. Илгә яу килгәндә өйҙә ятып булмай, тигән. Аяғы имгәнгән булһа ла, сатанлап киткән, Орел өлкәһендә, Шолохово ауылында, йылға буйында һуғышта һәләк булған. Ул урынды барып беҙ таптыҡ.

Лоҡманов Усман менән яуҙа бергә булған. Бер аяғы имгәнгән, һыңар аяҡлап йөрөгән. “Эх, аяҡты *аяһа,* ҡайтыр инееем!”, – тигән, мәрхүм, һәләк булған, минең атай. Әсәйем һағынып шиғырҙар ҙа уға яҙған. Шинелен ярып йөрәк яғын алып киткән *ярсыҡ*. Шулай... Эй оҫта йырсы, ҡурайсы булған атайым. Шәп ҡурайсы. Унан күп йыр отҡан әсәй..

Темәстең башланғыс әҙерлек мәктәбендә уҡыным. Иң ҙур бүләк – күлдәклек туҡыма бирелде тамамлағас. Эй ҡыуандым ! Матур, яҡшы билдәләр менән генә тамамланым .

Хәтерем ныҡ шәп ине. Етем үҫтем, но шәп уҡыным. Тырыштым! Ҡара тырыш булдым!

Үҙем баш класстарҙа уҡығанда уҡ 16 герб эшләнем! 16 республиканың гербын һүрәткә ҡарап, ҡағыҙҙан эшләп, күлмәккә тегеп ҡуйҙым. Октябрь революцияһына арналған байрамда СССР

булып кейендем! Вәт шп булды ул! Шуның өсөн миңә общая тетрадь бүләк иттеләр!

Атайым Бөрйән яғынан, әсәйем Әбйәлил яғынан.Өләсәйем – Билалға (ауыл) кейәүгә сыҡкан булған. Атай һуғышта үлгәс, әсәй кейәүгә сыҡманы. Һағынам мин атайымды. Төштә күрҙем (күҙҙәре йәшләнде-*йыйыусы*). Мин 26 йәшемдә генә әсәһеҙ ҡалдым .

Ағайыма извещение килгәс – уға быны әйтмәгән дуçы. Апайым – олатайымдың һеңлеһе: “Ниңә миңә унһыҙ йәшәргә тип , нығ илаған”.Сәнки өс айҙан ире китте лә һуғышта үлде. Бик яратышып йәшәнеләр , ти .

Бәләкәй бер келәт эшләп йәшәнек Тирмәндә. Келәт өй ти инек, ул үҙе бит тоғролоҡ ул ергә.

**Йолалар**

Һыйыр, һарыҡ итен ашау рәтен белеп алдым . Баш итенең ни, танау, ауыҙ юлдарын, күҙен йыуаһың нығ итеп. Шунан ғына бешереп ашайһын башын.

– Мейеһен ашаманыҡ.

– Тояҡтарын өтөп ашайһын.

– Ҡабын (ҡаты тышлығын. – Р .С.) алып тояҡтың, өтөп ашаныҡ.

– Ашыҡ уйнатырға йыя инек тояҡ һөйәктәрен

– Баш һурпаһын беҙ гел , мин гел эсә инем ҡорот менән. О, нығ көслө ул! Бар сырхауға дауа ул

Өләсәйем (Әминә Заһит ҡыҙы) намаҙын ҡалдырманы.

**Уйын**

Отошло уйын, берәр тәңкәне бер кеше тәүлә йыя. Һорауҙар бирә. Шунан уйын алып барыусы иғлан итә; "Лотерея уйнатабыҙ!", – тип. Кофта тигәне бер ҡыҙға эләкте. Мин шунан кофтанан, ошо биҙәкте күсереп эшләп алдым!". С. Сөләймәнова биҙәк күрһәтте. Крест менән сигелгән

Рәсемде күрһәтеп: "Был башҡорт биҙәге ул", – тине

Халыҡ һәйбәт, тыныс була үҙ халҡы менән йәшәһә. Тәртип була. Тыңлау, аңлау,ер-һыу тип йәшәү берләштерә ул ваҡытта . Башҡорт яу асыусы , яусыл түгел ул . Барына ишеге асыҡ .Халыҡтар менән дуҫ. Тик уны кәмләргә ярамай ! Һис тә !

*"Алмаша"* һымаҡ алйот, аҡылһыҙ түгел беҙҙең башҡорт халҡы.

**Халыҡ ижады һәм уның көсө, рухи ҡиммәттәре тураһында**

**Фольклорға ҡараштарым**

*(Р.Солтангәрәева әңгәмәләшә)*

– Сәбилә Ғәйзулловна, фольклор – ни ул һеҙҙең өсөн?

– Халыҡ ижады. Әкиәт, таҡмаҡ, ҡобайыр, сәсәндәр ижады. Халыҡ ижады тәрбиә нигеҙе ул, шуның өсөн дә яратып йырлайым! Ныҡ фажиғәле йырҙар беҙҙең, тарихтары шулай. Йырһыҙ йәшәп булмай. Күңел бушатыу сараһы ла ул фольклор. Ғәҙәт инде. Гел йырлап йөрөйөм бит. Ул минең өлөшөм, изге таяныс, ул тын алыуым – фольклор!

– "Урал-батыр" ҡобайырын белә инегеҙме? Йә әкиәт тип һөйләнегеҙме ?

– Беҙ уҡыған саҡта “Урал-батыр”ҙы хатта әйтмәнеләр бит Уны белмәнек түгел, ишетә инек әбей-бабайҙарҙан. Әммә әйтергә лә ярамаҡы! Ярамаҡы.

– Ниндәй ул башҡорт кешеһе?

– Бер урында берегеп йәшәһә- халыҡ ижад итә ул .Ихлас, ҡайсаҡ бер ҡатлы, ныҡ алсаҡ та, ныҡ үпкәсел дә...Халыҡ һәйбәт, тыныс була үҙ халҡы менән бер урында йәшәһә. Тәртип була. Тыңлау, аңлау, ер-һыу ,тип йәшәү берләштерә ул ваҡытта. Башҡорт яу асыусы, яусыл түгел ул. Барына ишеге асыҡ .Халыҡтар менән дуҫ. Тик уны кәмләргә ярамай ! Һис тә!

*“Алмаша”* һымаҡ алйот, аҡылһыҙ түгел беҙҙең башҡорт халҡы.

– Өфө башҡорто кем ул, ниндәй ул ?

– Ауыл халҡы тәбиғи, асыҡ. Кешеләр асыҡ, һәммәһе һаулыҡ һораша. Ә ҡалала был әҙәп юҡ.Ҡалала әллә нигә әйләнә башҡорт Йолаһын , асылын юғалта.. Асыулы була башлай. Ҡала башҡорто шулай ҙа бер рәткә инер ул. Тик асылын юғалтмаһын ине...Сын башҡорт ауылдан килеп тә үҙен юғалтмай ул. Ҡалала тыуған башҡорт балаһы ла – милли булып ҡала Тик телен,йырын онотмаһын...

– Халыҡ “Урал-батыр” эпосын, ҡобайырын махсус өйрәнһен өсөн ни эшләргә?

– Уҡытыу программаһын мәктәпкә керетеү кәрәк, эпостарҙы балаларға уны ныҡлап белдереү мөһим!

– “Урал батыр” эпосын “шайырып” уҡытырға кәрәк! Мәктәптәрҙә өйрәнеү кәрәк. Мин шулай тим! “Урал батыр”ҙы әллә

нисә рәт уҡыным. Ай-ай ниндәй идея унда. Аҡыл! Ниндәй изге һүҙ ул ҡобайыр тулы!!!

Ғүмерен биреп ағыулы һыу эсә бит Урал-батыр. Әле беҙҙең М. Ғафури, Р. Ниғмәти, М. Кәрим, Р. Ғарипов кеүек шәхестәр булған саҡта беҙ күкрәк киреп йәшәргә тейеш.

Беҙҙең эпос, ҡобайыр бар икән- тимәк, нигеҙ, идеология бар тигән һүҙ Терәк бар! Уны бит аса белеү кәрәк! Ә беҙҙең халыҡ бик көслө, киләсәкле ул!

Тормош әхлаҡ, тәртип, бары ла фольклорҙа. Фольклор – донъя мәктәбе. Ғәҙеллек законы унда бар.

– Фольклор белемдең нигеҙе минең өсөн. Башҡорт халыҡ йырын кеше белмәһә, башҡа әҫәрҙәрҙе белмәһә – ул тулы рухлы кеше була алмай.

– Кем ул сәсән?

– Бына алдымда ултыра лаһа! (Миңә ҡарап ихлас йылмая, көлә. – Р.С.)

– Яуап бар ул! Һәр кем үҙенсә яуап бирә. Һүҙлектән дә ҡарағыҙ! Иң оҫта кеше ул! Һәр яҡлап ! Уны ҡәҙер итеү кәрәк .Белеү кәрәк ижадын да өйрәнергә. Ул сәсәнде күрҙем дә белдем түгел. Уның уйын, күңел донъяһын,ижад итеүен , рәтен –кем белә?!Беләбеҙме? Кем тикшергән әле ?

– Сәбилә апай, ә уның, сәсәндең изге бурысы ниндәй?

– Телебеҙҙе һаҡлаусы – сәсән, әҙәпкә өйрәтеүсе – сәсән , яҡшыны ярып әйтеүсе – сәсән ! Шул.

Кеше машина кеүек хәҙер , хәтергә һалғанды компьютерҙа тотоп йөрөй. Үҙе уйламай. Фекер тупламай, уҡымай. Хәтергә һалыу юҡ, ятлау юҡ,ялҡау, Компьютер барын бирә бит , ниңә ятларға??! Был катастрофа була! Кешелек хәтерен юғалтһа – бөтә...

Ә сәсән-хәтер һандығы! Тимәк, аҡыл төбө...

– Ҡатындар холоҡһоҙланды. Тәмәке тарта, эсә, өҫтән йөрөй, ип тигәнде онотто.

Тәртип ҡатындан башлана. Улар тоторға тейеш ғаиләне! Улар Илде лә тоторға тейеш! Ә хәҙер күпме ана, сит илдәгеләре, уҫал – уҫал ҡатындар телевизор ярып һуғышҡа өндәй. Улар ҡатын, Әсә түгел ул! Айырылыу, ғаиләне тотмауҙа ла ҡатындар ғәйепле ...

– Бөгөнгө заманда ни нәмә бара ул? Ни булды кешеләргә, донъяға?

– Америка бер нәмәнән генә ҡурҡа – Ер түңкәрелеүҙән генә! Башҡа нәмә уға сүп! Уны, ул илде оятлы итеү мөмкин түгел. Ул ил яман сиргә батҡан. Уның ижады, фольклоры юҡ. Сөнки килмешәк халыҡ.Тормош әхлаҡ, тәртип, бары ла фольклорҙа. Фольклор – донъя мәктәбе. Ғәҙеллек законы унда бар. Фольклор белемдең нигеҙе минең өсөн. Башҡорт халыҡ йырын кеше белмәһә, башҡа әҫәрҙәрҙе белмәһә – ул тулы рухлы кеше була алмай.

– Шағирлек һәм шәхеслек бәйлеме?

– Эйе! Әлбиттә ! Шәхес патриот булһа ғына ул көслө була. Көслө ижады була, Шағир була.Тыуған илдән китһә – ул шағир түгел! Был минең фекерем!

Тыуған ил – беҙҙең характер ошонда, ер-һыуҙы яратыу – беҙҙең ҡанда! Рәсәй ҙә тыуған, йәшәгән ер". Тупланған Илебеҙ. Әммә мин Башҡортостандан башҡа ерҙә йәшәй алмайым! Ул йәшәү түгел! Самолеттан сәфәр йөрөп төшкәс тә илай башлай инем. Ул бөтөн нәмә, бөтөн донъя – миңә Тыуған ил! Ғүмергә лә китмәç инем!

Башҡортостаным, халҡыбыҙ һәйбәт! Изге күңелле, матур халыҡ ул – беҙҙә. Ер шарын тоторға кәрәк. Ошо халыҡ, беҙ тотабыҙ. "Бушҡа үҙегеҙҙе татар тип атанығыҙ!", – тим мин, беҙҙең республиканың ҡайһы бер районданғындағы халыҡҡа. Башҡорт булып йәшәү бәхет ул!!!

Кирбес йортта З.Вәлиди эшләгән. Мин уҡыған мәктәптә Зәки Вәлиди һынын эшләп ҡуйғандар Республика краевед музейы йортонда. Ошо була изге хәтер! Шул саҡта ғына ил, халыҡ мәнге була. Башҡортостанда йәшәһең икән – һин башҡорт! Ҡәҙер итә лә бел Илде, ерҙе. кешене!

**8.Хәйретдинова Фатима**. 1955 й.т., "Селтәр" ансамбле етәксеһе. Өфөлә 30 йыл йәшәй. Оçта бейей, йырлай, бер-нисә халыҡ (башҡорт) бейеүҙәре һалған, тамашаларға сценарийҙар яҙа, режиссер . Башҡорт Дәүләт педагогия институтын тамамлаған, "Башкирочка" халыҡ бейеүҙәре ансамле солисы булған (1976-1980).

**Соматикаһы:** Ҡара күҙле, тәбәнәгерәк буйлы, көләс, һылыу йөҙлө, мыҡты кәүҙәле, урта буйлы, теремек., етеҙ хәрәкәтле. .Ижади шәхес. Бик еңел аралаша, күңелсәк, алсаҡ холоҡло.

**Тарих**

Аҫылбикә тигән ҡатын ире Йәнтүрә менән 1812 йыл яуға киткәндәр. Еңеп ҡайтҡандар. Асылбикәгә миҙал биргәндәр.Халыҡ бик күтәргән уларҙы. Ошо тарих буйынса Зөлфиә Ҡудашева менән икебеҙ бейеү һалдыҡ! (Ҡудашева Зөлфиә – бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ артисы).

**Бейеү һамағы**

Итек кейеп, ситек кейеп,
Әй бейеп килеүҙәре лә,
Бейеп тә йөрөүҙәре!
Әлләйем, Рәхимә,
Әлләйем, Фатима.

Кәмләмәгеҙ, хурламағыҙ
Әллә кемдең килендәре лә,
Килендең килеүҙәре!
Әлләйем, гөлләйем,
Әлләйем, Фатима!

Ҡашмауҙарын сылтыратып,
Өйөрөлә уртала ла,
Өйөрөлә уртала.
Киленемә һүҙ әйтмәгеҙ,
Бейей-бейей оҫтара ул,
Бейей-бейей оҫтара!

Әлләйем, гөлләйем,

Нәсимә, Сәлимә,

Әлләйем, гөлләйем,

Сәбилә, Фатима!

Арғы яҡтан берәү килә,

Йәшел таяҡ таянып та,

Йәшел таяҡ таянып.

Бара торғас бейеп китте

Бөйөрөнә таянып та,

Бөйөрөнә таянып!.

Итеккәйгенәһе лә лә,,

Ситеккәй генәһе лә лә ,

Ситекәй генәһе!

Бейеүгә килешеп тора

Һөйәккәйгенәһе лә-лә.

Һөйәккәйгенәһе лә!

Икенсе ғаиләнән булһа ла, орлоҡ ҡалдырыу булған. Йәҙни, ҡыҙҙы ситкә биргәндәр.

## *Хөббитдинова Нәркәс Әхмәт ҡыҙы яҙып алған материалдар*

**1.Кусимова-Исхаҡова Альбина Хажмөхәмәт ҡыҙы**, Әбйәлил район үҙәге Асҡар ауылында 1938 йылдың 25 ғинуарында туғыҙ балалы ғаиләлә тыуған. 1957 йылдан алып Өфөлә йәшәй. Тегенсе һөнәренә проф.техникумда белем алғандан һуң Өфө дәүләт нефть институтында белем алып, инженер һөнәренә эйә булған. Хәҙер – хаҡлы ялда. “Селтәр” этностудияһының әүҙем оҫтаһә. Ике бала әсәһе.

**Соматикаһы:** бәләкәй буйлы ҡаҡса кәүҙәле, сал сәсле, зәңгәр күҙле, тик тормаҫ теремек башҡорт ҡатыны.

**Тарих башы**

Альбина Кусимова-Исхаҡова Белемде тәүҙә Асҡар мәктәбендә рус класында ала, һуңынан, әсәһе сирхау булып, күп ваҡыт больницала ятҡас, ағайҙары, өләсәйе ҡулында тәрбиәләнә, күп ваҡыт Әбйәлил районы менән сиктәш булған Силәбе өлкәһе Мәғнит ҡалаһында ла уҡый. Күпселек шул Мәғниттә йәшәгән. Йәйгеһен генә апай-һеңлеләре менән әсәһе янына ҡайтыр булған.

Бөгөн Альбина Хажмөхәмәт ҡыҙы тәүгеләрҙән булып башҡорт милли кейемен, биҙәүестәрен тергеҙеп, халыҡҡа кире ҡайтарып, популярлаштыра башлаған, уларҙы хатта ки билдәле бер трендҡа әйләндергән оҫтабикәләрҙең береһе.

Боронғоно кире ҡайтарып, уны тергеҙеү, тегеү, яһау кеүек эшкә уның Кусимова Мәфрүзә апайы юл һала. Апайы уның тегеүгә лә, бәйләм бәйләргә лә ныҡ оҫта була. Үҙе Ишембай ҡалаһында йәшәгән,

фольклорҙы күп белгән. 1990 йй. Мәскәүҙә, Парижда уҙғарылған башҡорт мәҙәниәте көндәрендә ҡатнаша, үҙ ҡулдары менән теккән милли костюмдары бар, фольклор төркөмө менән сығыш яһап, бар халыҡты хайран ҡалдырып ҡайта. Шул апайы биҙәүестәрҙе лә беренселәрҙән булып тергеҙә, үҙ ҡулдары менән селтәр, түшелдерек, ҡашмауҙар яһай. Ҡомары Альбина һеңлеһенә лә күсә. Үҙе менән бәхилләшкәндә, ҡашмау бүләк итеп ҡалдыра. Һәм ул, хаҡлы ялда булған оло ҡатын, ейән-ейәнсәр өләсәһе (уны Сыңғыҙ ейәнен Республика БСТ "Тамыр" балалар тапшырыуына етәкләп алып килгәндән һуң, уны тотош "Тамыр" өләсәһе" тип атай башлайҙар), ниһайәт, ғүмере буйына күңелендә алып йөрөгән хыялы – боронғо биҙәүестәрҙе тергеҙеп, тегеү, яһау, халыҡҡа кире ҡайтарыу эшенә ихлас күңелдән тотона.

Әбйәлилдә берәү ҡашмау менән түшелдерек һатыуын ишетеп ҡалып, йәһәтләп барып, хаҡына ла ҡарап тормайынса, һатып ала. Биҙәүестең селтәре лә, ҡашмауы ла ҡаҡшаған була, тәңкәләре ҡат-ҡат итеп тегелгәнлектән күтәрергә, эләктерергә лә ауыр була. Ул ҡиммәттәрҙе Альбина апай урамға тағып сығырға бер нисек тә баҙнат итмәй, үҙ-үҙенән йәлләй. Шулай биш-алты йыл ята һандыҡ төбөндә. Ҡайҙалыр тағып йөрөргә баҙнатсылыҡ итмәй. Селтәрҙе реставрациялағас, ул матурайып, балҡып китә. Бер заман "Салауат Юлаев" опера премьераһына кейеп бара апай. Бөтә халыҡ уға ҡараған кеүек, күңелендә әллә күпме төрлө ҡаршылыҡлы тойғолар уяна, бер яҡтан, ала ҡарғалай ояла кеүек, икенсе яҡтан, ғорурлана, хисләнә. Әммә биҙәүес үтә ауыр булғанлыҡтан, шул килеш уны кейеп йөрөү

уйы унан ҡайта. Икешәр ҡат тегелгән көмөш тәңкәләр, әлбиттә, ауырлыҡ бирә. Шуның өсөн Альбина апай ипләп кенә берәр ҡатын ысҡындырып ала ла, яңы селтәр теҙеп, үҙе бығаса йыйған мәрйен, фирүзә таштарын да файҙаланып, әлеге тәңкәләрҙе лә күсереп эшләй. Эше еңел булмай, билдәле, күп көс, ихтыяр, түҙемлек һәм маһирлыҡ талап итә ул. Шулай ҙа үҙенә тип тәүге биҙәүесте эшләй ул. Ҡайҙа ғына йөрөһә лә, мәрйен, фирүзәләрҙе йыйып йөрөй ҙә, иҙеүҙәргә теҙә икән.

Шул замандан алып, иҙеүҙәр яһай башлаған. Хәҙер ҡайҙа йөрөһә лә, бергә эшләгән (“Селтәр” төркөмө) ҡыҙҙарға үҙе яһаған иҙеүҙәрҙе таратып йөрөй, матур итеп кейеп йөрөһөндәр, тип.

**Альбина апайҙың тарихы**

Ғаиләһендә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер ҡомартҡы ла ҡалмаған. Һуғыш осоронда самолет, танктар эшләргә тип башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан ана шул тәнкәле биҙәүестәрҙе, ҡашмау, селтәр-фәләндәрҙе күпләп тапшыртып, ебәргәндәр. Бигерәк тә уны комсомол комитеты етәсеһе булған Ноғоман исемле ағайы, әсәһенә килеп, апай, һин иң беренсе булып, әйберҙәреңде колхозға алып барып һал үрнәк итеп, тип өгөтләгәс, бармай булдыра алмаған. Әсәһе шулай комсомол активисы булған ҡустыһының һүҙен йыҡмайым тип, ҡырып һепереп, булған бөтә биҙәүестәрен, балдаҡ-беләҙектәренә хәтлем алып барып тапшырған. Әммә ғүмер буйына үкенә әсәһе. Бигерәк тә, һуңынан бер түрә ҡатынының бармағында алтын балдағын таный, шуға ныҡ ҡайғыра... Нисек инде, партия өндәүе буйынса изге эш башҡарған,

фронт өсөн бер нәмәһен йәлләмәйенсә тапшырған, ә был бисә уның балдағын кейеп алған, тип.

### “Беҙҙең тормош – үҙе фольклор ул...”

Беҙҙең тормош, ғөмүмән, фольклорға бәйле бит ул. Беҙҙең тормош – ул фольклор. Әсәйҙәр, олатайҙар, беҙ йәшәгән тормош – ул фольклор тип әйтһәк тә була. Сөнки бөтә нәмә шуның менән эшләнә ине; һыйыр һауа, һамаҡлап, таҡмаҡ әйтеп ултыра, быҙауҙарын имеҙә – шул уҡ хәл, тоғро хәбәр әйтә, һамаҡ ҡоя. Көтөүгә ҡыуғанда йырлай-йырлай бара бит инде. Балаларын да эйәртә. Хәтерләйем, көтөүҙе ҡаршы ала инек, беҙ, шунда балалар йыйылып. Эй, уйнай инек, ниндәй генә уйындар уйнамай инек! Бала сағалар йүгерешәбеҙ, ҡысҡырышабыҙ, һөрәндәшәбеҙ. Һыйырҙарҙы ҡаршы алғас, кем нисек уларҙы алып ҡайта: мин шул тиклем озорная (шаян) булғанмынмы икән, һыйырҙың ҡойороғрна йәбешеп ҡайта торғайным. Һыйыр, бахыр, яратмай, сәбәләнә, ә мин тегенең ҡойороғона йәбешкәнем дә, артынан йүгерәм. Шунан беҙ, ҡыҙҙар, һыуға бара торғайныҡ. Элек вотобпровод булмай торғайны, сүмес менән тондороп ҡына итеп ала торғайныҡ һыуҙы. Бәләкәй генә, ошондай ғна шишмәнән. Тоноп ҡына тора, уны болғатмай ғына алабыҙ. Ҡайтҡан ваҡытта ҡыҙҙар менән бер беребеҙҙе көтөп, коллектив менән ҡайтабыҙ. Берәүҙәр бара ине Таңғатар башына, берәүҙәр Таңғатарҙың аҫтындағы күлдән сығып ятҡан шишмәнән һыу ала... Күлде кәртәләп, һуңынан быуа яһап, аҫтынан шишмәләр ағып сыға ине. Шул шишмәләрҙән дә һыу алып йәшәнек. Асҡар ғүмер баҡый һыуһыҙ интекте, көйәнтәләп, көйәнтәләп һыу ташыныҡ.

## Уйындар

Төрлө уйындар уйнаныҡ. Баҫтырыш уйнаныҡ, төрлө наказаниялар бирә, бирә: һин йүгер, һин һикер, һин йырла тип... “Үгеҙ йөҙөк”, “Өс мөйөш”...

“Өс мөйөш” – өс мөйөшкә баҫалар ҙа, мөйөшһөҙ ҡалған берәү арала тора, шунан мөйөштән-мөйөшкә йүгергәндә, шул артыҡ ҡалғаны урыныңды алырға тырыша инде (һәбәкләшкәндән[54] һуң ҡалған инде. – *Н.Х.*), сос булып мөйөшһөҙ ҡалмаҫҡа тырышаң. Уны төрлөсә уйнай инек. Алдына килеп баҫа ла берәй нәмә ташлап китә. Тегенеһе тороп артынан йүгерә.

Киске уйындар була торғайны. Унда тик өлкәндәр йөрөнө инде. Бкҙ, бәләкәйҙәр, арттарынан эйәреп йөрөр инек.

Уйында гел һуғыш темаһына булды. Мәфрүзә тигән апайым булды. Ул бик дәртле, сая булды. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың атаманы булды инде ул. Улар бер нисәү булды, Зөбәржәт, Мәфрүзә... бөтәһен дә йыйып, ойоштороп, берләштереп, ҡыҙҙар-егеттәрҙе уйынға алып сығырҙар ине. Ауыл буйлап һуғыш уйнарҙар ине. “Партизандар”... Шуларҙың артынан бер эйәрә торғайныҡ. Ҡайһы бер ваҡытта беҙҙе ҡушып ебәрәләр, ҡайһы бер ваҡытта беҙҙе ҡыуып ебәрәләр...

“Партизандар” - ике төркөмгә бүленәләр ҙә, берәүҙәр йәшенә, икенсеһе уларҙы эҙләй инде. Эҙләп табалар тапҡас инде уларҙы йәнәһе атырға алып баралар. Зоя Космондемьяновскаялар кеүек

---

[54] *Һәбәк һайлау.* Уйынды башлау өсөн, «һәбәк» һайлана. Уны былай һайлайҙар. Уйында ҡатнашырға теләүселәр бер- береһенең өҫкә ҡуйылған баш бармағын тота.

«Бер, ике, өс», — тигәнсе, кем тотоноп өлгөрмәй йәки кемдең ҡулы өҫкә сыға, шул кешегә:

— Һин «һәбәк» булдың, — тиҙәр, «һәбәк» башҡаларҙы баҫтыра башлай. Кем дә кем тотола, шул үҙе «һәбәк» булып ҡала. ла, ҡалғандарҙы шул уйынсы баҫтырырға тотона. (Әхмәт Сөләймәновтан).

үҙҙәрен хис итәләр.  Ауыл буйлап, өй буйлап йәшенә торғайнылар ине. Берейе лә ҡапҡа эстәренән ҡыуып сығармайҙар ине, бөтәһенең дә ҡапҡалары асыҡ ине. Йәштәр, бала-сағалар халыҡ менән бергә уйнанылар. Кешенең һарайына барып йәшенәбеҙ. Башҡалар ыңғайына мин дә кеше һарайына барып йәшенһәм, кәзә бәрәсләргә тора. Эй, ҡурҡтым, был ни ғәжәп икән тип! Ул бәрәсләй, ә мин нимә икәнен дә аңламайым... Йәшенеп тороп, ҡай саҡ беҙҙе онотоп ҡайтып бөтә торғандар ине, шул тиклем кеше күмәк уйнар ине...

**Ғәҙәт**

Баш ҡарау ғәҙәте – әүәле коллектив рәүештә баш ҡаратыу ғәҙәте булды. Әкиәт тә иҫтә ҡалған: борон заманда бер әбей ҡыҙҙан башын ҡаратҡан тигән. Әүәле ундай ғәҙәт була торғайны. Кеше ныҡ бетләп йонсой ине. Шулай күмәкләп ултырабыҙ ҙа, бер-беребеҙҙең баштарын ҡарашабыҙ.

**Таҡмаҡтар**

Арғы яҡтан берәү килә, йәшел таяҡ таянып.
Һаҡ! Һаҡ! Һаҡ!
Килә торғас, бейеп китте, бөйөрөнә таянып.
Килә торғас, бейеп китте, бөйөрөнә таянып.

Алай итербеҙ әле, былай итербеҙ әле!
Һаҡ! Һаҡ! Һаҡ!
Киләсәктә Совет илен ҡурсаҡ итербеҙ әле!
Киләсәктә Совет илен ҡурсаҡ итербеҙ әле!

Ары баҫкан аяғыңды бире баҫһаң ни була?

Һаҡ! Һаҡ! Һаҡ!

Бер кәлүшем ҡалған, тием, кире килһәң, ни була?

Бер кәлүшем ҡалған, тием, кире килһәң, ни була?

“Һайт!”, тинән тауышҡа, төлкө ҡасты ҡамышҡа.

Һаҡ! Һаҡ! Һаҡ!

Йоҡлап ятҡандар уяныр беҙ йырлаған тауышҡа,

Йоҡлап ятҡандар уяныр беҙ йырлаған тауышҡа.

**Сыңғыҙ ейәнгә әйткәндән**

Сума үрҙәк, сума ҡаҙ,

Сума үрҙәк, сума ҡаҙ.

Ағын һыуын ярата,

Ағын һыуын ярата.

Сыңғыҙ кемде ярата?..

Өләсәһен ярата,

Олатаһын ярата,

Атаһын ярата,

Әсәһен ярата һ.б.

**2.Вәхитова Әнисә Шәрифулла ҡыҙы** (1959 йылғы): 1959 йылда Башҡортостан республикаһы Әлшәй районы Ташлы ауылында тыуған. Өфө ҡалаһында 1969 йылдан алып йәшәй. Ике бала әсәһе, 27 йыл “Башкирстройматериалы” берексәһендә бухгалтер булып эшләй. Әлеге ваҡытта хаҡлы ялда.

Бала саҡтан әсәһенән отоп алған “Шәүрә килен” йырын йырлай. “Һанай һары” йырын да үҙләштергән. Ҡала мәҙәниәт йортонда ойошторолған “Өфө хәтирәләре” фольклор төркөмөндә әүҙем ҡатнаша. Етәксеһе: Ихсанова Нәфирә Низамитдиновна.

Антропономик күрһәткестәр: урта буйлы, ҡара сәсле (буялған булыуы ихтимал), зәңгәр күҙле, аҡ йөҙлө.

**Шәүрә килен**

Билге лә генә ҡуйҙым, ай, биләнгә,
Шәүрә килен киләм дә генә тигәнгә.
Ҡәнәфер ҙә сәйнәп бөрктөм баҙыян,
Шәүрә килен дә кейгән еләнгә.

Шәүрә килен кейгән дә, ай, еләнден
Итәк-осҡойҙары ла мунсаҡлы.
Айҙы ла ғына көнгә тиңләмәйем
Һылыулығың, Шәүрәкәй, шул саҡлы.

Һауала ғына осҡан, ай, аҫыл ҡош
Ыласын ғына тиһәм дә, биле ала.
Эскенәйем тулып, ай, ут яна
Һүнһен генә тиһәм, бүтән ни ҡала.

***

...Ҡарлуғастың да, бахырҡайҙың, ҡанатында йөн дә юҡ.
Кеше рәхәт ғүмер итә, беҙгә – рәхәәт көн дә юҡ!

(Ташлы ауылынан Миннихана әбей йырлаған оҙон йырҙан иҫтә ҡалған өҙөк).

Бала саҡта аҫалы балаҫ баҫа торғайныҡ инәйҙәргә ярҙам итеп. Инәйгә эйәреп киске ултырыуға йөрөнөк. Шунда төрлө йырҙар йырларҙар ине. Рәхиләнең һөйләшә торған ҡыҙы тиҙәр ине мине. Күп һөйләй торғайным.

**Һанай һары тауы**

Һанай һары тауҙың, һай, башынан

Күренеп кенә ята, ай, ауылым Ташлы.

Тыуған ерен һаҡлап башын һалған,

Башын һалған икән, ай, күп ирҙәр,

Башын һалған икән, ай, күп ирҙәр.

Ташлы ауылы күрке, ай, изге тау!

Быуаттарға ҡалһын, ай, данҡайы,

Быуаттарға ҡалһын, ай, данҡайы.

Быуаттарға ҡалыр, ай, данҡайы!

(Әнисә Вахитова варинаты)

Сәйне шишмәһе һыуынан сәй ҡайнатып эсә инек.

Ауыл ҡыҙыҡтарынан: ике мулла үҙ-ара һуғышып киткән, ти. Һуғыша торғас, береһе әйтә икән: "Туҡта әле, ыштан бауым бәйләйем дә", – тип.

Ташлы ауылында Килен ташы бар.

*Шарафитдинова Лилиә Илшат ҡыҙы яҙып алған материалдар*

**1.Йомағолова Әнүзә Ишдәүләт ҡыҙы,** Белорет районы, Манашты ауылынды 20 июль, 1949 йылда тыуған. Ата-әсәһе уҡытыусы, ғаиләләрендә 5 кеше булған. Әнүҙә Йомағолова ғүмере буйы уҡытыусы булып эшләгән, 2 балаһы бар, 1 ҡыҙ - *Ләйсән*, 1 малай – Урал (юл фажиғәһендә һәләк булған). 90-сы йылдар тирәһенән алып Өфө ҡалаһында йәшәй. Үҙе бик актив, теремек, спорт менән шөғөлләнә, һылыу, итәғәтле ихлас һөйләшә. Күҙҙәре һоро, ҡарашы асыҡ, сәстәре ҡара, бите йоморо, беләкәй танау, уртаса буйлы.

– Фәнүзә Ишдәүләтовна, һеҙҙең өсөн ни ул фольклор, халыҡ ижады?

– Халыҡ ижады – ябай кешеләр ижады ул. Фольклорҙын бик күп төрҙәре була: йыр, легендалар, йолалар, ышаныуҙар. Мин һәр бер нимәгә, халыҡ белеменә ышанам, уҡытыусы булыуға ҡарамаҫтан, шайтанға ла, һыу, мунса, өй эйәләренә лә һ.б. Беҙ уҡығанда Әхмәт ағай Сөләймәнов саҡырып алды ла, әкиәттәрҙе "Үҙең яҙҙың тип әйтергә уйлайһыңмы?" – тип һораны. Минең өләсәйем бик күп белә ине, мин уларҙы яҙып барҙым. Шуға уға "Үҙем яҙҙым", — тинем. Минең эле гөлдәрем үҫеп ултыра, яңынан ултырттым. Бер ваҡыт гөлдәрем һулыны, күҙ тейгән, сихырлағандар. Шулай ҙа була.

– Рухи яҡтан бай һәм сәләмәт кеше, әлбиттә, милләттең яҙмышы тураһында ла уйланыр халыҡ ижадында. Беренсе нәүбәттә, татыулыҡ, дуҫлыҡ, атай-әсәйгә, ололарға йылылыҡ, туған-ара мөнәсәбәттең ихласлығы, үҙ-ара ярҙам итешеүе, тәбиғәткә һаҡсыл

ҡараш, иң мөһиме – ергә, тыуған илгә, туған телгә, халҡыбыҙҙың моңона тартылыу тойғоһо, мөхәббәт, һөйөү орлоҡтары сәсеү кәрәк.

**Әйтемдәр, мәҡәлдәр**

Ағай-эне менән аш татлы.

Алйот юлдаш булмаҫ, ят моңдаш булмаҫ.

Ата-инәһен һөймәгән ҡыҙ яман,

Ҡан-ҡәрҙәшен һөймәгән ул яман.

Туғандарың – ҡул менән аяғың

“Урал-батыр”ҙан:

Яуызға юлдаш булмағыҙ

Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ...

Олоно оло итегеҙ,

Кәңәш алып йөрөгөҙ.

Кесене кесе итегеҙ,

Кәңәш биреп йөрөгөҙ.

Баҫалҡы булһаң, баҫырҙар,

Уҫал булһаң, аҫырҙар,

Сама белһәң, ил ағаһы яһарҙар!

**Бала тыуыу тураһында**

Беҙ үҫкән саҡта атай-әсәйҙәр үҙ балаларына кешенең нисек донъяға барлыҡҡа килгәнлеген анһат аңлатып ҡотола торғайны: “Һеҙҙе беҙ Иҙелдән, Яйыҡтан, Инйәрҙән, Йүрүҙәндән, Әйҙән, Эйектән,

Һүрәмдән, Өçкәлектән һ.б. тотоп алдыҡ”. Йә булмаһа, “Һине торна, ҡауҙы алып килеп ташлап китте”.

Беҙ ни, улар ихлас алдағас, ныҡ итеп ышана торғайныҡ.

Ата-әсәләргә тора-бара тағы ла шундайыраҡ һорауҙар бирәбеҙ: “Һеҙ һыуҙан тотоп алғас, торна килтереп ташлап киткәс, беҙ нишләп һеҙгә оҡшағанбыҙ?”. Өлкәндәр быға ла аптырап ҡалмай, былайыраҡ яуап ҡайтара: “Һыуҙан балалар күү-түүп ағып килә ине, торналар күү-түүп балаларҙы ергә ташлап китте. Әммә беҙ шулар араһынан нәҡ үҙебеҙгә оҡшағандарын һайлап алдыҡ”.йә инде, ошо һүҙҙәргә, хатта алдағандарын белә тороп та, ышанмай ҡара!

**Таҡмаҡ**

Һикереп төштөм баҡсаға,
Егерме тин аҡсаға.
Егерме йыл хеҙмәт иттем
Александр батшаға.

**“Урал-батыр” тураһында**

“Урал-батыр” эпосы – йәшәү һәм үлем тураһындағы тәрән фәлсәфәүи бөйөк әçәр ул. Эпоста тәбиғәт һәм кешелек донъяһы ул – мәңгелек, әммә кешеләр, шулай уҡ тереклек эйәһе быуын-быуын килеп-китеп тора. Кеше ғүмере – мәңгелектәге күҙ асып йомған ара ғына, шулай ҙа кеше донъялағы бар нәмәнән дә көслө һәм өçтөн тора тигән фекер һалынған.

Еңмәне улар үлемде,
Өçтөн булыр улар үлемдән.

XXX

Октябрь проспектына йәнәш Ладыгин урамы бар. Ике ҡатлы өйҙәр ике рәт булып теҙелгәнлектән, уларҙың икенсе рәте рәсәй урамына ҡарай. Һүҙем – ошо ике ҡатлы емерелеп бөткән өйҙәрҙә йәшәгән, йәшлек йылдарын шырпы фабрикаһында, фанера комбинатында эшләп үткәргән оло хеҙмәткә, матур тормошҡа лайыҡ ябай кешеләр тураһында.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла әле был бараҡтарҙағы кешеләр "Күрше хаҡы – тәңре хаҡы", "Яҡшы күрше – яҡты бәхет" тигән алтынға бәрәбәр мәғәнәле ҡағиҙәләргә тоғро булып, матур, татыу, әҙәпле йәшәгән. Беҙҙең халыҡ түҙемле шул, тормош ауырлығы иңгә ишерелеп килгәндә лә йәшәргә, бирешмәҫкә тырыша.

Минең улым, Урал, юл фажиғәһендә һәләк булып, Үзбәкстанда ятып ҡалды. Ошо шиғырым барлыҡ әсәләрҙең кисерештәренә ауаздаш булыр, тип уйлайым.

Балаҡайым, бәғеркәйем,

Ятып ҡалдың ситтәрҙә.

Ярты йәнем үҙем менән,

Ә яртыһы – гүрҙәрҙә.

Төштәремдә: "Әсәкәйем,

Өшөйөм бит, яп, — тиһең, —

Һөйләр инем һағыштарым,

Яҡындарым юҡ", – тиһең.

Ятып ҡалды сит ерҙәрҙә

Йөрәк ярыа сыҡкан бала.

Телгеләнгән йөрәктәрҙән

Һыҡранып ҡаным тама.

Алып, балам, яндарыма,

Ятыр инем, юҡ сара.

Йә, Хоҙай, нимә өсөн,

Бындай ғазап һәм яза?!

# Ҡушымта.

# Тикшеренеүҙәр.

УДК 398

## БАШКИРСКИЙ ФОЛЬКЛОР И ФОЛЬКЛОРИСТИКА В XXI ВЕКЕ: ПРИОРИТЕТНЫЕ МЕТОДЫ ФУНДАМЕНТАЛЬНОГО И ПРИКЛАДНОГО ИССЛЕДОВАНИЙ, ПРАКТИКИ ПРИМЕНЕНИЯ И ПРОБЛЕМЫ ТРАНСЛЯЦИЙ[55]

*Р.А. Султангареева*

*(БГПУ им. М. Акмуллы, Уфа)*

*Работа выполнена при финансовой поддержке конкурса НИР по приоритетным направлениям научной деятельности вузов-партнеров № 65/Н*

Фольклор – свод архаичных артефактов доисторических времен, система жизненных реалий, запечатлевшая ценностные руководства, востребованные в каждом новом витке времени и остро – в период глобальных перемен и кризисов. Масштабное осмысление теории и практики фольклора связано с выходом за рамки филологических наук и активации служения народных творений народу. Содержащийся в фольклоре фонд древнейших культурных информаций, также идеи народообразующих, экологических знаний могут быть расшифрованы при углубленном многоуровневом научном анализе. Комплексный

[55] Академическая гуманитарная наука в XX – начале XXI в.: достижения, тренды и перспективы развития: материалы Международной научно-практической конференции, посвященной 100-летию Ордена Знак Почета Института истории, языка и литературы УФИЦ РАН. В 2 ч. Ч. II. Уфа: ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2022. – С. 267-270.

междисциплинарный подход, апробированный в трудах (1994, 1998 гг.), далее расширенный с привлечением этнографических, археологических, мифоритуальных, антропологических и др. единиц, актуализируется и ныне. Новые подходы позволят установить головной код культуры и престижность башкирского фольклорного наследия. Собственно-фольклористический подход, принципиально отличающийся от филолого-литературоведческого изучения, все более важен. Интерпретации фольклора как «творчества дикарей, созданного из-за страха перед силами природы», как «мира вымыслов, фантазий» не отвечают сути и замыслам вековых наследий. Фольклор – свод знаний о Человеке, которые еще не оценены и не включены в оборот правовой науки, антропо-логии, социологии, обществоведения. Народное учение о правоценностности человека – «кеше хаҡы», регулятивные, управленческие функции йола и нормы намыҫ-чести еще системно не рас- крыты в их первородном значении.

Фольклор народов создан в неразрывной связи с их мировидением, укладом, верованиями, языком, обычаями, потому важно глубинное освещение связей «архетип–вербализация–история–творец–время–традиция–практика». Подчеркнем, что постижение «изнутри» семиотики, культурных кодов, идей национального фольклора невозможно по канонам определенных школ и теорий. Объективация идеологии башкира возможно только на основе собственных инструментов анализа, подсказываемых фольклорным материалом, представленным самим народом о себе. Следовательно, исследователь должен обладать безупречным знанием языка и его

подтекстов, глубинным долголетним постижением ментальности, психологии, предпочтений народа, что актуализирует фактор «этнического ученого», особо важного в XXI веке.

Фольклористика ныне – важнейшая отрасль науки, призванная играть первостепенную и ключевую роль в выработке стратегических направлений в социально-экономическом, духовно- нравственном развитии обществ и народов. Она современна передовыми акцентами на социальный фактор, единством многосторонних исследований культурной информации. В полевой фольклористике приоритетна фиксация всего, что попадает в поле творчества, а не только жанров, жанровых форм, обрядов и др.[56] Принцип комплексности и многостороннего охвата в собирании реализуется нами с 1982 года, совершенствуется в каждой новой экспедиции, созданы сборники по фольклору башкир (куваканцев, табынцев, тилявцев) Учалинского района РБ, Саратовской, Самарской, Пермской областей РФ. В материалах Ишимбайского (2014–2015 гг.), Салаватского районов (2018 г. – две экспедиции) содержатся сведения не только по жанрам фольклора, но и по антропологии, соматике, философии, этнопсихологии, отношению носителей фольклора к политике, к современным реформам и т. д. В таком плане полевая работа является принципиально важной.

Акцент на научно-теоретический, социальный фактор национального фольклора –поворотный в современной науке. Теоретическое изучение фольклора ставит острые задачи по:

---

[56] Путилов Б.Н. Теоретические проблемы современной фольклористики. СПб., 2006. С. 13.

1) становлению визуальной антропологии и фольклористики (записи фольклора с учетом арсеналов этнографии, антропологии, лингвистики, языковой картины, локальных особенностей, родовых атрибутик и др.);

2) созданию научных разделов – «хореографическая фольклористика», «театральная фольклористика», «музыкальная фольклористика» и др.; 3) программному изучению башкирского городского фольклора.

Большой опыт полевой работы позволяет утверждать, что этногенная, историко-генеалогическая память башкир, коренного народа Урала, обнаруживает по сравнению с другими особую устойчивость во времени и системность, приверженность к традициям. Аргументом стали находки и сделанные нами видеозаписи аутентичного исполнения по живой памяти объемных текстов эпосов «Урал-батыр» (2010), «Заятуляк и Хыухылу» (2018), «Кузыйкурпяс и Маянхылу» (2019), также редких народных песен, ритуалов и др.

Сегодня фольклорное наследие зачастую ограничивается пространствами «праздников», «фестивалей», тематических концертов и т.д. На фоне доминантных тенденций «сабантуйно-зрелищного», увеселительного восприятия фольклора выхолащиваются его первозамыслы, содержание, что поневоле отдаляет поколения от собственных корневых кодов Духа. Обстоятельства актуализируют разработку норм контроля механизмов трансляций фольклора.

Назрело создание школы изучения, систематики башкирского эпоса «Урал-батыр» и других мифоэпосов с учетом выявленных новых данных о гидросферных, небесных, климатических изменениях и об их переложении мудрецами-сказителями. Пришло время включения ценностных заповедей эпоса «Урал-батыр» в современное право. Перспективны задачи выявления пророческого начала, целительских свойств исполнения и слушания эпоса, особенностей сказительского дара, также уточнения норм, традиций передачи эпоса.

